ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 май - июнь (һабанай - һөтәй) 2022

№21 (1011)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Еңеүсе батыр булыу...**
ир-егеттең иң ҙур баһаһы



6

**Балаларыбыҙҙы...**
ун йәштән һуң нимәгә өйрәтергә?



8-9

**Беҙҙең мәктәптәрҙә малайҙар...**
"ук юнырға" түгел, "тун бесергә" өйрәнә



10

**Киләсәккә хат яҙам...**



11

**ТВ-программа** 14

**АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!**

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 июндән 16 июнгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Балаларҙа нисек илһөйәрлек тәрбиәләргә?



***Фәтих ИМАНҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Үткән быуаттың совет осоро йылдарында ата-әсәләрҙең дә, уҡытыусы һәм тәрбиәселәр алдында ла "Балаларҙа нисек илһөйәрлек тәрбиәләргә?" тигән һорау бөгөнгөләй ҡабырғаһы менән тормағандыр, моғайын, ни өсөн тигәндә, ул осорҙа балаларҙы тәүге кластан уҡ октябрят итеп, аҙаҡ пионер, комсомол сафына ҡабул итеү традицияһы үҙе үк уҡыусыларҙы яҡшы уҡырға, тәртипле булырға ғына өндәп ҡалманы, ә илебеҙҙең лайыҡлы киләсәге булып үҫергә лә әҙерләне, улар алдына аныҡ маҡсат ҡуя ине. Унан ҡала 1 май, 9 май, 23 февраль, 7 ноябрь, 22 апрель, 22 июнь көндәрен билдәләү саралары ла бала күңеленә илебеҙ менән ғорурланыу, уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойғолары һеңдерә ине.

Күп кенә класс етәкселәренән һәм тәрбиәселәрҙән: "Бөгөн балаларҙы ниндәй идеалдарҙа тәрбиәләргә, улар алдына ниндәй рухи маҡсаттар ҡуйырға?" - тигән һорауҙарҙы ишетергә тура килгеләй. Был һорауҙарға бөгөнгөбөҙҙөң көнүҙәк мәсьәләләре бик яҡшы яуап бирә, миненсә: илебеҙ хәүефһеҙлеген, уның именлеген, ҡеүәтен яҡлау һәм һаҡлау өсөн белемле, физик яҡтан әҙерлекле, кеселекле һәм кешелекле быуын тәрбиәләргә! Ил ҡаҙаныштарын күрә, баһалай белеү, уны артабан ишәйтеү хаҡына үҙеңде әҙерләү, камиллаштырыу - тимәк, илгә кәрәкле белгес булып етешеү. Ошо түгелме ни йәштәрҙә илһөйәрлек тойғоһононң нығыныуы? Эйе, ләкин был ғына ла түгел. Үҙ асылыңды, нәҫел тамырҙарыңды, шәжәрәңде өйрәнеүҙән, белеүҙән башланалыр, тимен, илһөйәрлек тойғоһо. Иң тәүҙә атаң-әсәңә, яҡындарыңа, туған телеңә, халҡың тарихына, уның рухи ҡиммәттәренә, тәбиғәт байлыҡтарына һөйөүҙән башланалыр ватаныңа һөйөү, илеңә тоғролоҡ.

Был йәһәттән илһөйәрлек тәрбиәләү иң тәү сиратта бала аңына ғаиләлә һеңдерелергә тейеш. Бының шулай икәнлеге әле яңыраҡ ҡына булып үткән Бөйөк Еңеү тантанаһы сараларынан да асыҡ күренде: яугир олаталары портреттарын тотоп, "Үлемһеҙ полк" парадына сыҡҡандар араһында йәштәр генә түгел, һалдат кейемендәге кескәй балалар ҙа байтаҡ ине. Ил өсөн ғүмерҙәрен аямаған быуын ҡаһарманлығын хөрмәтләү, ташҡын булып ағылған халыҡ ихтирамын күреп-белеп, шунда ҡатнашып үҫкән балалар, әлбиттә, илһөйәрҙәр булып үҫәсәк!

БАШ ЙОРТТА

# ҠЫҢҒЫРАУЛЫ БАЙРАМ БЕҘҘӘ!

**Ошо көндәрҙә республиканың белем усаҡтарында Һуңғы ҡыңғырау тантаналары уҙҙы. Быйыл Башҡортостанда 17 меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыһы, шулар араһында Өфө ҡалаһының 119 мәктәбен 4853 бала тамамланы. Улар өсөн 25 майҙа "Торатау" Конгресс-холы эргәһендәге майҙансыҡта байрам саралары ойошторолдо. Сығарылыш уҡыусылары йылдағыса мәктәп вальсын башҡарҙы, бейеү флешмобында ҡатнашты, ә уҡытыусылар күмәкләп хор менән йырланы, ата-әсәләр үҙенсәлекле ҡотлау менән сығыш яһаны. Өфөләге милли белем усаҡтарының уҡыу йылына йомғаҡтарын барлау, бөгөн алда торған мәсьәләләр һәм мәшәҡәттәр тураһында белешеү маҡсатында уларҙың етәкселәренә мөрәжәғәт иттек.**

Мәғариф



(Дауамы 7-се биттә).

12+

БЫЛ АЙҘА...

**Йәйҙең тәүге айын юҡҡа ғына һөтай тимәгәндер халыҡ: был осорҙа ыуыҙ ғына һутлы үлән һәм сәскәләр менән туҡланыусы һәүкәштәр ҡырҙан елендәре тиртеп ҡайта һәм хужабикәһенә биҙрә-биҙрә һөт бирә. Безәүкәйҙәре лә мандып, көрәйеп китә. Ауыл ерендә һыйыр аҫраған ғаиләләрҙең табыны мул, тамағы һыйлы шуға күрә: һөт, ҡаймаҡ, май, ҡатыҡ, ҡорот, эремсек - бөтәһен дә эшләй, ағын эшкәртә, тамсыһын да әрәм итмәй уңған хужабикә. Артып ҡалғанын һатып та килем ала әле улар. Тап ошо ваҡытта ҡышҡылыҡҡа сәскә кеүек һары май ҙа туплана.**

# РУХ ҺҮНМӘҺӘ, ИЛ ҮЛМӘҪ



...1 июнде календарға Балаларҙы яҡлау көнө тип билдәләү менән бер рәттән, Бөтә донъя һөт көнө тип белеп ҡуйғандар, ахырыһы. Сабыйҙың донъяға тыуғас та иң тәү татыған ризығы - һөт. Әлбиттә, әсә һөтө. Ә бына ниндәйҙер сәбәптәр менән күкрәк һөтөнән мәхрүм кескәйҙәргә яһалма һөт, ә инде үҫә биргәс бөтөн балаларға ла "Пейте, дети, молоко, будете здоровы" тип (өйҙә, балалар баҡсаларында, мәктәп ашханаларында), ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйыр һөтө эсергә мәжбүр итәләр, унының һаулыҡҡа файҙалы булыуына ысын күңелдән ышана өлкәндәр. Һәм ысынлап та һөт алыштырғыһыҙ минераль матдәләр һәм витаминдарға бай, бигерәк тә ауыл һөтө. Ләкин ундағы кальций организм тарафынан тимер үҙләштереүҙе тотҡарлай, өҫтәүенә, майҙар һәм аҡһым, лактоза, казеин шулай уҡ ауыр эшкәртелә, ти табиптар.

...Унының ҡарауы, ауыл һөтө экологик таҙа ризыҡ, ә бына һөт заводтарында сәнәғәт эшкәртеүе үтеп, "кондицияға" еткерелгән һәм ҡала магазиндарына ебәрелгән һөттөң сифаты беҙгә бик яҡшы мәғлүм. Унда нимә генә ҡушмайҙар: һыу ҙа, үҫемлек (рапс, мамыҡ, пальма) майҙары ла, хатта, ҡайһы бер эксперттар раҫлауынса, он, крахмал, аҡбур һәм оҙаҡ һаҡланһын өсөн фенол менән формальдегид берләшмәләре, антибиотик... Ышанырғамы быға, юҡмы? Һәр хәлдә, магазин һөтөнөң ни икәнен үҙебеҙ ҙә тәмләп беләбеҙ - унда һөттөң бер тәме лә юҡ. Был күберәк Өфөлә эшкәртелеүсе һәм сит төбәктәрҙән килтерелгән продукцияға ҡағыла, ә бына Башҡортостан районларында етештерелгән һөт аҙыҡтарын ҡәнәғәтләнерлек тип әйтергә яраһа ла, урындағы бәләкәй һөт предприятиелары ябылып бөтөп бара. Иң тәүҙә Дәүләкән, унан Миәкә комбинаттары эштән туҡтағайны, әле берҙән-бер тип әйтерлек сифатлы һөт етештереүсе Яңауыл заводының тәмле ризыҡтары ла магазин кәштәләренән юғалды... Имеш-мимештәргә ҡарағанда, Яңауыл һөт заводы менән унын фермаһын миллиард тәңкәгә ситтәргә "осороу" хаҡында йыл башында уҡ һүҙ бара тиҙәр ине, әлеге хәлдәре хаҡында - ләм-мим. "Ҡарлыман ҡуйыртылған һөт комбинаты" тирәләй ҙә ниндәйҙер ығы-зығы ҡуйыртыла: унының тауар маркаһын законһыҙ үҙләштереүсе намыҫһыҙ етештереүселәр күбәйеп киткән, имеш.

...Әйткәндәй, һүҙебеҙ балалар ризығы хаҡында ине бит әле. Һуңғы ике-өс йылда әсәләргә һәм балаларға ярҙам буйынса дәүләт проекты сиктәрендә республикала "Һөт кухнялары" заводтары эшләй башланы. Был һәйбәт, ләкин улар Башҡортостандағы бөтөн балаларҙы ла тәьмин итә алмай, үкенескә. "Һөт кухнялары" менән бушлай фәҡәт аҙ тәьмин ителгән өс йәшкә тиклемге балалы ғаиләләр, шулай уҡ етешһеҙ йәшәүсе имеҙеүсе әсәләр менән ауырлы ҡатындар һәм етем балалар ғына файҙалана ала. Был һөтайҙың исеменә лә, есеменә лә ҡағылышлы әйтеп кителергә тейешле бер кәлимә булды, тип ҡабул ҡылыр уҡыусыбыҙ һәм һығымтаны үҙе яһар.

...Тыуасаҡ ай үҙенсәлектәрен тасуирлауҙы, юғиһә, һауа торошона күҙаллауҙан башлай торғайныҡ бит, ләкин һуңғы йылдарҙың көтөлмәгән һәм бер ниндәй логикаға һыймаған ҡылыҡтары синоптиктарҙы алдан фаразлауҙарҙан бер аҙ айбанырға мәжбүр итте, сөнки йыш ҡына уларҙың прогноздары аҡланмай һәм көн тороштары киреһенсә килеп сыға башланы. Был

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Балаларҙа нисек илһөйәрлек тәрбиәләргә?

***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Күмертауҙағы 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** Балаларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү ғаиләлә, атай йортонда башлана. Тыуған илен, халҡын, телен, тыуған ерен һөйгән кешенең генә күңелендә ватансылыҡ рухы, ата-бабалар аманатына тоғролоҡ тойғоһо һаҡлана. Күп ғаиләләр балаларын махсус рәүештә илһөйәр итеп тәрбиәләйем, тип, маҡсат ҡуйып та эшләмәйҙер, сөнки был ҡәҙимге тәбиғи тәрбиәнең төп нигеҙе бит ул. Әгәр ата-әсә иң тәүҙә үҙҙәре илен, телен, халҡын яратҡан рухлы кешеләр икән, уларҙың балалары ла ошо мөхиттә илһөйәрҙәр булып үҫәсәк. Быны мин үҙ ғаиләм миҫалына таянып та әйтә алам, тик берүк маҡтаныу тип ҡабул итмәһендәр ине, сөнки иманым камил: рухлы һәр башҡорт ғаиләһендә лә шулайҙыр, тип ышанам.

Балаларыбыҙҙы кескәй генә саҡтарынан республикабыҙҙың төрлө матур, иҫтәлекле урындары буйлап сәйәхәткә алып сыға башланыҡ. Ҡала һәм район үҙәктәрендәге музейҙарҙы ҡарайбыҙ. Балалар матур итеп башҡорт телендә һөйләшә. Өйҙә быны мотлаҡ талап итәбеҙ. Башҡорт балалар баҡсаһына йөрөттөк, милли мәктәптәрҙә уҡытабыҙ.

"Йәш ғаилә 2010" конкурсында башҡортса сығыш яһап, республика күләмендә һәм ҡала буйынса Гран-при яуланыҡ. 2018 йылда Башҡорт ғаиләһе конкурсында финалға сыҡҡайныҡ. Төрлө сараларҙа ғаиләбеҙ менән әүҙем ҡатнашабыҙ, һабантуйҙар, шәжәрә байрамдарынан ситтә ҡалмайбыҙ.

Халҡыбыҙҙын ғөрөф-ғәттәрен, йолаларын, аш-һыу төрҙәрен әҙерләү серҙәренә төшөнөп, белеп үҫә балаларыбыҙ. Кесе улыбыҙ Мортаза ҡурайҙа уйнай, Ғайсар улым ҡул һуғышы менән шөғөлләнде, ҡыҙыбыҙ Гөлйөҙөм сит илдәргә сәфәрҙәрендә Башҡортостан флагы менән йөрөй, сит ил студенттарын инглиз телендә халҡыбыҙ менән таныштыра. Башҡортса кино, яңы спектакль сыҡһа йәки баш ҡалала берәй милли сара булһа, һәр ваҡыт ғаилә менән барабыҙ һәм ситтән күҙәтеүсе булып тормайбыҙ, ә сараларҙың, ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнайбыҙ, ярыштарҙа, конкурстарҙа ҡатнашабыҙ

Балаларыбыҙ, Аллаға шөкөр, үҙебеҙгә оҡшап, рухлы, илһөйәр булып үҫәләр. Яңыраҡ ил һәм донъя буйынса гөрләп үткән "Үлемһеҙ полк " акцияһына сыҡтыҡ һәм, ғөмүмән, унда йыл да мотлаҡ ҡатнашабыҙ. Минең тыуған Баймаҡ районы Янғаҙы ауылындағы һуғыш ветерандары обелискыһын йыл һайын ғаилә менән ҡайтып матурлайбыҙ, йыйыштырабыҙ. 9 май - Еңеү көнөндә ауылдағы ветерандарға, ололарға бүләктәр таратабыҙ. Был да бит илһөйәрлек сифаттары, ватаныбыҙ хаҡына фиҙаҡәрлек күрһәткән оло быуындарға ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләй. Әлбиттә, һәр бер ир-егет Ватаныбыҙ һаҡсыһы сафына баҫырға, уны һаҡларға әҙер булырға бурыслы.

Йомғаҡлап, шуны тағы бер ҡабатлағы килә, сөнки ҡабатлауҙан хәҡиҡәт яңыра ғына, тиҙәр: әгәр бала башҡорт телен, башҡорт халҡын, тыуған ерен, Башҡортостаныбыҙҙы ярата икән, тимәк, ул оло ватаныбыҙ - Рәсәйҙе лә ярата.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Торатауҙа һабантуйҙар уҙғарыуҙы тыйҙы. "Мин урындағы халыҡ һәм ғалимдар менән аралаштым, - тине Башҡортостан Башлығы. - Беҙ башҡаса Торатау биләмәһендә һабантуй үткәрмәйбеҙ. 60 мең кеше килә, бөтә нәмәне тапап бөтәләр. Ысынында иһә, был - беҙҙең хазина. Был тағы сапсандарҙың оя ҡора торған урыны, улар ҙур стресс кисерә. Торатауҙы саралар үткәреү урыны булараҡ һыҙып ташлайбыҙ", - тине республика етәксеһе һәм туристар өсөн бөтә шарттар булдырырға ҡушты.

✓2022 йылда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы ковидҡа тиклемге ваҡыттағы кеүек ойоштороla. Аттестат алыу өсөн ун беренселәр рус теленән һәм математиканан һынау тота (юғары уҡыу йортона инергә йыйынмаһа ла). Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһының төп осоро - 26 майҙан 2 июлгә тиклем, өҫтәмә осор - 5 -20 сентябрҙә. Имтихандарҙа 17 545 кеше, шул иҫәптән 16 357 ун беренсе класс уҡыусыһы ҡатнашырға йыйына. Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусылар араһында иң популяр фәндәр - профилле математика һәм йәмғиәтте өйрәнеү. Информатика һәм ИКТ, биология, физика, химия, тарихҡа ла ҡыҙыҡһыныу юғары.

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратовҡа Үзбәкстанды күрергә теләге булған яҡташтарыбыҙ өсөн турпакет буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. "Сәмәрҡәнд - иҫ киткес матур һәм туристар өсөн ҡыҙыҡлы ҡала. Беҙҙә Ташкентҡа һәм Наманганға тура рейстар бар, унда ҡалалар араһында юғары тиҙлекле поездар йөрөй. Беҙҙең бурыс - туристарыбыҙ өсөн уңайлы турпродукт булдырыу", - тине Радий Хәбиров.

✓Республика етәксеһе Үзбәкстанға эшлекле сәфәр һөҙөмтәләре менән уртаҡлашып, былай тине: "Беҙҙе Үзбәкстандан йәшелсә һәм емеш-еләк ташыу ҡыҙыҡһындыра. Башҡортостан иһә киптерелгән һөт, көнбағыш майы, инкубация йомортҡаһы менән тәьмин итеүҙе арттырыр, ауыл хужалығындағы һәм умартасылыҡтағы тәжрибә, технологиялар, ғилми ҡаҙаныштар менән уртаҡлашыр. Шулай уҡ төбәккә Башҡортостанда етештерелгән ауыл хужалығы техникаһын оҙатыу планлаштырыла. Сәмәрҡәнд өлкәһенән текстиль, туҡыма, трикотаж һәм тегелгән әйберҙәр ташыу ойоштороласаҡ".

✓ ***Ике Ватан һуғышында ла еңеү илебеҙ халыҡтары ҡаһарманлығы, берҙәм илһөйәрлек тойғоһо, рух ныҡлығы арҡаһында яулана, сөнки халҡыбыҙ ғәҙеллек өсөн илен, ерен, ғаиләһен яҡлаусы булып һуғыша.***



юлы ла июндең нисек килере хаҡында синоптиктарҙың фекере төрлө һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы. Берәүҙәре майҙың "холко" июнгә күсәсәк, тиһә, икенселәре, шул иҫәптән, Рәсәй Гидромет үҙәк етәксеһе Роман Вильфанд был айҙа яуын-төшөм һәм һауа температураһының нормаға ярашлы йә бер аҙ ғына юғарыраҡ кимәлдә буласағы хаҡында тәкрарлай. Ә бына БДУ профессоры, география фәндәре докторы Ауфар Гәрәев былтырғы эҫелек һәм ҡоролоҡтоң рәттән ҡабатланмаясағына һәм быйылғы йәйҙең дымлыраҡ, бер аҙ ямғырлыраҡ булыры өмөт бағлай. Асылда нисек булырын бары тик "күк кәнсәләре" генә хәл итә.

...Ҡояшлы, йәмле, тыныс ай булыуына ҡарамаҫтан, июндең кешелек тарихына онотолмаҫ биттәр яҙып ҡалдырған дәһшәтле даталары ла бар. Тәүгеһе унаң 1812 йылдың 24 июнендә таңғы сәғәт 6-ла Наполеон армияһының бер ниндәй иғланһыҙ Рәсәйҙең көнбайыш сиге булған Неман йылғаһын аша сығып, илгә баҫып инеүе һәм беренсе Ватан һуғышының башланыуы. "Рустарҙы уларҙың боҙло төбәктәренә ҡыҫырыҡларға кәрәк, улар цивилизациялы Европа эштәренә ҡыҫылмаһын. Мин солоҡҡа Мәскәүҙә ҡул ҡуясаҡмын!" тип белдерә тәкәббер Бонапарт. Рәсәйҙең төрлө милләт һәм ҡатлам халыҡтары, хатта һәнәк менән ҡоралланған крәҫтиәндәргә тиклем, быға ҡәҙәр күрелмәгән берҙәм патриотик рух менән дошманға ташлана. 28 атлы полктары менән һуғышҡа ингән һәм уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс менән ҡоралланған башҡорт яугирҙары иң алғы флангыларҙа дошманға ябырылып, француздарҙың ҡотон ала, Парижғаса барып етә. Фельдмаршал Кутузов етәкселегендәге Рәсәй армияһы баҫҡынсылар менән бер ниндәй солоҡ килешеүенә лә бармайынса, Наполеондың тар-мар ителгән армияһы ҡалдыҡтарын илдән ҡыуып сығара.

...1941 йылдың 22 июнендә лә мәкерлеге хаттин ашҡан Гитлер совет халҡының татлы таңғы йоҡоһонда - иртәнге сәғәт 4-тә сикте боҙоп инә һәм ҡала-ауылдарҙы бомбаға тота башлай. Гитлер ҙа ил йөрәге - Мәскәүгә ынтыла, ләкин баш ҡаланы һаҡлап һуғышыусы бер генә һалдат та бер генә аҙым да артҡа сигенмәй, һуңғы һуғышсы ҡалғанға тиклем көрәшә. Ҡорал ҡеүәтен, полководецтар талантын, йә булмаһа Александр I батша менән Сталин шәхестәре ролен нисек кенә алға ҡуйырға тырышмаһындар, ике Ватан һуғышында ла еңеү илебеҙ халыҡтары ҡаһарманлығы, берҙәм илһөйәрлек тойғоһо, рух ныҡлығы арҡаһында яулана, кеше факторы төп әһәмиәткә эйә була, сөнки халҡыбыҙ был ике яуҙа ла ғәҙеллек өсөн, баҫҡынсы булып түгел, ә илен, ерен, ғаиләһен яҡлаусы булып һуғыша. Гитлер нацистарын илдән ҡыуып ҡына ҡалмай, совет һалдаттары ярты Европаны фашист баҫҡынсыларынан ҡотҡара, ошонда йәшәгән халыҡтарға азатлыҡ яулап, Европа территорияһында ғына ла 1 млн совет һалдаты башын һала. Ә бөгөн хәтерен һәм намыҫын юйған Европа улар иҫтәлегенә ҡуйылған һәйкәлдәрҙе онтай, тарих асылына хыянат ҡыла. Ләкин халҡыбыҙҙың һынмаҫ илһөйәрлек рухы, тарихыбыҙ ҡиммәттәренә ихтирам бөгөн беҙҙе икеләтә көслө итә. Рәсәйгә теш ҡайраусылар өсөн нигеҙле киҫәтеү ҙә ул: ҡорал менән яҫҡынған - шул ҡоралдан дөмөгөр, ләкин Рәсәй рухын һындыра алмаҫ.

...Июнь календарында тағы ла байтаҡ ҡына иҫтәлекле көндәр һәм байрамдар билдәләнәсәк: Бөтөн донъя ата-әсәләр **(1)**, Эколог, Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау **(5)**, Рус теле, Рәсәйҙә Пушкин көндәре **(6)**, Халыҡ-ара архивтар, Дуҫтар **(9)**, Башҡортостанда Салауат Юлаев көндәре **(11-20)**, Рәсәй көнө, Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө көнө **(12)**, БР Матбуғат һәм мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, Блогер көндәре **(14)**; "БАССР сиктәрен киңәйтеү хаҡында" ғы ВЦИК Декретына ярашлы, баш ҡалаһы Өфө итеп, "Ҙур Башҡортостан" ойошторолоуға - 100 йыл **(14 июнь, 1922 йыл)**, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына - 465 йыл **(1557)**, Башҡорт халҡының милли батыры, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың тыуған көнө **(16 июнь 1754-1800)**, Атайҙар һәм Медицина хеҙмәткәрҙәре көндәре **(19)**, Хәтер һәм ҡайғы көнө - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн **(22 июнь, 1941)**, 1812 йылғы Ватан һуғышы башланыуға - 210 йыл **(24 июнь, 1812)**, Славяндарҙың дуҫлыҡ һәм берҙәмлек көнө **(25)**, Наркотиктар ҡулланыу һәм уларҙың законһыҙ әйләнешенә ҡаршы халыҡ-ара көн **(26)**, Рәсәй йәштәре һәм Бөтөн донъя балыҡсылар көндәре **(27)**.

**...Һотайҙа тыуғандар:**

**1 -** хирург, медицина фәндәре докторы, академик, 1994-2011 йылдарҙа БДМУ ректоры, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Вил Тимербулатовҡа - 70 йәш** (1952).

**10 -** башҡорт яҙыусыһы, драматург, фольклорсы **Фазыл Туйкиндың тыуыуына - 135 йыл** (1887-1938).

**-** бейеүсе, балетмейстер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Йәүҙәт Бикбирҙиндың тыуыуына - 70 йыл** (1952-1996).

**-** журналист, яҙыусы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия лауреаты **Гүзәл Ситдиҡоваға - 70 йәш** (1952).

**15 -** башҡорт шағиры, "Йәш көс" гәзите мөхәррире **Шамун Фидаиҙың тыуыуына - 120 йыл** (1902-1922).

**-** методист-педагог, педагогика фәндәре кандидаты, РСФСР һәм БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм Почет билдәһе ордендары кавалеры **Төхвәт Аслаевтың тыуыуына - 100 йыл** (1922-1995).

**24 -** М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Сара Буранбаеваға - 55 йәш** (1967).

**25 -** композитор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Роза Сәхәүетдиноваға - 85 йәш** (1937).

**30 -** юрист, сәйәсмән, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, РФ Дәүләт Думаһының 7-8-се саҡырылыш депутаты, БР Ир-егеттәр советы рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең маҡтаулы хеҙмәткәре **Зариф Байғусҡаровҡа - 55 йәш** (1967).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Балаларҙа нисек илһөйәрлек тәрбиәләргә?*

***Зифа ИЛБАҠТИНА, БР халыҡ мәғарифы алдынғыһы, тыуған яҡты өйрәнеүсе:*** Балаларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүҙә, минеңсә, ата-әсәнең (әгәр был имен һәм сәләмәт рухлы ғаилә икән) роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Бала бит тәүлегенең күп өлөшөн ата-әсәһе янында үткәрә. Үкенескә, хәҙер элекке һымаҡ кис әкиәт һөйләүсе, йомаҡ ҡойоусы ата-әсә юҡ кимәлендә, ҡартатай-өләсәйҙәр ҙә йәштәр. Шулай ҙа улар балаларын, ейәндәрен тәбиғәт ҡосағына ял итергә алып сыға ала. Бигерәк тә ял көндәрендә бының өсөн бөтөн мөмкинлектәр бар. Бының менән балаларҙы, берҙән, телефондан айырып алһаҡ, икенсенән, тыуған еребеҙҙең тарихын һөйләп, ер-һыу атамалары менән таныштырып, тыуған яғыбыҙҙың үҫемлектәр донъяһын танытып, ҙур тәрбиә эше башҡарып инек.

Бының өсөн нимә кәрәк? Беренсе сиратта, ошоларҙың бөтәһен дә үҙеңә яҡшылап белеү кәрәк. Беҙҙең атай-әсәйҙәр һуғыш балалары быуыны булғас, көнөтөнө эшләүҙән арып-талып ҡайтып, беҙгә боронғоно, әкиәттәр, тарих һөйләргә ваҡыт та тапмағандыр. Тыуған яғымдың ер-һыу атамаларынан 1-се үҙәк, 2-се үҙәк һымаҡ яңы барлыҡҡа килгән исемдәрҙең таралып китеү сәбәбен мин шунан күрәм. Уның ҡарауы, күпте белгән инәй-олатайҙар һәр ауылда бар. Мин йәшәп киткән ауылда Кубышка тигән урын бар ине. "Аҫаба башҡорт ерендә ҡайҙан килеп сыҡҡан ул Кубышка?" тип һораша башлағас, бер өлкән генә апай ул ерҙең бер ниндәй ҙә Кубышка түгел, ә ҡасандыр Ғөбәш үҙәге булғанын әйтте. Бына шулай юғала атамаларыбыҙ. Был хәл булмаһын өсөн балаларға еребеҙҙе танытыу кәрәк. Үҫемлектәрҙе балалар менән бергә үҙебеҙгә лә өйрәнеү зыян итмәҫ.

"Бәйләнештә"ге сәхифәмдә йыш ҡына тыуған яғыбыҙҙың тәбиғәтен, унда үҫкән үҫемлек, сәскә һүрәттәрен һалырға яратам. Ҡайһыларыбыҙ бит ябай ғына үҫемлектең дә башҡортса исемен белмәй, танымай, юғиһә. Шәхсән үҙемә килгәндә, тыуған яҡтарым тарихына, уның ер-һыу атамаларына ҡыҙыҡһыныуыум көслө булыуы менән Хәйбулла районы Урыҫбай ауылында тыуып үҫкән ҡәҙерле атайым Ғәлиаслан Ғәлиәскәр улы Иҙелбаевҡа бурыслымын. Ул тыуған ауылының ысын илһөйәре ине. Беҙгә, балаларына, тыуған яҡ тарихын, тау һәм йылғаларҙың атамалары, шуларға бәйле риүәйәттәр хаҡында күп һөйләне, Урыҫбайҙың тәбиғәтенә һоҡланып, шиғырҙар яҙҙы. Аҙағыраҡ уның архивынан ошо ауылдың ер-һыу атамалары, тирәяғында йәйрәп ятҡан ҡыр һәм туғайлыҡтарҙың нисә гектар булыуына тиклем теркәлгән яҙмаларын табып алдым: "Өлкән ҡыҙым Зифаға! - тип ҡуйылған ине яҙмаһының иң башында. - Ауылыбыҙҙың ер-һыуы атамалары һәм 20-ләп һөрөнтө ерҙәр теркәлгән мәғлүмәттәрҙе һиңә ҡалдырам. Мәғлүмәттәр, бәлки, тулы ла түгелдер, сөнки был яҡтар бит үҙе бер ҙур донъя! Урал һырттарына тоташып ята". Атайымдың был сәләмен мин изге аманат, үҙенсәлекле ишара итеп ҡабул ҡылдым. Атайым башлағанды мин, уның өлкән ҡыҙы, дауам итергә тейешмен, тип ҡарар иттем һәм байтаҡ йылдар инде ғүмеремдә тыуған яҡтарым тарихын, топонимикаһын өйрәнеүгә бағышланым, бик күп материалдар тупланым. Бәлки, Алла бойорһа, уларҙы китап итеп сығарыу мөмкинлеге лә тыуыр, кем белә. Мәсьәлә икенселә: ошо түгелме ни илде һөйөү тигән ата васыятының тормошҡа ашыу миҫалы?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан мәктәптәрендә 18 майҙа туғыҙынсылар өсөн сығарылыш дәүләт имтихандары башланды. Уҡыусылар туған әҙәбиәттән, 19 һәм 20 майҙа сит телдәрҙән һынау тотто. Математиканан имтихан - 23 майҙа, йәмғиәтте өйрәнеү фәненән 27 майҙа булды. 1 июндә - биология, тарих, химия һәм физика, 7 июндә - рус теле, 10 июндә - туған телдәр, 15 июндә - информатика, химия, география һәм биология, 22 июндә - әҙәбиәт, физика һәм информатика.

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, республиканың барлыҡ районларында ла сәсеү эштәре бара, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ аграрийҙары кампанияны тамамлап килә - был районларҙа яҙғы культуралар өсөн тәғәйенләнгән майҙандарҙың 90 проценты сәселгән. Стәрлетамаҡ районы абсолют һандарҙа ла алдынғылыҡты бирмәй, бында 88,9 мең гектар майҙанда сәскәндәр. Мәләүез районында күрһәткес - 73 мең гектар, Илештә - 70,8 мең гектар.

✓Рәсәй Хөкүмәте "Пушкин картаһы"ның мөмкинлектәрен киңәйтте. "Пушкин картаһы" менән Рәсәй фильмдарын, шул иҫәптән дәүләт ярҙамынан тыш төшөрөлгәндәрен ҡарарға мөмкин. Был хаҡта ҡарарҙы Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының махсус эксперт советы ҡабул итергә тейеш. Кинопрокатка дәүләт ярҙамын илебеҙ фильмдарын күрһәтеү менән бәйләргә кәрәклеге хаҡында ил Президенты әйткәйне. Быға тиклем программа Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы йәки кино фонды, төбәктәр ҡатнашлығында төшөрөлгән кинокартиналарға ғына ҡағылды.

✓Рәсәйҙең Милли бадминтон федерацияһы рейтингы лидерҙары, Европа чемпионаттары призерҙары һәм Олимпия уйындарында ҡатнашыусылар Ҡаҙанда бадминтон буйынса Рәсәй Кубогы миҙалдары өсөн көс һынашты. Унда биш комплект награда уйналды. Ҡатнаш парлы разрядта Башҡортостан вәкилдәре Родион Алимовҡа һәм Алина Дәүләтоваға етеүсе булманы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, Родион ир-егеттәр парында көмөш миҙал яуланы.

✓Быйыл да йәйге миҙгелдә балалар лагерҙарында күмәк саралар һәм ата-әсә көндәрен уҙғарыу тыйыла. Был турала Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығының балалар һәм үҫмерҙәр гигиенаһын күҙәтеү бүлеге етәксеһе Римма Әхмәтшина белдерҙе. "Ата-әсәләр балалары менән лагерь етәкселеге билдәләгән регламент буйынса махсус урында ғына осрашырға мөмкин", - тине ул.

ҠЫҪҠАСА

# БЕҘҘЕҢ ЯРҘАМ...

**20 майҙа Өфөнән Донбасҡа Луганск Халыҡ Республикаһы халҡы өсөн гуманитар миссия менән һигеҙенсе ылау юлға сыҡты.** Был юлы колонна Луганскиға асфальт-бетон заводын һәм белгестәр бригадаһын алып бара. "Әлеге ваҡытта Луганск Халыҡ Республикаһында 40 табибыбыҙ һәм шәфҡәт туташыбыҙ эшләй, улар туғандаш республикаларҙа йәшәүселәргә квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтә. Унда юл эшселәре һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе белгестәре, 30-лаған кеше эшләй. Беҙҙең Донбасс республикаларына артабан гуманитар ярҙам күрһәтеү буйынса пландарыбыҙ ҙур. Унда мәктәп автобустары, медицина техникаһы оҙатырға йыйынабыҙ, халыҡҡа медицина ярҙамын күрһәтеүҙе дауам итербеҙ, тәҙәләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә ҙур эштәр башҡарыу бурысы тора. Дөйөм алғанда, Башҡортостан Донбасҡа 800 тоннанан ашыу гуманитар ярҙам оҙатты", - тине Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин.

✓ **Өфөлә, ВДНХ-Экспо майҙансығында, 30-сы "Газ. Нефть. Технологиялар" халыҡ-ара күргәҙмә-форумы асылды.** Күргәҙмәлә Рәсәйҙең 35 төбәгенән, шулай уҡ Беларусь Республикаһынан 250 компания ҡатнаша. Бында Ҡурған кластеры предприятиеларының коллектив экспозицияһы бар, Иркутск өлкәһенең коллектив экспозицияһы үҙенең предприятиеларын беренсе тапҡыр күрһәтә. Асылда был күргәҙмә - Башҡортостандың визит карточкаһы, сөнки нефть-химия һәм газ тармаҡтары республика иҡтисадының нигеҙе булып тора, тип билдәләне Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров. Форум быйыл, Башҡортостан нефтенең 90 йыллығы билдәләнгән йылда, айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. "Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәр өсөнсө танкка һәм бишенсе самолетка Башҡортостан нефтенән етештерелгән яғыулыҡ ҡойола. Беҙҙең предприятиелар һуғыштан һуң ил иҡтисадын тергеҙеүҙә лә ҙур роль уйнаны. Беҙҙең баһа буйынса, күргәҙмә-форумға 20 меңдән ашыу кеше килергә тейеш. Беҙгә төп тармаҡтың нисек үҫешеүен күрһәтеү мөһим", - тине Андрей Назаров.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәрҙең мессенджерҙарында 49 йәшкә тиклемге, хөкөм ителмәгән хәрби бурыслы ир-егеттәрҙе военкоматҡа саҡырыған хәбәрҙәр тарала.** Башҡортостан Хәрби комиссариатының граждандар менән эшләү бүлеге етәксеһе Рәмил Баһауетдинов хәбәр итеүенсә, әлеге ваҡытта Рәсәй Федерацияһы Ҡораллы Көстәренә контракт буйынса, шул иҫәптән запастан хәрби хеҙмәткәрҙәр йыйыу бара. "Был эште Хәрби комиссариат контракт буйынса йыйыу пункты менән берлектә ойоштора. Хәрби бурыслыларҙы йәшәгән урындары буйынса, шул иҫәптән телефондан шылтыратып, военкоматтарға саҡыралар. Был мобилизация түгел, ә хәрби комиссариаттарҙың планға ярашлы, ғәҙәти эше", - тине Рәмил Баһауетдинов "Башинформ"ға. Йылына уртаса меңгә яҡын кеше контракт буйынса хеҙмәт итергә китә. "Йыл һайын Рәсәйҙең Оборона министрлығы план төшөрә, контракт буйынса саҡырылыусыларға талаптар кеүек үк, контрактсылар һаны ла үҙгәрә", - тине ул.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДӘҮЛӘТ СОВЕТЫ ҠАРАРЫ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров халыҡҡа социаль ярҙам мәсьәләләре буйынса Дәүләт Советы Президиумы ултырышында ҡатнашты. Сараны Рәсәй Президенты Владимир Путин алып барҙы.**

Ил етәксеһе белдереүенсә, 1 июндән минималь хеҙмәт хаҡы, йәшәү минимумы һәм пенсия түләүҙәре 10 процентҡа арта. Шулай уҡ Владимир Владимирович инфляцияның тотҡарланыуы, уның йыл һуңына тиклем 15 проценттан артмаҫы күҙалланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Бының өсөн эш хаҡының инфляциянан алда артыу сәйәсәтен эҙмә-эҙлекле алып барырға кәрәк, тип билдәләне ул. "Беҙҙең төп бурыс - граждандарҙың килем кимәле йәшәү минимумынан күпкә артығыраҡ булһын өсөн минималь хеҙмәт хаҡының артабан да артыуын тәьмин итеү", - тине Владимир Путин.

Ултырышта ҡатнашыусылар халыҡтың төрлө категорияһы, атап әйткәндә аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләр өсөн социаль ярҙам сараларын киңәйтеү буйынса губернатор корпусы вәкилдәре ҡатнашлығында үткән семинар-кәңәшмәлә тупланған башланғыстар һәм тәҡдимдәр буйынса фекер алышты. Сара һуңынан Радий Хәбиров журналистар һорауҙарына яуап биреп, Дәүләт Советы ултырышына үҙенең баһаһын бирҙе:

- Дәүләт һәм Президент 2018 йылдан алып балалы ғаиләләргә ярҙам күрһәтеүгә айырым иғтибар бүлә. Был төрлө түләүҙәргә ҡағыла. Яныраҡ 8 йәштән 17 йәшкә тиклемге балалар өсөн түләүҙәр башланды, - тип билдәләне Радий Фәрит улы. - Әммә ултырышта яһалған белдереүҙәрҙең иң мөһиме - эшләмәгән хаҡлы ялдағыларҙың пенсияһын 10 процентҡа арттырыу. Шулай уҡ минималь хеҙмәт хаҡы, минималь йәшәү кимәле артыуы ла әһәмиәтле. Сөнки был ҡарар арҡаһында күптәр өҫтәмә түләүҙәр аласаҡ, тәү сиратта балалы ғаиләләр. Ултырышта тап шуға баҫым яһалды ла инде.

Бөгөн үҙенең бурысын үтәгән хәрбиҙәр нацизмға ҡаршы көрәшеп, илде һаҡлай икән, улар ниндәйҙер ауырлыҡтарға осраһа ғаиләһе, балалары менән ни булырын аныҡ белергә тейеш. Яугирҙарҙың яраланыуы, һәләк булыуына бәйле федераль, төбәк түләүҙәре бар. Ултырышта Владимир Владимировичтың хәрби хеҙмәткәрҙәргә социаль яҡлау тураһындағы ҡарары ла мөһим мәсьәләләрҙең береһе булды.

# БАЛАЛАР ҮЛЕМЕ КӘМЕГӘН

**РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш неонатологы, медицина фәндәре докторы, профессор Дмитрий Иванов Өфөгә министр Михаил Мурашко ҡушыуы буйынса эш сәфәре менән килде.**

Майҙа Дмитрий Иванов етәкселегендәге Педиатрия университеты эксперттар командаһы бала табыусы ҡатындарға һәм балаларға ярҙам итеү, тыуымды арттырыу, сабыйҙар үлемен кәметеү буйынса сараларҙы бойомға ашырыу, кешеләрҙең һаулығын һаҡлау системаһын үҫтереүгә арналған эш ойоштора. Университет Башҡортостанға кәрәкле телемедицина консультацияһы күрһәтә, пациенттарҙы дауалауҙың яңы алымдары булдырыла. Баш неонатолог билдәләүенсә, Башҡортостандың маҡтанырлыҡ эш тәжрибәһе бар. "Әгәр былтыр сабыйҙар үлеме күрһәткесе 1000 балаға 7 үлем осрағы теркәлһә, быйыл был һан 2 тапҡырға аҙайған. Һандар теле менән әйткәндә, яңы тыуған 30 баланың ғүмере һаҡланып ҡалынған", - тине Дмитрий Иванов "Башинформ" агентлығы журналисына биргән интервьюһында. Уның әйтеүенсә, республика бындай һөҙөмтәгә ауырлы ҡатындарҙың үҙ ваҡытында перинаталь үҙәккә килеүе, патологияларҙы иртә асыҡлау һөҙөмтәһендә өлгәшкән.

- Эйе, Башҡортостанда бала табыусы ҡатындарҙың 30 проценты беҙҙең үҙәккә килә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Республика клиник перинаталь үҙәктең баш врачы Светлана Кәримова. - Йыл һайын беҙҙә тыуған балаларҙың һаны арта. 2020 йылда беҙҙең врачтар 10 меңдән ашыу балаға донъяға килергә ярҙам итте. Былтыр улар һаны 12 меңгә етте. Быйыл тәүге кварталда 6 мең ҡатын бала тапты. Шулай уҡ перинаталь үҙәк медиктары ауырлығы 430-ҙан 470 грамға тиклем генә булып тыуған балаларҙы "кеше итә" алды.

# ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

**Ил Президенты Владимир Путин төбәктәргә социаль-иҡтисади ярҙам күрһәтеү буйынса яңы исемлекте раҫланы. Яңы 43 ҡарар араһында төп иғтибар ил халҡына ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Уға ярашлы, 2022 йылда илдә фәҡирлек күләме кәмергә һәм килем буйынса тигеҙһеҙлек юҡҡа сығарылырға тейеш.**

Ағымдағы йылдың 1 мартынан эшһеҙ ҡалып, мәшғүллек үҙәгенә иҫәпкә ҡуйылған ағзаһы булған ғаиләләргә 31 декабргә тиклем мохтажлыҡты баһалауҙың махсус тәртибе ҡулланылырға тейеш. Тағы ла бындай граждандар социаль контракт төҙөүгә һәм уға ярашлы арттырылған түләүҙәр алыуға хоҡуҡ аласаҡ. Шулай уҡ 2022 йылдың 1 мартынан килемдәре кәмегән һәм балалары булған ғаиләләргә ҡарата ла өҫтәмә социаль ярҙам күрһәтелә. Владимир Путин шулай уҡ ил Хөкүмәтенә 20 апрелгә тиклем пенсия, социаль түләүҙәрҙе һәм бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡын арттырыуҙы күҙаллаған тәҡдимдәр индерергә ҡушты. Эшҡыуарҙар өсөн дә йөкләмәләр кәмейәсәк. Шулай уҡ Рәсәй банкы һәм Сәнәғәтте үҫтереү фонды тарафынан финанслау шарттары яҡшыртыласаҡ. 2022-2024 йылдарҙа төбәктәрҙә инфраструктура объекттары төҙөүгә һәм үҙебеҙҙә етештерелгән тауарҙарҙы һатып алыуға федераль үҙәктән өҫтәмә аҡса бүленәсәк. Ил Президенты ҡарарына ярашлы, йәмәғәт, ҡала-яны һәм халыҡ-ара транспортында йөрөүгә хаҡ арттырыуға юл ҡуймау мөһимлеге билдәләнә.

# ЗЫЯНДЫ ҮҘЕҢ ҠАПЛА!

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһында Экология кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын хуплап тауыш бирҙе. Документ тәүге уҡыуҙа ҡабул ителде.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, закон проектында тирә-яҡ мөхиткә зарар килтергән өсөн түләгән штрафтарҙы, зыянды ҡаплатыу тураһында дәғүәләр буйынса түләүҙәрҙе тәбиғәтте һаҡлау маҡсатында ғына файҙаланыу тәҡдим ителә. Шулай уҡ был аҡса тирә-яҡ мөхиткә зыянды баһалау, тикшереү эштәрен ойоштороу, экологик хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн дә тотонолорға мөмкин. Парламент спикеры фекеренсә, экологик түләүҙәрҙе маҡсатлы файҙаланырға ярҙам иткән яңы тәртип республиканың экология торошон яҡшыртырға булышлыҡ итәсәк. Предприятиелар тирә-яҡ мөхитте бысратҡаны өсөн түләй. Тәбиғәтте һаҡлау законын боҙоусылар өсөн штраф ҡаралған. Әммә килтерелгән зыянды бөтөрөү өсөн был аҡсалар тотонолмай. Һуңғы өс йылда Рәсәй буйынса тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыян өсөн 40 миллиард һум йыйылған. Шуның 2 проценты ғына зыянды ҡаплау маҡсатында тотонолған.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә үткән "Забег" Бөтә Рәсәй ярым-марафонында ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ҡаланың 450 йыллығы өсөн эшләнгән футболка кейеп йүгерҙе һәм байрам брендбугының бер өлөшөн күрһәтте. "Шулай итеп беҙ юбилей брендбугының бер өлөшөн асабыҙ, уның элементтары тиҙҙән баш ҡала урамдарын биҙәйәсәк", - тине Ратмир Мәүлиев. Уның футболкаһында стилләштерелгән "Өфө 450" логотибын күрергә була, ә арҡаһын ҡала символы - һыуһар ҡойроғо биҙәй.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 2022 йылдың 15-17 июнендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы БАГСУ Кубогына "Грэпплинг UWW" спорт көрәше буйынса халыҡ-ара турнир үткәрелә. Турнирҙы асыу тантанаһы 16 июндә сәғәт 11-ҙә башлана. 17 июндә финал алыштары, шулай уҡ ике тапҡыр ADCC Submission Wrestling World Championship еңеүсеһе, джиу-джитсу буйынса донъя чемпионы Джеффри Монсон һәм грэпплинг буйынса Европа чемпионы Динар Аҡмурзин ҡатнашлығында күрһәтмә сығыш була.

✓29 майҙа Өфөлә 11-се тапҡыр "1000 велосипедсы көнө" үтте. Был сара тураһында Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә физкультура һәм спорт муниципаль идаралығы етәксеһе Егор Сорокин хәбәр итте. Ҡатнашыусылар ҡала Советына иртәнге сәғәт туғыҙға йыйылды, ун беренсе яртыла велоколоннаға старт бирелде. Финишта - Салауат Юлаев майҙанында ҡала фестивале ойошторолдо.

✓Роструд мәғлүмәттәре буйынса, 11-13 июндә рәсәйҙәрҙе, шул иҫәптән Башҡортостанда йәшәүселәрҙе сираттағы оҙайлы ялдар көтә. 12 июндә илдә Рәсәй көнө билдәләнә. Байрам йәкшәмбегә тура килгәс, ял көндәре шәмбе, 11 июндән, дүшәмбе, 13 июнгә тиклем дауам итә. Артабанғы эш аҙнаһы дүрт көнлөк - 14-17 июнь. Илебеҙҙә киләһе оҙайлы ялдар - Халыҡтар берҙәмлеге көнө уңайынан 4-6 ноябрҙә.

✓Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 1 июндән авиакомпания самолеттары "Шереметьево" аэропортына көн һайын, көнөнә биш тапҡыр оса башлай. 2 июндән "Аэрофлот" көнөнә алты рейс башҡарыуға күсә. Хәҙер Өфөнән Мәскәүгә көнөнә өс тапҡыр осорға мөмкин. "Аэрофлот"тан тыш, "Победа", "Урал авиалиниялары", S7, Nordwind, Utair авиакомпаниялары көн дә "Өфө" аэропортынан Мәскәүгә рейстар башҡара.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# УРА! "ҠАШҠАҘАН" АСЫЛА!

**Әлеге ваҡытта баш ҡаланың йөҙөк ҡашы булыр "Ҡашҡаҙан" паркында һуңғы эштәр бара, тиергә лә мөмкин, сөнки күлде һәм уның тирә-яғын реконструкциялау барышы менән шәхсән танышҡан республика Башлығы Радий Хәбировҡа был ял урынының быйыл 12 июндә - Ҡала көнө һәм Рәсәй көнөндә асыласағын вәғәҙә иттеләр.**



Төҙөкләндереүҙең беренсе этабында күлдең төбө таҙартылды. Бының өсөн уны тулыһынса киптереп, 40 мең йөк машинаһы ләм, батҡаҡ һәм көнкүреш сүп-сары сығарылды. Һуңынан уның төбөнә, һыу аҫҡа китмәһен өсөн махсус "балсыҡ йоҙағы" эшләнде, периметр буйынса ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы, инженер коммуникациялары һалынды. Шулай уҡ яр формалаштырылды, яңы ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылды.

Икенсе этап былтыр йыл һуңында башлана һәм ярҙа тимер каркаста ҡарағастан пирстар урынлаштырыла. Шулай уҡ паркта дүрт амфитеатр, күләгәле биш ял итеү урыны һ.б. булдырыла. Юлдарҙы 92 консоль яҡтыртҡыстары яҡтыртып торасаҡ, ә йәйәү йөрөү һуҡмаҡтарына 356 прожектор урынлаштырылған. Пирстар эсендәге киңлекте 54 светодиод декоратв шарҙар яҡтыртасаҡ. Күлдең уртаһында музыкалы төҫлө фонтан урын аласаҡ. Килеүселәргә уңайлы булһын өсөн паркка шәхси сектор яғынан да инеп буласаҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ҡашҡаҙан"дың Рәсәйҙә һыу сығанағында урынлашҡан иң яҡшы парктарҙың береһе буласағын белдерҙе һәм Өфө, республика халҡын 12 июндә уның асылыу тантанаһына саҡырҙы.

# КӨРӘШ ҺАРАЙЫ БУЛАСАҠ!

**Баш ҡалала Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан бик күп объекттар төҙөлә. Шуларҙың береһе - Көрәш һарайы. Уның майҙаны 28 мең квадрат метр буласаҡ. Дүрт ҡатлы бина классик стилдә, колонналар менән эшләнәсәк, уның концепцияһы ниндәйҙер кимәлдә Боронғо Грецияның архитектура өлгөһөн хәтерләтә.**



Проект архитекторы Андрей Старков белдереүенсә, бында 8 - спорт, 3400 урынлыҡ спорт-концерт залы, тренажер, алты келәмле - бер, ике келәмле дүрт көрәш залы, дөйөм физик әҙерлек залы, медик-тергеҙеү үҙәге буласаҡ. Ошонда уҡ балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәптәре, спортсылар өсөн ҡунаҡхана, ресторан, спорт барҙары һәм 25 метрлыҡ бассейнлы фитнес үҙәк буласаҡ.

Көрәш һарайы файҙаланыуға тапшырылғас, унда халыҡ-ара, федераль һәм төбәк кимәлендәге ярыштар үткәрергә мөмкин.

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, 2024 йылға тиклем тирә-яҡ биләмә лә төҙөкләндереләсәк. Бында баскетбол, волейбол, мини-футбол майҙансыҡтары, йүгереү юлдары, шәхси транспорт туҡталҡаһы булдырыласаҡ.

- Көрәш һарайы - минең күптәнге хыялым, - ти Радий Хәбиров. - Бары тик бер генә хәл ителмәгән мәсьәлә бар - эргәләге ҡорамды реконструкциялауҙың тамамланмауы. Был тарихтың да осона сығып ҡуйырға кәрәк һәм беҙ уны хәл итеү юлын мотлаҡ табырбыҙ.

Көрәш һарайы 2019 йылдың авгусында төҙөлә башланы, 2021 йылда ул Өфөнөң 450 йыллығына төҙөләсәк объекттар исемлегенә инде. Быйыл ғинуарҙа РФ Хөкүмәте Рәйесе Михаил Мишустин Үҙәкте төҙөүгә федераль бюджеттан 1,1 миллиард һум йүнәлтергә ҡарар итте.

# ТАҒЫ БЕР ПАРК



**Өфөнөң Шаҡша бисҭәһе эргәһендәге "Өфө" индустриаль паркы Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығының федераль реестрына инде. Парктың майҙаны - 300 гектар самаһы, ул ер участкаларының дөйөм майҙаны буйынса иң тәүгеләр иҫәбендә.**

"Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы күрһәткән дәүләт ярҙамы һөҙөмтәһендә "Өфө" паркы биләмәһе тейешле инфраструктура менән тәьмин ителде. Әле инвесторҙар яңы производстволар асыуға 3,4 миллиард һумдан ашыу инвестиция йүнәлтте, унда 600-гә яҡын кеше эшләй. Индустриаль паркта ағас эшкәртеү, йыһаз, йөҙөү саралары өсөн комплектлау өлөштәре етештереү менән шөғөлләнәләр, шулай уҡ агротехника эшләйҙәр", - тине Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары, иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов. Парктың федераль талаптарға ярашлылығын раҫлау төбәктәргә һәм индустриаль парктарҙың, сәнәғәт технопарктарының идарасы компанияларына федераль һәм төбәк кимәлендәге дәүләт ярҙамын, шул иҫәптән һалым өҫтөнлөктәрен һорап мөрәжәғәт итергә мөмкинлек бирә. Әле "Өфө" индустриаль паркы биләмәһендә 12 резидент һәм ете парк инфраструктураһын файҙаланыусы иҫәпләнә, 2030 йылға бында 45-тән ашыу яңы производство асыу планлаштырыла. "Өфө" паркы майҙандары төбәк иҡтисадының төп үҫеш нөктәләренә әүерелеүе ихтимал.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# КАНИКУЛДАР ЕТӘ!



**Сираттағы оператив кәңәшмәлә, көндәр һалҡынса тороуға ҡарамаҫтан, һыу инеү миҙгеленә әҙерлек мәсьәләһе көнүҙәк темаларҙың береһе булды. Тәбиғәттең үҙ ҡанундары, бөгөн һыуыҡ торһа, иртәгәһенә йылытып ебәрергә лә күп һорамаҫ, шуға ваҡиғаларҙың үҙгәреүенә һәр ваҡыт әҙер булырға кәрәк.**

Хәйер, календарь буйынса, ысынлап та, һыу инеү миҙгеле башлана. Быйыл баш ҡалала 10 пляж: Дим карьерында Тәрән күл, Ҡариҙел йылғаһында "Ҡомлокүл", "Ҡояш яры" һәм "Һупайлы Сочиһы", Йылы күлдә "Гольфстрим" һәм "Ожмах яры", Ағиҙелдә "Ҡояшлы", "Водник", "Аҡ яр Затон", "Аҡ яр Нижегородка" эшләйәсәк. Июндән барлыҡ рәсми пляждарҙа эҙләү-ҡотҡарыу отрядтары ҡотҡарыусыларынан һәм водолаздарҙан дежурлыҡ итеү ойоштороласаҡ, уларға шулай уҡ йәмәғәт башланғысында ҡотҡарыусылар ярҙам итәсәк.

Июнь тигәндән, йәй Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө менән башлана. Был көндө ғәҙәттәгесә оффлайн һәм онлайн форматта төрлө саралар үткәреү планлаштырыла. "Бөтә Өфө" телеканалы эфирында иртәнге сәғәт 11-ҙән көндөҙгө сәғәт 2-гә тиклем "Өфө - бала саҡ баш ҡалаһы" телемарафоны уҙғарыла. Унда һөнәри эшмәкәрлегендә юғары уңыштарға өлгәшкән ололар һәм олимпиадалар, ижади конкурстар призерҙары, әүҙем йәштәр ҡатнаша. Шулай уҡ райондарҙан саралар барған майҙандарҙан эфир, тамашасылар менән интерактив саралар ҡаралған. Киров районының Р. Бикбаев исемендәге паркында, Октябрь районының Ғафури паркында, Орджоникидзе районының Еңеү паркында, Совет районының Якутов паркында, Дим районының "Орион" скверында, Калинин районының "Беренсе Май" паркында төрлө саралар үтеүсе төп майҙан булып тора. Бынан тыш, айырым урындарҙа ла төрлө программалар тормошҡа ашырыласаҡ. Улар физик мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы ла күҙ уңында тотоп төҙөлгән. Шулай уҡ 1 июндән белем усаҡтарында балаларҙың көндөҙгө лагерҙары эшләй башлай. Унда йөрөүселәр өсөн дә 200-ҙән ашыу сара уҙғарыу күҙаллана.

Йәй - балаларҙың ғына түгел, ололарҙың да көтөп алған миҙгеле. Күптәр ялын тап ошо миҙгелгә тап килтерергә, сит илдә булмаһа ла, ялан-күлдәрҙә ял итергә тырыша. Ҡайһы бер осраҡта тәбиғәттәге ялдар, хәйер, ялдар ғына түгел, баҡса-дачала сүп-сар яндырыуҙар ҙа оло фажиғәгә килтереүе мөмкин. Шуға күрә 1 майҙан янғынға ҡаршы махсус режим индерелеүен дә онотоорға ярамай. Был режим урман фондына ла ҡағыла. Ул ғәмәлдә булған осорҙа янғын хәүефе тыуҙырған эштәр башҡарыу тыйыла, был ҡағиҙәне боҙған өсөн административ һәм енәйәти яуаплылыҡ ҡаралған. Әлеге ваҡытта янғын хәүефе миҙгеле илдең 81 субъектында асыҡланған, уларҙың 43-өндә махсус режим индерелгән. Ул өҫтәмә хәүефһеҙлек талаптарын, шул иҫәптән урманға йөрөүгә тыйыуҙы ла күҙаллай.

Административ язаға килгәндә, махсус режим ваҡытында ундағы штрафтар күләме икеләтә арта, йәғни ул граждандар өсөн 2-4 мең һум булһа, етәкселәр өсөн - 15-30 мең һум, ойошма-предприятиелар өсөн 200-400 мең һум. Әгәр зыян 250 мең һумға етһә, янғында кешеләр зыян күрһә, ағастарға 10 мең һумдан күберәк суммаға зыян килтерелһә, ғәйепленәр енәйәт яуаплылығына тарттырыла. Көндәр яуынлап тороуға ҡарамаҫтан, Өфө территорияһында ҡоро үлән яныуҙың 16 осрағы теркәлгән. Тиҫтәләрсә кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай, тиһәләр ҙә, һыуҙан иҫән-имен ҡотолғайныҡ, уттан да һаҡ булайыҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Зифа буй-һын

Быға булышлыҡ итеү өсөн махсус коктейлдәр яһап эсергә була.

❖ 2 стакан ҡайнатылған һыу, 1 сельдерей һабағы, 1 балғалаҡ ҡырылған имбир, 1 бәләкәй һабаҡ бөтнөк, ярты лимон һәм 1 уртаса ҙурлыҡтағы ҡыяр. Лимон, бөтнөк, сельдерей һәм ҡыярҙы ваҡлап, блендерҙан үткәрергә һәм һыу, имбир ҡушырға. Икегә бүлеп эсергә.

❖ 1 балғалаҡ томат һутына 1 балғалаҡ әсегән һөт ҡушырға. Ошо ҡатнашманы иртәнге аш урынына эсергә.

❖ Энәлек һәм гөлйемеш сәйе диеталар тотмайынса ла ауырлыҡты нормаға килтерергә ярҙам итә. Емештәрҙе тигеҙ өлөштә алып ваҡларға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыу парында йәки талғын утта 10 минут быҡтырырға. Шунан 4 сәғәткә тиклем төнәтеп һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмә бер тәүлеккә тәғәйенләнгән, уны 4-кә бүлеп туҡланған арала эсергә. Был халыҡ ысулы яй, әммә файҙа менән ябыҡтыра.

### Простатит

1 балғалаҡ боланутҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда шәкәрһеҙ эсергә.

### Бөйөр

4 ҡалаҡ киптерелгән дегәнәк тамырына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп талғын утҡа ҡуйырға һәм һыуы яртылаш бөткәнсе ҡайнатырға. Шунан уттан алып, 2 ҡалаҡ бал ҡушырға. Көнөнә өс тапҡыр яртышар стакан, йоҡлар алдынан бер стакан эсеп ятырға.

### Бауыр циррозы

Сирҙе иҫкәртеү өсөн расторопша орлоғон онтаҡларға һәм 1:1 нисбәтендә бал менән бутарға. 1 см ҙурлыҡтағы кәнфиттәр әүәләргә. Көнөнә 3 тапҡыр ризыҡланырҙан ярты сәғәт алда 1-әр кәнфит ашарға. Һыуытҡыста һаҡларға. Был рәүешле 1 ай дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Һитә балы һәм ҡымыҙ ҡойоп табынға сығарылған һауыттар көрәгә йәки тәпән тип йөрөтөлгән, улар тәпәш булған, диаметры бейеклегенә тап килгән, хатта бер аҙ унан оҙонораҡ та эшләнгән. Шул уҡ ваҡытта был һауыттар артыҡ тәпәш булып күренмәгән, сөнки ситтәре тура мөйөшлө сығынты-тояҡтар менән осланған һәм һауыттың төбө иҙән йәки урындыҡтан өҫкәрәк күтәрелеберәк торған.



*Ҡымыҙ менән һыйлау өсөн һауыт комплекты. РЭМ фондынан. XX быуат башы*

Бәләкәй һауыттар (күнәсек, янтау) һөт йәки айран ҡойоп йөрөтөү өсөн ҡайсаҡ бау йәки йүкә тотҡалы итеп эшләнгән. Уларҙы урманға, яланға эшкә сыҡҡанда үҙҙәре менән алғандар, емеш-еләк йыйыу өсөн ҡулланғандар. Өйҙә ағас банкаларҙа мейес ауыҙы эргәһендә тоҙ торған, ә келәттә йомортҡа, ҡаймаҡ һәм башҡа ризыҡ һаҡланған. Улар 20-25 см бейеклектә булып, тар итеп тә (16-18 см диаметрҙа), саҡ ҡына киңерәк итеп тә эшләнгәндәр. Йыш ҡына уларҙың ҡапҡасы туҙҙан эшләнгән һәм ҡаплап ябыла торған булған, йәки ағастан булһа, уйымға индереп ҡуйылған. Ыҡсым ғына итеп эшләнгән тоҙ һауыты - ҡоторсоҡ та осраған, уларҙың бейеклеге 10 сантиметрҙан саҡ ҡына ашыу булған.

Соҡоп яһалған, төпләнгән һауыттар ҡулланыуҙа еңел һәм уңайлы булған. Шуға үткән быуаттың 20-30-сы йылдарында ла һаҡланып килгәндәр. Кәрәкле ҙурлыҡта, ентекле эшләнгән, оҙаҡ тотонғандан йышылып бөткән, ваҡыт үтеү менән бер аҙ ҡарайынҡыраған көбөләр башҡа һауыт-һаба менән бер рәттә ауыл өйөнөң интерьерына килешеп торған. Берәй иҫке келәттән табылған боронғо ағас һауыттар бигерәк тә тәьҫирләндерә. Үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында ойошторолған экспедициялар барышында таулы яҡтарҙа урынлашҡан ауылдарҙа, нәҡ элек көбө, тәпәндәр эшләнелгән төбәктәрҙә, музейҙарға ҡуйырлыҡ һауыттар осраттыҡ. Быға Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Этнография һәм антропология бүлегенең архивында һаҡланған тиҫтәләгән фотолар дәлил. Иң матур фотоһүрәттәр Ғафури районының Сәйетбаба ауылында, Бөрйән районының Асҡар һәм Ғәҙелгәрәй, Белорет районының Түбәнге Сәрмән, Ейәнсура районының Ибрай һәм Юнай, Күгәрсен районының Үрге Санъяп һәм Бикбулат һ.б. ауылдарҙа төшөрөлгән. Мәҫәлән, 1970 йылда Юнай ауылындағы бер йортта бихисап боронғо әйберҙәр араһында 8 төрлө һауыт булған: 2 көбө - ҡымыҙ (бейеклеге 86 см, диаметры 30 см) һәм май (бейеклеге 56 см, диаметры 20 см) бешеү өсөн; бал өсөн ҡапҡаслы һәм бау бәйләр өсөн сығынты тотҡалы батман (бейеклеге 45 см, диаметры 25 см); күнәк - ағастан һауын күнәге (бейеклеге 24 см, диаметры 23 см); ҡатыҡ әсетеү өсөн күнәк (бейеклеге 29 см, диаметры 32 см); бот тәпәне - 1 бот бойҙай үлсәме (бейеклеге һәм диаметры - 34 см); ҡаймаҡ күнәсеге (бейеклеге 28 см, диаметры 18 см); бәләкәйерәк тоҙ һауыты (бейеклеге 20 см, диаметры 18 см). Барлыҡ был һауыттар ул саҡта кәрәк булғанда тотонолған. 1971 йылда Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәгән Сафин Әхмәтйәнден хужалығында 13 һауыт табылған: он һәм бойҙай һаҡлау, ҡоротҡа эркет йыйыу өсөн өс ҙур көбө, бал өсөн өс батман, айран батманы, ит тоҙлау өсөн ике күнәк, бер май күнәге - иретелгән май һаҡланған, ике бейә һауғыс.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*АФАРИН!*

# ЕҢЕҮСЕ БАТЫР БУЛЫУ...

## ир-егеттең иң ҙур баһаһы

**Ғаяз Шөғөров билбау көрәше буйынса донъя чемпионы булған! Көрәштең был төрө буйынса Әбйәлил районынан беренсе чемпион! Шәп яңғырай, шаңдауы район сиктәрен үтеп, республика буйынса тарала.**



Мин Ғаяздарҙың класс етәксеһе булдым. Донъя чемпионы эргәһенә үҙемде лә яҙырға йөрьәт итәйем әле. Шәп класс булды ул Хәлил урта мәктәбенең 55-се сығарылышы. Шулар араһында Ғаяз башҡаларҙан артыҡ айырылмаған тыйнаҡ холоҡло уҡыусы булды. Әгәр ҙә егет кеше тураһында шулай әйтеп булһа, сибәр йөҙлө, ихлас йылмайыусан үҫмер, тип тә өҫтәйем әле. Төплө фекерле булыуы, донъяға ололарса баһа бирә белеүе ҡай саҡ аптырата торғайны, ныҡышмаллығы һиҙелә ине. Унынсы кластан һуң Ғәҙелша шарлауығына походҡа барғанда: "Ағай, әйҙә, ошо Төйәләҫ йылғаһының ағып сыҡҡан еренә барып етәйек", - тип ныҡышты. Нишләйһең, Ғаяз, мин, тағы ике егет, дүртәүләп дымлы ҡаяларҙы үрмәләп, инеш буйлап Ирәндек тауына менеп киттек. Оҙаҡ барҙыҡ, инеш тарайғандан-тарая бара, сығанағына етеп булмай ҙа ҡуя. Бер урында, тура сығабыҙ, тип, инеште юғалттыҡ, аҙаштыҡ. Бәхетебеҙгә ике урмансы тап булып, юл күрһәттеләр. Инеш башына етмәй, кире боролорға мәжбүр булдыҡ. Әле интервью алғанда Ғаязға ошо хәлде иҫенә төшөрҙөм. "Мин ни, ул инеш башын аҙаҡтан тағы барып эҙләп ҡараным, тапманым", тип үҙенә хас ихласлыҡ менән йылмайҙы ул. Үәт ныҡыш! Донъя Кубогы ярышынан ҡайтышлай тәүге тәьҫораттарын һөйләп, тыуған ауылы Ишбулдыға атай-әсәйе эргәһенә ашығып ҡайтып китте. Атаһы - ике көрәшсе үҫтергән Зөлфәр ҡоҙаның түбәһе күккә тейгәндер инде!

- Бала саҡта "Их, донъя чемпионы булыр кәрәк ине!" тигән хыял булды, үҫә килә ул хыял уйҙа ғына ҡалыр һымаҡ тойола башланы. Әммә алты йәшемдән мәктәптәге милли көрәш секцияһына йөрөй башлағандан алып көрәшкә тоғролоҡ һаҡланым, спорттың был төрөн ташламаным. Ун дүрт йыл көрәштәмен! Бер туған Өлфәт ағайым да башҡорт көрәше буйынса спорт мастерлығына кандидат бит инде, - тип һөйләп китте Ғаяз. - Бына әле Татарстандың Болғар ҡалаһында уҙған билбау көрәше буйынса Донъя Кубогы ярышында яуланым донъя чемпионы исемен. Уның беренсе этабы Мәскәүҙә һайлап алыу турҙарында үткәйне. Унда сит ил көрәшселәре генә ҡатнашты. Ярыштың Ҡаҙандағы икенсе этабында финалға сығыу өсөн көрәштек. Болғарҙағы өсөнсө этап финал ярышы булды. Башҡортостандан дүрт кеше инек: икебеҙ - Миәкә районынан Айгиз Зәйнетдинов менән мин донъя чемпионы исемен яуланыҡ, ҡалған икебеҙ финалға үтә алманы. Айгиз туҡһан килограмм ауырлыҡ категорияһында, мин алтмышҡа тиклемгеләр төркөмөндә көрәштем.

Егерме биш илдән йөҙ илле кеше ҡатнашты. Беренсе көрәштә Рәсәй беренселегендә икенсе урын алған Төмән егете менән алышып, уны бишкә-ноль иҫәбе менән еңдем. Артабан Төркмәнстандан килгән көрәшсе менән алышырға тура килде. Ул бик көслө булып сыҡты, етмәһә, тик билбау көрәше буйынса ғына махсуслашҡан спорт мастеры ине. Бар һәләтемде ҡулланып, техник яҡтан алдырырға тырыштым һәм уны ла бишкә-ноль иҫәбе менән еңдем. Финалға Тажикистан көрәшсеһенә ҡаршы сыҡтым һәм донъя чемпионы булдым! Билбау көрәше беҙҙең милли башҡорт көрәшенән күпкә айырыла, хатта аяҡ салырға ла рөхсәт ителә. Ҡаршы яҡ көрәшсене арҡаһына һалһаң, һин - еңеүсе. Уны күкрәккә һалыу, аяҡтарын ерҙән айырыу мөһим түгел.

Үҙебеҙҙең көрәш оҡшай миңә, республика кимәлендә еңә алмаһам да, унынсы класта уҡ Урал аръяғы чемпионы булдым. Донъя Кубогы кимәленә күтәрелгәнсе күп көрәшергә тура килде. Унда көрәш шарттары аяуһыҙыраҡ: бер еңелһәң, шундуҡ ярыштан төшөп ҡалаһың. Үҙеңде еңеүгә көйләп алыуы ҡыйын, бер генә хата ебәрһәң, билбаусылар шуны көтөп кенә йөрөй, һә тигәнсе һелкеп алып ташлайҙар. Һәр секундта ла әҙер булырға кәрәк, көстән дә бигерәк, техник яҡтан таһыллыраҡ булыу мөһим. Тәүге көрәшкә икенсе яҡтың мөмкинлектәрен белмәй сығаһың, аҙаҡ ҡалғандарҙың көрәшкәнен күҙәтеп, һығымталар яһарға мөмкинлек була.

Әлегә донъя чемпионы булыуыма ышанып та бөтмәйем, һис юғы, уңыштан баш әйләнмәне. Киләсәктә Рәсәй беренселегендә алтмыш биш килограмм ауырлыҡтағылар категорияһында көрәшкә әҙерләнергә кәрәк. Әлеге Донъя Кубогында ҡатнашыр өсөн ҡапыл ғына ауырлыҡты ташлау иң ҡыйыны булғандыр, һигеҙ көн эсендә алтмыш һигеҙ килонан алтмышҡа төшөргә тура килде, сөнки ярыш тураһында һигеҙ көн ҡалғас хәбәр иттеләр. Ауырлыҡ тура килмәһә, шундуҡ ярыштан төшөрөп ҡалдыралар. Диета тотоп, йүгереп, йышыраҡ мунса төшөп, артыҡ ауырлыҡты ташлай алдым. Төп тренерым Өлфәт ағайым тиһәң дә була - ул башлап көрәшкә лә алып килде, ярыштарға алып йөрөнө, бәләкәй саҡтан уҡ төп терәгем булды. Ул булмаһа, бәлки, мин дә башҡалар кеүек спорттан ситләшер инем.

Башлағанда Рәис ағай Әбделғазиндың секцияһына бик күп малайҙар йөрөй инек, хәҙер бер нисәү генә ҡалдыҡ. Килеп сыҡмаҫтай булһа, ташлайҙар ҙа ҡуялар. Мәҫәлән, миңә тәүге һөҙөмтә күрһәтер өсөн бер йыл кәрәк булды. Унынсы класта Рәсәй буйынса асыҡ турнирҙарға сыға башлағайным, республика тренерҙары иғтибар итте, һайлап алыу турҙарына саҡыра башланылар. Әммә мин ул саҡта ла күп нәмәне аңлап етмәгәнмен. Үҙем тренер булып эшләй, балаларға нисек көрәшергә, үҙеңде нисек көйләргә өйрәтә башлағас ҡына иң тәүҙә үҙеңде еңергә кәрәклеген аңлай башланым. Әлеге Кубокта психологик яҡтан әҙерләнеү ныҡ ауырға төштө. Балаларға аңлатыу бер нәмә, үҙеңә килеп терәлһә, ҡыйын - бөтөн нәмә тик бер үҙеңдән генә торғанды төшөнәһең.

Еңер өсөн ныҡ әҙерләнергә кәрәк. Әлбиттә, тәжрибә лә үҙенекен итә, күнекмәләр бушҡа булмауын да аңлайһың. Тырышмайынса, көс һалмайынса, хеҙмәт түкмәйенсә бер нәмә лә килеп сыҡмай. Бер ярыш ун биш тренировканы алмаштыра, тиһәләр ҙә, ҡунаҡ һымаҡ, ундағы-бындағы ярыштарға йөрөү менән генә сикләнергә ярамай. Тағы бер яғы бар: мәктәптә уҡығанда спортсыларға иғтибар бар, уларға шөғөлләнеү, ярыштарға йөрөү өсөн мөмкинлектәр тыуҙыралар. Мәктәптән һуң үҙеңде үҙең ҡайғыртып, үҙеңдең аҡсаңа йөрөй башлайһың. Һөҙөмтәләр күрһәтмәһәң, берәү ҙә һиңә аҡса бирмәй, һөҙөмтә күрһәтер өсөн аҡса кәрәк.

Донъя Кубогына барыу өсөн Әбйәлил районының Балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе директоры Ласын Марат улы Усманов ныҡ ярҙам итте, спонсорҙар табып, ярышҡа ебәрҙе. Дүрт көн дауам иткән был бәйгенән дәрт уянды, донъя беренселегендә ҡатнашыу теләге менән ҡайттым - даны ни тора! Көрәш, минеңсә, кешене тәрбиәләй, еңеүсе булырға өйрәтә. Мәҫәлән, балалар көрәшкә йөрөй башлаһа, характерҙары үҙгәрә. Икенсе кешегә әйләнәләр, башҡаларҙан айырылып торалар, улар еңергә ынтыла башлайҙар. Көрәштә тик еңер кәрәк, тормошта ла шулай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Борон ата-бабаларыбыҙ бил бирмәҫ көрәшселәргә батыр тип өндәшкән, ҙур хөрмәт күрһәткән. Батыр булыу ир-егет өсөн иң ҙур баһа. Уларҙың һәр береһен беҙ исемләп белергә тейешбеҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

1

# Мәғариф

28-3
май - июнь
(һабанай - һөтай)
2022 йыл
№21 (1011)

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

БАШ ЙОРТТА

# ҠЫҢҒЫРАУЛЫ БАЙРАМ БЕҘҘӘ!



## Егерменселәр

***Булат Зинуров, Өфө ҡалаһының Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы директоры:*** 2021-2022 уҡыу йылын яҡшы ғына һөҙөмтәләр менән тамамлайбыҙ. Быйыл гимназияла элекке йолаларыбыҙҙы тергеҙеү һәм яңыларын башлау өҫтөндә эш алып барҙыҡ. Педагогик коллективыбыҙ үҙ һөнәрҙәренең оҫтаһы булған уҡытыусылар менән тулыһынса тәьмин ителгән һәм быйыл тағы ла ете йәш педагог өҫтәлде. Әлеге ваҡыттағы хәстәрҙәребеҙгә килгәндә, тәү сиратта алда торған мөһим имтихандарҙы уҡыусыларыбыҙ яҡшы тапшырыуын көтәбеҙ. Туғыҙынсылар 23 майҙан, ун берҙәр 25 майҙан һуң һынау тота башланы. Әҙерлек эштәре йыл әйләнәһенә барғанға күрә, артыҡ борсолмайбыҙ.

Быйыл гимназияла күп кенә өҫтәмә белем биреү түңәрәктәре асылды. Шулар араһында популяр йәш йырсы Заһир Зәйнетдинов менән берлектә "Зәйнетдин" тигән бейеү мәктәбе, "Ағиҙел" художество кәсептәре предприятиеһы менән йәш моделселәр мәктәбе, Джефф Монсон исемендәге мәктәп менән грэпплинг буйынса түңәрәк, "Өфө" клубы менән футбол түңәрәге, милли көрәш түңәрәге ойоштороу йәһәтенән эштәр алып барылды. Тағы ла бер нисә ҡыҙыҡлы йүнәлештәрҙә түңәрәктәр асырға ниәтләйбеҙ, шуларҙың береһе - бишалыш (пятиборье). Ике спорт майҙансығы асыуҙы күҙаллайбыҙ, әле береһен төҙөп бөттөк.

Бынан тыш, гимназияла кабинет-музейҙар булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ һәм әлегә уҡыу йортона исем биргән шәхес Фатима Мостафинаға арналған шундай кабинет ойошторҙоҡ. Шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте, тел һәм тарихты өйрәнеү буйынса үҙәк булдырылды. Унда ла ҡыҙыҡлы экспонаттар урынлаштырҙыҡ, стендтарҙы яңырттыҡ. Быйыл йәш электроэнергетиктар класын ойошторорға ниәтләнек һәм Салауат ҡалаһының "АСТ" компанияһы менән килешеү төҙөнөк. Был 8-ҙән 11 синыфҡа тиклемге уҡыусылар өсөн электроэнергетика комплексының серҙәре, физика фәнен төплөрәк өйрәнеүҙе, оҫталыҡ дәрестәрен, осрашыуҙар, ошо йүнәлештәге заводтарға экскурсияларҙы үҙ эсенә алған дәрестән һуң ҡаралған программа, һәм ул беҙҙең уҡыусыларға бушлай тәҡдим ителәсәк. Әлеге ваҡытта компания ярҙамында кәрәкле интерактив ҡорамалдар алдыҡ, киләһе уҡыу йылына кабинетты әҙерләп ҡуйырбыҙ, тибеҙ.

Быйыл БР Мәғариф министрлығы менән берлектә уҡыу алдынғыһы булған уҡыусыларға, башҡорт теленә һөйөү уятҡан һәм йәш быуынды тәрбиәләүҙә уңыштарға өлгәшкән уҡытыусыларға, беҙгә ошо юҫыҡта ярҙам иткән йәмәғәт эшмәкәрҙәренә тапшыра торған Ф. Мостафина исемендәге премия булдырылды һәм уның тәүге лауреаттарын - гимназиябыҙҙа оҙаҡ йылдар эшләгән Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Менәүәрә Мәҡсүтованы, уҡыусыларыбыҙ Камилә Ҡыуатова, Динә Хәйбуллинаны һәм "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире, Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Гөлфиә Янбаеваны 25 майҙа Һуңғы ҡыңғырауҙа тәбрикләнек. Награданы йылына ике тапҡыр тапшырасаҡбыҙ. Күренекле шәхестең исемен мәңгеләштереү йәһәтенән быйыл уның тормош юлына арналған тәүге ғилми-ғәмәли конференция ойошторҙоҡ һәм киләсәктә лә был эште дауам итергә ниәтләйбеҙ.

Беҙҙең гимназияла башҡорт мөхите булдырыуға бик ҙур иғтибар бүленә. Мәҫәлән, яңыраҡ "Арғымаҡ" төркөмө ярҙамында дәрескә саҡырып яңғыраған ҡыңғырау сыңын башҡорт милли уйын ҡоралдарынан яңғыраған моңға алмаштырҙыҡ. Шулай уҡ диктор балаларҙы дәртләндергән һүҙҙәр әйтә. Быны сирек һайын яңыртып торорға ниәтләйбеҙ. Аҙна һайын үтә торған тантаналы линейкалар кире тергеҙелде, киләсәктә "Яңы быуын" тигән проектты башларға торабыҙ. Уның сиктәрендә ҡасандыр гимназияла уҡыған күренекле шәхестәрҙе саҡырып, сығарылыш уҡыусылары менән асыҡ дәрес, класс сәғәттәре, осрашыуҙар ойошторорға теләйбеҙ. Бурысыбыҙ милли кадрҙар тәрбиәләү һәм был үҙебеҙҙең шәхестәргә таянып бойомға ашырыла торған эш.

Быйыл 763 уҡыусы менән уҡыу йылын тамамлайбыҙ, шулар араһынан 11-се класта 44 бала, 9-сыла - 62. Әле 1-се синыфҡа уҡырға килергә теләүселәрҙән ғаризалар ҡабул итәбеҙ һәм 75 уҡыусы алырға ниәтләйбеҙ. Уларға талаптар ҡаты түгел, әммә иң мөһиме - башҡорт телен белеү, аңлау. Сөнки башланғыс синыфтарҙа барлыҡ предметтар ҙа башҡортса уҡытыла.

Әйткәндәй, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы менән күптән таныш булһам да, быйыл беренсе йыл уға етәкселек иттем. Уның төп үҙенсәлеге башҡорт мөхитле уҡыу һәм тәрбиә эштәрен ойоштороу, шуға бындағы балалар туған телде "һыу кеүек эсә". Гимназияның үҙенең бик матур йолаларын дауам итеп, шул уҡ ваҡытта заман талаптарына ярашлы яңыларын булдырып, эште дауам итербеҙ, тип ышанам. Заман беҙҙән башҡорт балаларының компьютер менән дә дуҫ булыуын, робот техникаһы өлкәһендә лә белемле булыуҙарын талап итә. Быны иҫәпкә алып, робот техникаһы түңәрәге асылды, Республика балалар технопаркы менән төҙөлгән килешеүгә ярашлы, унда беҙҙең гимназистар 3D-моделләү, картинг, техник дизайн кеүек дисциплиналар буйынса бушлай шөғөлләнә ала. Балалар киләсәктә гуманитар фәндәрҙән генә түгел, теүәл фәндәр һәм инженерия өлкәһендә лә белемдәрен камиллаштырып, үҙ юлдарын табырҙар. Бына шулай, уҡыу йылына йомғаҡтар яһағанда матур башланғыстарыбыҙ күп кенә икәне күренә. Киләсәктә һәр проектыбыҙ дауамлы, уңышлы, юғары һөҙөмтәле булһын, тип теләйбеҙ. Яңы проекттарыбыҙ бик күп һәм уларҙы тормошҡа ашырғанда таянырлыҡ коллектив, аҡыллы балалар менән эшләүемә шатмын.

## Исҡужинсылар

***Шәмсулла Хәбибрахманов, М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры:*** Үткән уҡыу йылына йомғаҡ яһағанда, әлбиттә, иң мөһиме уҡыусыларыбыҙҙың уңыштарын алға ҡуябыҙ. Уларҙың барыһы ла лицей тормошонда актив ҡатнаша, төрлө олимпиада, конкурс, ярыштарҙа ла матур һөҙөмтәләргә өлгәшteләр. Мәҫәлән, быйылғы сығарылыш уҡыусылары араһынан Азамат Байрамов бик күп предмет олимпиадаларында призлы урындар яуланы, Башҡортостан Башлығы премияһына лайыҡ булды.

Лицейҙың күрһәткестәре лә юғары, быйыл беҙ Республика ата-әсәләр форумы үткәреү өсөн Башҡортостан Башлығы грантын яуланыҡ. Уҡыу йылында атҡарылған мөһим эштәр тураһында әйткәндә, лицейҙың матди-техник базаһын яҡшыртыу мөмкинлеген тормошҡа ашырҙыҡ. Мультимедия ҡорамалдары алынды, мәктәп территорияһын биҙәнек. Уҡыусыларҙың тәҡдимен күҙ уңында тотоп, бильярд һәм теннис бүлмәләре эшләп ҡуйҙыҡ. Былары үҙ иҫәбебеҙгә атҡарылһа, ҡаланың мәғариф бүлеге ярҙамы менән мебель яңырттыҡ. Шулай уҡ мәктәп кафеһында швед өҫтәле тибында туҡланыу ойоштороуға әҙерләнәбеҙ. Әйткәндәй, уҡытыусыларыбыҙҙың да һөнәри үрҙәре менән маҡтана алабыҙ. Улар балаларға тейешле белем һәм тәрбиә биреү йәһәтенән генә түгел, шәхси уңыштары менән дә ҡыуандырҙы. Мәҫәлән, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыбыҙ Эльвира Тазиева һөнәри конкурстарҙа лауреаттар араһына инде, төрлө премияларға һәм маҡтауҙарға лайыҡ булды.

Лицейҙа уҡытыу һәм тәрбиә эштәре берҙәй алып барыла. Балаларға төплө белем биреү, уларҙы тәрбиәле һәм рухлы итеп үҫтереү, һәләттәрен арттырыу йәһәтенән барлыҡ шарттар булдырылған. Быға тиклем илдең мәғариф системаһында пионерҙар ойошмаһы кеүек берҙәм балалар ойошмаһы булмаһа ла, беҙҙең лицейҙа балаларҙың хөкүмәт ҡоролошона ҡарап төҙөлгән үҙ системаһы бар. Лицейҙа уҡыусылар араһынан президент, министрҙар, уларҙың ярҙамсылары йыл да һайлана һәм был уҡыусылар бик актив эшләй. Улар беҙгә кәрәк саҡта ярҙам да итеп ебәрәләр, тиҫтерҙәренә үрнәк күрһәтәләр, мәктәп етәкселеге һәм балалар араһында бәйләнеш булдыралар. Әлбиттә, Бөтә Рәсәй кимәлендә балалар өсөн бер ойошма булдырылһа, бик яҡшы булыр ине. Сөнки был балаларҙы ойоштороу, уларға тәртип, донъяға ҡараш, илһөйәрлек тәрбиәһе биреү йәһәтенән бик кәрәк.

Ғөмүмән, беҙҙә уҡыусылар белем алһын һәм үҫешһен өсөн барлыҡ шарттар булдырылған. Мәҫәлән, башланғыс синыфтар өсөн оҙайтылған көн төркөмө ойошторолған. Эшләгән ата-әсәләр өсөн бигерәк тә уңайлы, сөнки бала ике тапҡыр ашай, өйгә эштәрен эшләй, һуңынан түңәрәктәрҙә шөғөлләнә һәм өлкәндәр килеп алғансы лицейҙа мәшғүл булып йөрөй. Бынан тыш, лицейҙа ике спорт залы, сәғәт киске алтыға тиклем 30-ға яҡын бюджет түңәрәктәре, унан һуң тиҫтәгә яҡын түләүлеләре эшләй. Бына ошо көндәрҙә 9-сы кластар уҡыу йылына йомғаҡтар яһағайны һәм шунда балалар төрлө ярыштарҙа алған наградаларын алып килде, ҡайһы берҙәренең бик күп йыйылған улар. Хәҙер дөйөм линейка булғанда бөтә уҡыусыларға ла шулай наградаларын килтерергә тәҡдим итмәксебеҙ, бер күркәм күренеш булыр һәм уларҙың да, педагогтарҙың да тырышлығы күренер.

Был беҙҙең йыл йомғаҡтары булһа, бөгөнгө мәшәҡәттәрҙең барыһы ла Берҙәм дәүләт имтиханы һәм Төп дәүләт имтиханы менән бәйле. Быйыл беҙҙә 785 бала белем алды, шулар араһынан 11-се синыфты 24 уҡыусы тамамлай, ә 9-сыны - 54 бала. Киләһе уҡыу йылына тағы ла 75 уҡыусыны көтөп ҡалабыҙ. Уларҙы тыштан да, эстән дә balҡып торған белем усағы ҡаршылаһын өсөн әле әҙерлек эштәре бара, тирә-яғыбыҙҙы матурлайбыҙ: сәскәләр һәм төрлө ағастар ултырттыҡ. Балаларҙың йәйге ялын да хәстәрләнек: 100 бала мәктәп яны лагерына йөрөйәсәк. Яңы уҡыу йылында 1-5-се кластар яңы ФГОС буйынса уҡый башлайҙар, шуға ярашлы үҙгәртелгән уҡыу пландары менән ата-әсәләрҙе таныштырыу эштәре барҙы. Беҙҙе шуныһы шатландыра: үҙебеҙҙең сығарылыш уҡыусылары балаларын бында уҡырға алып килә хәҙер. Был балалар башҡортса иркен һөйләшеп, лицейҙағы башҡорт мөхитенә ихлас теләп килеп инә. Тимәк, башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү һәм рух һалыу йәһәтенән барлыҡ тырышлығыбыҙ бушҡа булмаған. Ошонан да юғары баһа юҡтыр эшебеҙгә.

***✓ ТикТок - башҡа һыймаған ҡылыҡҡа туранан-тура этәргән ҡорал. АҠШ-та 100 миллион тирәһе үҫмер һәм йәш кеше ТикТок USA йоғонтоһонда. Янаған хәүеф-хәтәрҙе аңламау ҡурҡыта халыҡты.***

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## ун йәштән һуң нимәгә өйрәтергә?

**Рәсәй белем биреү системаһына БДИ тигән яңғырауыҡлы исем аҫтында 2001 йылда индерелгән Америка Болонья белем биреү системаһы буйынса бына инде 20 йыл бәхәстәр дауам итә. Ул бөгөнгәсә балаларыбыҙҙың аңын томалай. Шулай ҙа тағы бер нисә йылдан ул эҙһеҙ юғалыр, әммә мәсьәлә башҡала: балаларыбыҙ "бдишник"тарға әүерелмәһен өсөн ниндәй саралар күрергә?**

### Баш тартырбыҙмы?

Берҙәм дәүләт имтиханы ҡабул ителгәндән алып уҡыусыларҙы хас та маймылдар ише тест үтергә өйрәттеләр, ә бына юғары уҡыу йорттарында, башҡа өлкәләрҙә, махсус һөнәри йүнәлештәрҙә уҡытыу процесы нигеҙен тәшкил иткән белемдәр, ҡыҙғанысҡа күрә, юҡ йәки бик түбән кимәлдә генә ҡалып бара. Болонья системаһы изге ниәттәрҙән сығып, маҡсатлы рәүештә популярлаштырылды. Әммә М.В. Ломоносов исемендәге МДУ ректоры Виктор Садовничий әйтмешләй: "Уҡырға инергә килгән йәштәр химия, биология кеүек кәрәк тип тапмаған фәндәрҙе туғыҙынсы, һигеҙенсе синыфта уҡ өйрәнмәй башлай, ә тик БДИ рәүешендә тапшырылырға тейеш имтихандарға ғына әҙерләнә. Был ҡурҡыта". Артабан Виктор Садовничий Рәсәй һәм Советтар Союзы төплө белем биреүе менән дан алыуын, ә БДИ-ның төплө әҙерлек базаһы нигеҙҙәрен сикләүе хаҡында белдерә.

Ваҡытында беҙҙең мәғариф хатта американлылар тарафынан да юғары баһаланған шул. Мәҫәлән, АҠШ президенты Джон Кеннеди 1963 йылда үҙ сығышында былай ти: "Һис һүҙһеҙ, был милләттең белем алыуға ҡыҙыҡһыныуы ғына ла донъялағы теләһә ниндәй милләтте уҙып китеү өсөн етә". Бөгөн юҡҡа сығарылған совет мәғарифы 1953 һәм 1990 йылда 3-сө урын алып, ЮНЕСКО тарафынан ике тапҡыр донъялағы иң яҡшы белем биреү системаһы булараҡ таныла. Ә 2012 йылда Рәсәй мәғарифы 35-се урынға тәгәрәй. Һәм был уҡыусылар, вуз студенттары менән төрлө кимәлдәрҙә эшләүҙә асыҡ күренә. Эште нисектер төҙәтеү өсөн улар ауыр үҙаллы үҫеш юлын үтергә тейеш. Әммә был хаҡта һуңыраҡ һөйләшербеҙ. Әлегә БДИ ҡыҫымында булған балалар мейеһенең үҫеш функцияһын ҡотҡарыу юлдары тураһында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. Был әле мәктәп йәшендә булғандарҙы ҡотҡарыу, тигәнде аңлата, улар ҙа киләсәктә 20 йәшлектәр кеүек, БДИ ҡорбанына әүерелмәһен ине лә бит. Сөнки һуңғылары менән аралашыуы бик ауыр, уларҙың белеме, донъяны танып белеү кимәле сикләнгән.

"Берҙәм дәүләт имтиханын камиллаштырыу кәрәк, ул "начётничество системаһы" булараҡ уйланылмағайны", тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин", тип хәбәр итте 22 августа ИА REGNUM. Рәсәйҙә БДИ системаһынан баш тартырға мөмкиндәр, тип белдерҙе Дәүләт Думаһының Мәғариф һәм фән буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Максим Зайцев URA.RU менән әңгәмә барышында. "Быйыл түгел, әммә уны бөтөрәсәктәр, мин быға ныҡлы ышанам. Система булараҡ БДИ үҙен аҡламаны һәм традицион форматҡа, әлбиттә, кире ҡайтыу булырға тейеш. Был вуздарҙы ла, халыҡты ла ҡыҙыҡтыра. Әммә 15 йыл дауамында индерелгән системанан кире сығыу ҙа оҙайлы ғына ваҡыт талап итәсәк", - тип билдәләй М.Зайцев. Берҙәм дәүләт имтиханы пандемия осоронда үҙенең һөҙөмтәһеҙлеген күрһәтте һәм яйлап вуздарға уҡырға инеүҙең альтернатив системаһы менән алмаштырыласаҡ, тигән фекерҙә ул һәм БДИ-ны бөтөрөргә саҡырҙы.

Берҙәм дәүләт имтиханын туҡтатырға һәм традицион рус мәғарифына ҡайтырға кәрәк, тигән һүҙҙәрҙе Дәүләт Думаһы вице-спикеры Петр Толстой ҙа әйтте. "Уларҙы имтиханда шаҡмаҡтарҙы дөрөҫ тултырырға һәм яуаптары бирелгән тестар үтергә өйрәтеү дауам иткән саҡта бер ниндәй ҙә интерактив таҡталар хәлде үҙгәртмәйәсәк һәм илде ҡурҡмайынса тапшырырлыҡ быуын тәрбиәләргә ярҙам итмәйәсәк", - тип яҙҙы Толстой үҙенең "Телеграм"дағы каналында.

БДИ-2021 буйынса конференцияла Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцов киләһе Берҙәм дәүләт имтиханы тағы ла ҡыҫҡартылған форматта үтәсәк, тип белдерҙе. Пандемияға ҡаршы күрелгән сараларҙың береһе - математика буйынса нигеҙ имтиханы алып ташланды. 11 синыф уҡыусыларының йомғаҡлау иншаһы ла бөгөн оло мәғәнәгә эйә: шунһыҙ, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына үткәрмәйәсәктәр.

### Логика ҡайҙа?

Мәғариф системаһында тестар ҡулланыуға бәйле һорау И.В. Сталин заманында уҡ, 1934 йылда, һуңғы ВКП(б) Өлкә Комитетында күтәрелгән, йәғни "О педологических извращениях в системе наркомопроса" тигән доклад яһалған. Ожегов һүҙлегендә "Педагогика - тәрбиә һәм уҡытыу тураһындағы фән" тип аңлатылһа, Ҙур энциклопедия һүҙлегендә "Педология - балалар тураһындағы фән" тип яҙылған. Ултырышта белем һәм тәрбиә биреүҙә педологияның әһәмиәтен инҡар итеүҙе ҡаты тәнҡитләйҙәр һәм быға сик 1934 йылда ҡуйыла.

Бөгөнгө тормошобоҙҙа педология тестарҙан ғибәрәт, йәғни, Төп дәүләт имтиханы һәм Берҙәм дәүләт имтиханы рәүешендә генә ҡалды. Был турала элек тә һөйләгәндәр икән һәм совет мәктәбе менән бөгөнгө мәктәпте сағыштырһаҡ, тестар насар нәмә булыуына төшөнәбеҙ.

Мәктәптәрҙә хәҙер интеллектуаль эшмәкәрлек алып барыу урынына балаларҙы зәғифләйҙәр. Бик ҡаты һәм файҙаһыҙ махсуслаштырыу (специализация) бара, ул хәтерҙә ҡалдырыу һәм ятлауға йүнәлтелгән. Логик операция, тикшереү һәм иҫбатлауҙы бик аҙҙар үтәй ала, ижади фекерләү хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Бер төрлө ятлаған хәлдә лә, дәрестә уҡытыусы менән мәсьәләне сисеүҙең башҡа ысулдары тураһында ла фекер алышамы берәйһе? ***Рәсәй юғары уҡыу йорттары педагогтары балаларҙың текстар менән эшләй белмәүен билдәләй. Автор белдерергә теләгән төп фекерҙе, теге йәки был абзацтың мәғәнәһен асыҡлай һәм 1-2 һөйләм менән шуны еткерә белмәй. Ә беҙҙең быуындыҡылар вузға уҡырға инер өсөн дүртәр-бишәр бит инша яҙа ине һәм уға баһаны хаталарына ғына түгел, күләменә лә ҡарап ҡуйҙылар. Аҡыл һәм интеллект күрһәткесе - ҡулдан яҙылған 4-5 битлек хеҙмәт. Шунан кәмерәк булһа, баһаһы ла түбәнәйә. Беҙҙең быуын балалары үҙ фекерҙәрен яҙма рәүештә еткерә алған. Хәҙерге балалар изложение йә инша яҙып ултырмаясаҡ, сөнки уларҙың фекерләү оҫталығы үҫешмәгән. Ә бына аңламаһа ла ятлап һөйләү бик яҡшы кимәлдә. Сөнки инша яҙыу ярҙамында үҫешергә тейеш нәмә бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан. Баланың хәтере яҡшы, әммә логикаһы юҡ.***

Элек бала теләһә ниндәй предмет олимпиадаһында ҡатнашып, призлы урын алып ҡайта алһа, хәҙер нисек шулай итмәк кәрәк? Логика һәм фекерһеҙ ҡоро белем донъяны танып белеүҙә лә яңылыш йүнәлеш бирә. Рәсәй, совет мәктәбе махсуслаштырмай ине, ул тормош башларға кәрәк булған нигеҙ, киң белем бирҙе. Ә айырым йүнәлеш буйынса махсус белемде техникум һәм вуздарҙа алдылар. Совет мәктәбендә уҡытыу кимәле уртасанан юғарыраҡ булды, барыһын да юғары урта дөйөм белем кимәленә иҫәп тотоп өйрәттеләр. Дистанцион белем биреү ҡулланыла башлағандан һуң был кимәл бөтөнләй түбән тәгәрәне. Һуңғы ваҡытта ябай ғына тест һынауҙарын да үтәй алмаған уҡыусылары өсөн уҡытыусыларға хатта аҡланырға тура килә. Ә быйыл алдан үткәреп ҡаралған Берҙәм дәүләт имтиханын нисек бирҙеләр икән?

### Интернет тәрбиәһе

Йәш быуынды формалаштырыуҙың иң мөһим проблемаларының береһе - уның тәрбиәүи функцияһы төшөп ҡалыуы. Элек мәғариф министры вазифаһын биләгән Фурсенко: "Совет мәктәбенең етешһеҙлеге Ижадсы әҙерләүҙә, ә беҙгә квалификациялы ҡулланыусы әҙерләү кәрәк", - тип ҡабатланы. Хәҙерге йәш кеше - ҡулланыусы, хәл-ваҡиғаға ҡарата тәнҡит күҙлегенән сығып һүҙ йөрөтә алмай. Бынан тыш, ул матур тышлыҡ менән ымһындырған нәмә артынан барасаҡ. Фекерләргә өйрәтмәгән, БДИланған мәктәптә һәм ҡулланырға ғына яратҡан йәмғиәттә үҫкән үҫмерҙәр, йәштәр Рәсәйҙең дәүләтселеген юҡ итергә йүнәлтелгән социаль-сәйәси процестарҙы формалаштырған Навальный һәм уның артында торғандарҙың ҡәҙерле клиенттарына әүерелде, 1917 йылда ла (Рәсәй империяһын тарҡатыу), 1991 йылда ла (СССР) нәҡ шулай булған. Билдәле булыуынса, телевидение ижтимағи аңды барлыҡҡа килтереүгә ҙур йоғонто яһай. Яҡынса 2010 йылдар тирәһенән аңға тәьсир итеүсе генә түгел, ә аныҡ эштәр атҡарырға саҡырған социаль селтәр барлыҡҡа килде. Быға уҡытыу процесынан тәрбиә өлөшөн алып ташлап, был бурысты социаль селтәрҙәргә япһарып ҡуйыу мөмкинлек асты. Тәүге осорҙа социаль селтәрҙәр йәштәр өсөн бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс менән янамаҫ кеүек ине. Оҫта педагогтарҙың, социаль селтәрҙәрҙә кире процестарҙың контролһеҙ таралыуын булдырмаҫҡа, тигән иҫкәртеүенә ҡолаҡ һалыусы булманы. Дистанцияла уҡыу йәштәребеҙгә бигерәк тә насар тәьсир итте. Социаль селтәрҙәрҙе бик күп балаларҙы һәм студенттарҙы ТикТок USA, Фейсбук, Инстаграм, Твиттер, Бәйләнештә, Синыфташтар һәм ТикТок Мәскәү, Nextlife Польша, Медуза Латвия һ.б. видеохостингтар кеүек виртуаль майҙансыҡтарға башкөлләй сумдырыу өсөн ҡулландылар.

Хәҙерге көндә социаль селтәрҙәр йәштәр араһындағы айырым төркөмдәрҙе ниндәйҙер эштәргә туранан-тура йүнәлтеү ҡоралына тиклем үҫеште. Мәҫәлән, 2021 йылдың 23 ғинуарында үткәрелгән протест акцияларында Ҡытайҙа барлыҡҡа килгән ТикТок ҙур роль уйнаны. Әммә цифрлы платформаның тос өлөшө АҠШ-та тупланған. ТикТок нимәгәлер саҡырып һәм анды формалаштырып ҡына ҡалмай, ул үҙ-үҙенде тотоу өлгөләрен дә күрһәтә. Был ҡалыптар аңһыҙ рәүештә үтәлә. Бар яңылыҡ шунда - йәштәр сәйәсәткә аңһыҙ рәүештә ылыға. Улар нимә булғанын да, кемдең кем икәнлеген дә аңламай, һәр төбәктә бер үк ҡалып буйынса һәм бер үк лозунгылар аҫтында сығыш яһайҙар. Ҡытайҙа 2010 йылда уҡ йәштәрҙең хис-тойғоларына тәьҫир итеп, уларҙың тәртибен күҙәтеү буйынса тикшеренеүҙәр башланды. Ә Рәсәйҙә Гонконгтағы митингыларҙы күҙәтеп барһалар ҙа, ул саҡта әле быға тейешле иғтибар биреүсе булманы. ТикТок - башҡа һыймаған ҡылыҡҡа туранан-тура этәргән ҡорал. АҠШ-та 100 миллион тирәһе үҫмер һәм йәш кеше ТикТок USA йоғонтоһонда. Янаған хәүеф-хәтәрҙе аңламау ҡурҡыта халыҡты. Беҙҙең балаларға беҙгә һәм ата-бабаларыбыҙға таныш булмаған яңы хәүефтәр янай. Беҙгә балаларыбыҙҙы ошо ҡурҡыныстарҙы еңергә һәм ҡатмарлы мәғлүмәт һуғышында тере ҡалырға өйрәтергә кәрәк. Был мәсьәләне хәл итеү юлдарына килгәндә, тәүҙә дөйөм күҙаллауҙарҙы, һуңынан үҙебеҙҙең шәхсән фекерҙе яҙып үтмәксебеҙ.

### Былар барыһы ла кәрәк!

Балаларыбыҙҙың киләсәге бөтә предметтарҙы ла - интеллектуаль, ижади һәм физик булғандарын да комплекслы өйрәнеү ул. Мәктәп балаларға бөтә көсөн һалып эшләргә бурыслы. Унда музыка, спорт, техникум һәм гуманитар йүнәлештәр берләшергә тейеш. Уҡыусы ҡайһы ишекте аса ла, уны әйҙәп индереп алып китерлек булһын. Бөтә предметтар ҙа уны тулыһынса ылыҡтырһын, уға ҡыҙыҡ булһын. Юғиһә, хәҙерге етенсе кластағылар ҙа хатта: "Был миңә тормошта кәрәк булмаясаҡ", - тип ысҡындыра. Ә бит ҡайһы бер өлкәндәр уларҙы ошо юҫыҡта тулыһынса хуплай. Эйе, улар һеҙгә кәрәк булмаҫҡа ла мөмкин, әммә беҙ үрҙә телгә алынған синопслы бәйләнештәрҙе һаҡлап ҡаласаҡбыҙ! Был - киләсәк!

Музыка һәм сәнғәт мәктәптәрен ябай белем усаҡтары менән берләштереү зарур. Һәр мәктәптә уҡыусылар төрлө музыка ҡоралдарында уйнарға, йырларға, һүрәт төшөрә белергә тейеш. Хорҙа йырлау - риториканың үҙе. Техникумдарҙы ла мәктәптәр менән берләштереп, прикладной фәндәрҙе уҡытыу юлына "йәшел урам" асырға кәрәк. Ижад - һүрәт төшөрөү, йырлау, театрҙа уйнау һәләттәре һ.б. бик мөһим. Дөйөм кешелек күҙлегенән сығып һүҙ йөрөтөүҙән түгел, ә бер нисә йылдан тормош яңы технологик тәртипкә ҡороласаҡ һәм техник инженер белемле бул-

✓ ***Балаларҙы күп мәҙәниле (мультикультурный) итергә ярамай, әле нәк шул процесс бара. Әгәр ҙә баланы бәләкәйҙән башҡа милләт мәҙәниәтендә тәрбиәләһәгеҙ, уның шәхесе формаһын үҙгәртәсәк - маңҡорт булып үҫәсәк.***

ған ижади фекерләргә һәләтле кешеләрҙе эшкә алырлыҡ бихисап яңы урындар барлыҡҡа киләсәк. Баланың логик-ижади технарь булыуы шарт. Киләһе 15-20 йылда робот техникаһы йүнәлешендәге белгестәр талап ителәсәк.

Хеҙмәт дәресендә балалар ағас ҡырҡыу һәм йышыуҙан тыш, машина йүнәтә, ябай һәм профессиональ иретеп йәбештереү ҡоралы менән эшләй белергә тейеш һәм был йәһәттән яңы мөмкинлектәр асҡан 3D аппараттар ҙа бар. Уның ярҙамында йорт йыһаздарын йыйырға, йорт проекттарын төҙөргә, төрлө объекттарҙың моделдәрен эшләргә һәм йыйырға мөмкин.

Физик культура - мотлаҡ! Мәктәптә спорттың бөтә төрҙәре менән дә, профессиональ кимәлдә булмаһа ла, шөғөлләнергә тейештәр. Иң яҡшыһы командалар менән ҡатнаша торғандары - волейбол, футбол, хоккей, ишеү һ.б. Улар коллектив фекерләүҙе барлыҡҡа килтерә, балаларҙы



йәмғиәтләштереүгә булышлыҡ итә. Сөнки тик бергә, берҙәм булып ҡына тормош ауырлыҡтарын еңеп сығырға мөмкин.

***Сит телдәрҙе өйрәнеүгә килгәндә, 2-3 төрлө тел уҡытыу насар түгел, әммә уларҙы тик 5-се синыфтан һуң ғына индереү кәрәк. Һәм балалар тик телде генә өйрәнһен, дәрестә уға бәйле бер ниндәй ҙә мәҙәни белем бирелергә тейеш түгел. Сөнки бала тәүҙә тулыһынса үҙенең милли мәҙәниәтенә нигеҙләнеп тәрбиә алырға тейеш, уны сит мәҙәниәт менән ҡатнаштырып болғау кәрәкмәй. Сит телде тәрәндәнерәк 10-11 синыфта уҡыта башларға мөмкин, ләкин был өҫтәмә рәүештә булһын. Бөтә мәҙәниәт, уның барлыҡ элементтары, әкиәттәр, әкиәт башы, һамаҡ һүҙҙәр һ.б. тик туған телдә генә һөйләнергә тейеш. Балаларҙы күп мәҙәниле (мультикультурный) итергә ярамай, әле нәк шул процесс бара. Әгәр ҙә баланы бәләкәйҙән башҡа милләт мәҙәниәтендә тәрбиәләһәгеҙ, уның шәхесе формаһын үҙгәртәсәк - маңҡорт булып үҫәсәк.*** Психологтар белдереүенсә, донъялағы иң ауыр телдәр урыҫ, ғәрәп, төрки һәм фарсы, ҡытай телдәре. Улар кеше мейеһендә иң күп нейрондар-ара бәйләнештәр булдыра. Бындай мөмкинлектәрҙе дөрөҫ файҙаланыу мөһим беҙгә.

## Бала менән һөйләшегеҙ

Беренсенән, бала менән бәләкәйҙән һөйләшергә, әкиәттәр, тарих һөйләргә кәрәк. Йәнһүрәттәрҙе тик телевизорҙа күрһәтелгәндәренән һайлап ҡына ҡарарға рөхсәт итеү мөһим. Смартфон һәм планшеттарҙы йәнһүрәт һәм фильм ҡарау, уйын уйнау саралары итеп ҡулланмаҫҡа кәрәк. Әгәр ҙә балаға телефонда, компьютерҙа уйнау, йәнһүрәт ҡарау йәки китап уҡыу араһынан һайларға ҡушһаң, ул китап уҡымаясаҡ. Был - физиология, организм күп энергия сарыф итергә теләмәй, ә мейене эшләтеү нәк күп көс талап итә. Ә бала китап уҡымай икән, нимә килеп сығыуы билдәле. Өйҙә булғанда телефонды һүндереп ҡуйыуҙы, йәки уны тик шылтыратып һөйләшеү өсөн генә ҡулланыуҙы ҡағиҙә итеп алырға кәрәк. Әммә бер ниндәй ҙә уйындар булмаһын. Видеоларҙы тик телевизорҙан йәки компьютерҙан ғына ҡараһын.

Психологиянан беҙ бала ни өсөн уйындарға һәм йәнһүрәттәргә ылығыуын яҡшы аңлайбыҙ, унда образдар сағыу эшләнә. Китаптағы һүрәттәр ҙә балаға ҡыҙыҡлы, ләкин уға сағыу һәм еңел аңлашылған образдар кәрәк. Сағыу мәғлүмәт бик тиҙ иҫтә ҡала. Әммә йәнһүрәт һәм фильмдар ҡарағанда мейенең ярымшарҙары бөтөнләй эшләмәй, улар кешенең йоҡо мәлендәге кеүек хәлдә була.

Йоҡлар алдынан да йәнһүрәт урынына әкиәт һөйләү отошло. Әлбиттә, әҙер яҙҙырылған аудиотаҫманы ҡабыҙмай, әсәй үҙе йәки өләсәй һөйләһә, тағы ла яҡшыраҡ. Бала әкиәт тыңлағанда уның тураһында уйлана, хыялға бирелә, образдарҙы үҙенсә күҙ алдына килтерә, мейеһе эшләй. Һүҙҙәр образдарға әүерелә. "Бабай шалҡан сәскән" тигәндә бала ниндәйҙер әҙер һүрәтте генә күҙ алдына килтермәй, ул ниндәйерәк бабай килеп, ҡайҙа нисек итеп шалҡан сәсеүен күҙ алдына баҫтыра. Йәнһүрәт йәки рәсем рәүешендә әҙер образдарҙы күрһәтмәҫкә кәрәк. Балалар өсөн һүрәтһеҙ әкиәттәр һәм китаптар булырға тейеш!

Икенсенән, бала 5-7 синыфта ғына уҡығанда Берҙәм дәүләт имтиханы тестарына әҙерлек һәм алған билдәләре тураһында артыҡ борсолмағыҙ. "Бишле"ләре өсөн үтә ныҡ маҡтап та, "икеле" алғанда ҡаты бәрелеп тә бармағыҙ, баҫымды бөтөнләй икенсе йүнәлешкә яһағыҙ. Сөнки 11 синыфҡа тиклем әллә күпме ваҡыт бар һәм БДИ әллә була, әллә юҡ. Һис юғында, нигеҙле белем алған баланы был һынауға 1 йыл эсендә әҙерләүе ауыр булмаҫ. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙыл аттестат һәм диплом бер кемгә лә кәрәк булмауын, уның урынына ғәмәлдә ҡулланып булырлыҡ ысын белем мөһимлеген аңлағыҙ.

Өсөнсөнән, совет дәреслектәрен һатып алығыҙ, йәки интернеттан эҙләп табығыҙ. Барлыҡ өйгә эштәрҙе әҙерләп бөткәндән һуң, бала был китаптарҙы буш ваҡытта уҡып сығыу өсөн генә ҡулына алһын. Мәктәптә үткән программаға ярашлы, аҙнаһына бер теманы уҡып сыҡһа ла етә. Күнегеүҙәрҙе эшләмәйенсә, шуларҙы ҡарап өйрәнһә лә була. Ни өсөн нәк совет дәреслектәре тиһегеҙме? Сөнки совет дәреслектәрен уҡығанда бала донъяны мозаика рәүешендә танып белә, унда фән-ара бәйләнештәр асыҡ бирелгән. Бала уларҙы өйрәнә һәм нормаль логика формалаша - донъяны мозаика рәүешендә танып белеү барлыҡҡа килә. Ә хәҙерге дәреслектәрҙә бер ниндәй логика күҙәтелмәй, бер һүҙ менән әйткәндә - калейдоскоп. Шунлыҡтан, тәү сиратта балала мозаика-логик системаны булдырыу мөһим. Ябайҙан ябай системаға, ә беҙҙе өйрәткәндәренсә, ябайҙан ҡатмарлыға түгел. Бала айырым мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн бихисап мәғлүмәтте ятлап хәтерендә ҡалдырһа, ул логиканы төшөнмәй. Совет дәреслектәре нәк ошоно иҫәпкә алып төҙөлгән, бала уҡығанын атаһына һөйләй, уның эргәһендә ултырып аңлатыуын тыңлай.

## Атай һәм олатай эше

Артабан иң мөһим өлөшкә күсәбеҙ. Атай йәки олатай эше. Сөнки когнитив функцияларҙы тик ир-ат ҡына формалаштыра. Әсәй кеше балаларға хис-тойғолар аша аңларға өйрәтә. Когнитив-танып белеү һәләттәрен ир кеше - атай йәки олатай формалаштырырға тейеш. Әсәй аҡыл эшмәкәрлеген формалаштырырға тейеш түгел. Әсәй - тойғолар. Әсәйгә барып мыжырға, кемделер ошаҡларға мөмкин. Малай һәм ҡыҙ атаһының когнитив кодын үҙенә алырға тейеш, ир кешенең роле шул. Хис-тойғолар менән - әсәйгә, ниҙелер аңлау өсөн - атайға. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөн күп балалар атайһыҙ үҫә, кемдәренең олаталары ла эргәһендә түгел, шулай ҙа ниндәйҙер хәл итер юл табырға кәрәк.

Шулай итеп, көн һайын кис эштән һуң атай, олатай һәр бала менән һөйләшеүгә 20-30 минут бүлә, ул нимә уҡыған, ниндәй китап, бөгөн йәки был аҙанала дәрестә нимә үткәндәр һ.б. тураһында һорашып белә. Мәҫәлән, география буйынса нимә уҡыған, аңламаған урындары бармы? Бөтә бүлекте шатырлатып һөйләтеп алырға түгел, ә ни бары бала өсөн ҡыҙыҡ тойолған, йәки уға аңлашылмаған урындарын белеүҙе маҡсат итергә һәм аңлатырға. Бына шулай эш башлана, атай йәки олатай бала менән аралаша, үҙе белгән ниндәйҙер ҡыҙыҡ мәғлүмәт, иҫтәлектәре менән бүлешә. Атай үҙенең логикаһын, тормошҡа ҡарашын балаға еткерә. Төп асыл бына ниҙә.

Әммә уртаса кимәлдәге балаға 20-30 минуттан күберәк, 45-60 минут ваҡыт бүлеү талап ителә. Уның менән дәрес эшләргә кәрәкмәй. Уны ул үҙаллы эшләй, сөнки бала яҡшы билдәләрҙән тыш, белем кәрәк булыуын аңларға тейеш. Ниндәйҙер бер мәлдә бала үҙаллы уҡыһын. Үҙаллылыҡҡа бер аҙым яһау мөмкинлеген бирегеҙ, юғиһә, көсләп уҡытһағыҙ, баланың ихтыяр көсө үҫешмәйәсәк. Бәлки, тәүҙә ул үҙ иркенә ҡуйылыуын аңлап, ялҡауланып алыр һәм тиҙ арала көндәлегенә "икеле"ләр сәпәтеп ҡайтыр. Шулай ҙа был күренеш күңеленә хуш килмәҫ, бер көн үҙе тырышлыҡ һалып уҡый башлар. Бер синыфта уҡыған малайҙар араһында алдынғылыҡ өсөн күҙгә күренмәгән көрәш һәр саҡ бара. Әгәр ҙә инде айырым малайҙар ғына уҡыған синыф булһа, был процесс ике тапҡырға тиҙерәк барасаҡ.

Баланың хәленән килмәй икән, мәсьәләне сисеүҙең беренсе юлы итеп репетитор яллайҙар. Әммә репетитор саҡыртыу өсөн матди мөмкинлеге булмаған ғаиләләргә нишләргә? Репетитор кәрәкмәй! Ул бөтәһен дә балаға сәйнәп ҡаптыра, бала көсәнмәй. Ике алғың килмәй икән, бына һиңә күнегеүҙәр китабы, дәфтәр, айырым мөйөш - шунда барып ултыр ҙа уҡы, телевизор, телефонды онот. Өс-дүрт сәғәт ултыраһыңмы, мәсьәләне сисмәйенсә торма. Әлбиттә, былай ҡатылыҡ күрһәтеүе ауыр, ләкин бала үҙе уҡырға тейеш. Атай-әсәйҙең төп бурысы баланы үҙаллы белем алырға өйрәтеү. Уҡыу - ул аңлы рәүештә кәрәкле белем алыу.

Ҙурайған һайын схоластика, анализ, абстракт фекерләүгә яҡшы гуманитар әҙәбиәтте ҡушып, гуманитар фәндәргә ҡыҙыҡһыныу уятҡанда бала тормошта һис юғалып ҡалмаясаҡ. Былар уға үҙ тормошон ҡорор өсөн яҡшы нигеҙ. Ябай хәлдән ябай системаға. Тормошта - был бергә һалынған ҡатмарлы социаль супер системалар. Беҙҙең балалар бер-береһе менән аралаша һәм ошо системалар менән идара итеүҙә ҡатнаша.

## Китап уҡы!

Мәктәпкә бала нимә менән ҡыҙыҡһыныуын белеү мөһим түгел, уҡытыу программаһы гуманитар фәндәр буйынса ла, теүәл фәндәрҙән дә тигеҙлек һаҡлап төҙөлөргә тейеш. Гуманитар фәндәргә барымы булған балаларға математика, физика, химия кәрәк һәм дәрестәрҙе ябайлаштырырға ярамай. Бөтә балалар ҙа 16 йәшкә тиклем иң кәмендә донъя классиктарының 300 китабын уҡып сығырға тейеш. Бынан тыш, тағы ла оҡшаған авторҙарҙың 5-10 әҫәр йыйынтығын уҡыһа - бик шәп. Классик әҙәбиәтте уҡыу мөһим. Унда кешеләрҙең үҙ-үҙен тотошон сағылдырған 31 төрлө сағылыш таба, быларҙы белеү киләсәктә ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итәсәк. Махсус китаптарҙы һуңыраҡ уҡый башлаһа ла ярай. Ә классик әҙәбиәт - ул мотлаҡ кәрәкле базис. Бәлки, ваҡыт үтеү менән был китаптарҙағы геройҙар исемен, хатта уның авторын да хәтеренә төшөрә алмаҫ, ләкин ниндәй хәлдә үҙенде нисек торға кәрәк тигән күҙаллау аңында һаҡланасаҡ. Уның тәртибе һәм социаль танып белеүе китап уҡымаған кешегә ҡарағанда киңерәк буласаҡ.

Фән йылдан-йыл бер туҡтауһыҙ алға бара. Бер йыл элек алдынғы иҫәпләнгән белем бөгөн иҫкерә. Телефон кеүек, ул да бер нисә йыл элек кенә төймәле ине, хәҙер сенсорлы. Барыһы ла йәшен тиҙлегендәй үҙгәрә. Быларҙың барыһы хаҡында мәктәп һәм белем күҙлегенән сығып фекер йөрөтһәк, үҙенәнүҙе шундай һорау тыуа: "Нисек уҡытырға - белемгәме, әллә аңларғамы?"

Беҙҙә борондан "Күпте белгән һайын, аҙ аңлайым" тигән халыҡ аҡылы бар. Әгәр беҙ мәктәп уҡыусыһына, студентҡа белем бирһәк - был бер, ә уны предметтың төбөнә төшөнөргә, эш-хәрәкәт логикаһына өйрәтһәк - ул үҙаллы шәхес булып үҫешәсәк һәм барған хәл-ваҡиғаларҙы аңлауҙа, яңы мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм төшөнөүҙә һығылмалыҡ күрһәтәсәк. Унда Айырыу барлыҡҡа киләсәк (Фуркан). Беҙгә, педагогтарға, йәш кешене аңлау алгоритмына, белем эстәргә өйрәтергә кәрәк. Шул осраҡта ул Аҡыллы кеше буласаҡ һәм үҫеп килгән быуын алдына кешелек үҫеше ҡуйған социаль мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл итә аласаҡ. Бөтә мәсьәләләрҙе лә хәл итеп була, ләкин яҡшы һөҙөмтә тик әҙерлектең ни тиклем сифатлы булыуынан ғибәрәт. Тормошта Берҙәм дәүләт имтиханындағы кеүек әҙер яуаптар юҡ. Улар бар мәсьәләләрҙе тик үҙҙәре генә хәл итергә тейеш була, һәм уларҙы ғаиләһе, йәмғиәт, Ватан өсөн яуаплылыҡ алырға өйрәтеү - беҙҙең бурыс. Бөгөн Гамлетса "Булырғамы, булмаҫҡамы?" тигән нөктәне үткән яуаплы ир-егеттәргә шул тиклем ҙур ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Был бик ҙур проблема.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**М.Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты.**

**Шамил БАТЫРШИН,**
**БДУ-ның һәм М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның өлкән уҡытыусыһы.**

ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

**Бөгөнгө көндә Рәсәй мәктәптәрендә эшләгән уҡытыусыларҙың 87 проценты - ҡатын-ҡыҙҙар, ә ҡалғандарын ир-егеттәр тәшкил итә. Күреүебеҙсә, белем һәм тәрбиә биреү өлкәһендә көслө заттар бик аҙ эшләй. Был күренеш, әлбиттә, педогогик процесҡа кире тәьҫир итә. Ни өсөн тигәндә, мәктәптәрҙә малайҙар менән ҡыҙҙар нисбәте тигеҙ, хатта тәүгеләре бер нисә процентҡа күберәк тә. Шулай булғас, ир тәрбиәһе күберәк талап ителә. Ләкин был проблемаға артыҡ иғтибар итмәгән һымаҡтар. Улай ғына түгел, һуңғы ваҡыттарҙа ҡайһы бер вазифалы кешеләр, юғары трибуналар артына баҫып: "Тәрбиә - ул ҡатын-ҡыҙҙар эше", - тип сығыштар ҙа яһай башланы. Ирҙәрҙе мәктәпкә килтерергә ҡулдарынан килмәгәс, халыҡ араһында шундай ялған ҡараш булдырырға тырышалар, ахыры. Ундайҙар хәҙерге педагогиканы ғына түгел, ә халҡыбыҙҙа быуаттар буйына йәшәп килгән, "Атайҙан күргән - уҡ юнған, әсәйҙән күргән - тун бескән", тигән аҡылды ла аяҡ аҫтына һалып тапайҙар, минеңсә.**

# БЕҘҘЕҢ МӘКТӘПТӘРҘӘ МАЛАЙҘАР...

## "уҡ юнырға" түгел, "тун бесергә" өйрәнә



...Ә бит педагогика фәненә беҙҙең эраға тиклем үк Платон, Сократ, Аристотель, Демокрит кеүек мәшһүр аҡыл эйәләре нигеҙ һалған. Күреүебеҙсә, уларҙың бөтәһе лә ир затынан. Шулай уҡ күренекле педагогтар Песталоцци, Ушинский һәм Сухомлинскийҙарҙың хеҙмәттәрендә лә "Белем биреүҙә ир уҡытыусыларҙың роле баһалап бөткөһөҙ", тигәнерәк ҡараштар ярылып ята. Дөрөҫ аңлағыҙ, мин был мәҡәләмдә ҡатын-ҡыҙҙарҙың белем һәм тәрбиә өлкәһендәге ролен бер ҙә кәмһетергә йыйынмайым, ә киреһенсә, ирҙәрҙеке лә шулар кимәлендә булыуын күрһәтергә тырышам.

Әлбиттә, уҡытыусылар, ниндәй енестән булыуҙарына ҡарамаҫтан, һәр предмет буйынса ла белемдә бер үк кимәлдә бирәсәктәр, йәғни талап ителгән программаларҙы үтәйәсәктәр. Шуғамылыр, беҙ мәктәптә ир ҙә, ҡатын да түгел, ә бөтәбеҙ ҙә - уҡытыусылар, тип әйтеүселәр ҙә бар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, белемдә бер кимәлдә бирә алһалар ҙа, тәрбиә биреү бер үк кимәлдә килеп сыҡмаясаҡ шул. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙар менән ир-егеттәрҙең психологияһы, шулай уҡ когнитив һәләттәре лә бер төрлө түгел икәне хәҙер бөтәһенә лә билдәле. Әйтәйек, когнитив һәләттәренә килгәндә, ирҙәрҙең фекерендә объективизм өҫтөнлөк итһә, ҡатындарҙыҡында - субъективизм; шулай уҡ тәүгеләренең фекерләүе логикаға нигеҙләнһә, аҙаҡҡыларының - хис-тойғоға һ.б. Ғөмүмән, кешелек йәмғиәтендә уларҙың ҡараштары араһында тигеҙлек - баланс булырға тейеш. Шул ваҡытта тормошобоҙҙа ыңғай үҙгәрештәр күберәк булыр, изгелек өҫтөнлөк итер. Ә инде шул тигеҙлек юҡҡа сыҡһа, иманым камил, тормошобоҙҙа кире күренештәрҙең артыуына килтерәсәк.

...Бөгөнгө белем һәм тәрбиә биреү системаһында ир-егеттәрҙең етешмәүе ул тигеҙлекте аҡрынлап юҡҡа сығара. Нисегерәк юҡҡа сығара һуң ул? Быны аңлатыу өсөн башта психология фәненән Аң тураһындағы теорияларҙың ҡайһы бер урындарын иҫкә төшөрөп үтәйем. Унда "Аң - ул уратып алған ысынбарлыҡтың кире сағылышы" ("Сознание - это есть адекватное отражение действительности"), тигәнерәк һүҙҙәр яҙылған. Йәғни, кешенең аҡылын, фекерләүен, ҡарашын, характерын, психикаһын, хис-тойғоларын (һ.б) уны уратып алған ысынбарлыҡ барлыҡҡа килтерә.

...Ә хәҙер бөгөнгө мәктәптәргә күҙ һалайыҡ. Унда башҡарылған күпселек эштәр: дәрестәр, тәрбиә биреү саралары, төрлө конкурстар, байрамдар, йыйылыштар (һ.б.) - бөтәһе лә тиерлек ҡатын-ҡыҙҙар аҡылына һәм фекеренә нигеҙләнгән. Әгәр директор ҙа гүзәл заттан булһа, ул күренеш йөҙ процентҡа барып етә, тиһәң дә була. Уҡыусыларҙың бөтәһе лә: малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа ун бер йыл буйы шул ысынбарлыҡ эсендә йәшәй. Һәм шул ысынбарлыҡ уларҙың аңында кире сағылыш таба ла инде. Бәлки, был күренеш ҡыҙҙар өсөн артыҡ ҡурҡыныс та түгелдер. Ә бына малайҙарҙың үҫешенә кире йоғонто яһай: уларҙың аңында ҡатын-ҡыҙ аҡылы, фекерләүе һәм психикаһы формалаша башлай. Образлы итеп әйткәндә, беҙҙең мәктәптәрҙә малайҙар "уҡ юнырға" түгел, ә "тун бесергә" өйрәнәләр. Бына шулай йәмғиәтебеҙҙә ысын ир-егеттәр аҡрынлап юҡҡа сыға бара. Был күренеш ниндәй эҙемтәләргә килтерә һуң? Шуларҙың ҡайһы берҙәренә аныҡыраҡ туҡталып китергә кәрәктер.

*Беренсенән.* Ер шарында кеше тигән йән эйәһе йәшәй икән - һуғыш ҡурҡынысы мәңге буласаҡ. Шуға Тыуған илде, Тыуған ерҙе, Тыуған төйәкте һаҡларлыҡ ирҙәр һәр ваҡыт кәрәк. Ә беҙҙең "тун бесергә" өйрәнгән егеттәр ундай мөһим бурысты үтәй алырҙармы?

*Икенсенән.* Балалар баҡсаһынан башлап, мәктәпте тамамлағансы ҡатын-ҡыҙҙар тәрбиәһе аҫтында йөрөгән күпселек малайҙарҙа ҡатындарға буйһоноу психологияһы барлыҡҡа килә. Артабан да, ғаилә ҡорғас, улар үҙҙәренең хәләл ефеттәренә буйһоноп йәшәүҙе дауам итәсәк. Ғәҙәттә, ундайҙарҙы халыҡ араһында "подкаблучник" тиҙәр. Тәү ҡарашҡа был күренеш артыҡ ҡурҡыныс та түгел һымаҡтыр. Ләкин төптәнерәк уйлап ҡараһаң, шул асыҡ күренә: ғаилә кимәлендәге проблемаларҙы хәл итеп өйрәнмәгән ирҙәр ил кимәлендә килеп тыуған ҡайһы бер сетерекле мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә бөтөнләй ҡатнаша алмаясаҡтар. Урамға сығырға ҡурҡып, тәҙрәнән ҡарап ултырасаҡтар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай ирҙәрҙең һаны йылдан-йыл арта бара. Сөнки мәктәптәрҙәге шарттар башлыса шундайҙарҙы тәрбиәләүгә ҡоролған бит...

*Өсөнсөнән.* Йәмғиәтебеҙҙә былай ҙа ирҙәр кәмей, шуларҙың араһында ирҙәрсә фекер йөрөткәндәре тағы ла әҙәйә. Бик көслө фекерләү һәләте юҡҡа сыға. Ә бит егерменсе быуатҡа тиклем ирҙәр логикаһы бик күп аҡыл эйәләрен тыуҙырҙы, фәнни асыштар яһаны, ижад итте. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гүзәл йәмғиәт кенә төҙөй алмаһа шул... Сөнки ул ваҡытта ирҙәрҙең генә ҡарашы өҫтөнлөк итә ине. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы бөтөнләй иҫәпкә алынманы. Уларҙы төрлө юлдар менән ҡыҫтылар һәм баҫтылар. Шуға йәмғәт эштәрендә бөтөнләй ҡатнашманылар - аш-һыу әҙерләү, бала тәрбиәләү кеүек эштәрҙән ары китә алманылар.

...Бөгөн, киреһенсә, ҡатын-ҡыҙҙар аҡылы өҫкә ҡалҡып сыға башланы. Тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрендә лә улар хәҙер әүҙем ҡатнаша. Был бик яҡшы! Тик барыбер улар гүзәл тормош төҙөй алмаясаҡтар, сөнки ирҙәрсә фекерләгән ирҙәр эре аҙымдар менән бөтөүгә табан бара. Әгәр ирҙәр ҡарашы өҫтөнлөк иткән ваҡытта йәмғиәттең үҫеше бер яҡҡа ҡыйшайһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы өҫтөнлөк иткән ваҡытта икенсе яҡҡа ҡыйшаясаҡ. Бына шуға ла ирҙәр ҡарашы менән ҡатын-ҡыҙҙар ҡарашы араһында тигеҙлек, шулай уҡ уларҙың икеһе лә бер үк кимәлдә көслө булырға тейештәр. Береһе ҡыйшая башлаһа, икенсеһе уны төҙәтерлек булһын. Ә уларҙың фекерләүҙәрен бер үк кимәлдә тәрбиәләү мәктәп эскәмйәһенән башланырға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә быны тормошҡа ашырып булмай, сөнки беҙҙең мәктәптәрҙә ир уҡытыусылар - ирҙәр аҡылы юҡ кимәлендә...

***...Башҡа илдәрҙә бындай проблема нисек хәл ителә һуң? Минең белеүемсә, хәҙерге ваҡытта Европала Англияның белем биреү системаһы иң яҡшыларҙың береһе булып һанала, ә Азия илдәре араһында - Японияныҡы. Бына шул илдәрҙәге мәктәптәрҙә эшләгән ирҙәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың нисбәтенә күҙ һалайыҡ әле. Иғтибар итегеҙ: Японияла башланғыс синыфтарҙа эшләгән уҡытыусыларҙың - 40 процентын, урта синыфтарҙа - 50, ә өлкән синыфтарҙа 70-80 процентын ир-егеттәр тәшкил итә! Англия мәктәптәрендә лә шундай уҡ нисбәт, тик уларҙа урта синыфтарҙа ир уҡытыусылар һаны 10 процентҡа күберәк. Уртаса алғанда, ике илдә лә ир уҡытыусылар һаны 60 процент тирәһе, ә ҡалғандары ҡатын-ҡыҙҙар. Күреүебеҙсә, уларҙа ирҙәр күберәк. Шулай булырға тейеш, сөнки малайҙар күберәк тыуа, шуға мәктәптәрҙә лә улар һаны күберәк.***

Һәм иң мөһиме: шул илдәрҙәге етәкселек мәктәптәрҙәге бындай нисбәтте төрлө юлдар менән һаҡлай. Шулай булғас, был күренештең белем һәм тәрбиә биреүгә ыңғай йоғонто яһағанын улар яҡшы белә булып сыға. Әйтергә кәрәк, ул илдәрҙә белем биреү системаларының юғары кимәлдә булыуының бер сәбәбе лә шулдыр. Шуныһы ҡыҙғаныс: беҙҙең белем биреү системаһын үҙгәртеү өсөн закон ҡабул итеүселәрҙең күбеһе үҙҙәренең балаларын Англияла һәм башҡа Европа илдәрендә уҡытырға тырышалар. Үҙҙәренең ҡабул иткән закондарына үҙҙәре ышанмайҙар, ахыры...

...Ә беҙҙең мәктәптәрҙә ни өсөн ирҙәр һаны аҙ һуң? Әлбиттә, был һорауға яуапты бөтәһе лә белә: уҡытыусыларҙың эш хаҡын күтәрергә кәрәк, шунһыҙ көслө заттар мәктәптәргә килмәйәсәк. Сөнки ирҙәр - ғаилә башлығы, бөгөнгө уҡытыусының эш хаҡы менән ғаиләне аҫрап булмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яҡын киләсәктә лә эш хаҡының артыуы көтөлмәгән һымаҡ. Нимәләр һөйләйҙәр, ләкин артыҡ бер нәмә лә үҙгәрмәй. Теләмәйҙәр ҙә, ахыры. Шуға, минең был яҙғандарыма ла иғтибар итмәйәсәктәр, тип уйлайым. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең илдә ирҙәрҙең юҡҡа сығыуы дауам итә әле...

"Береһе лә иғтибар итмәгәс, ни өсөн яҙҙың һуң?" тип һорарҙар ошо урында. "Яҡшылыҡ эшлә лә һыуға һал - халыҡ белмәһә, балыҡ белер", тигәнерәк аҡыл йәшәй бит беҙҙең халыҡта. Бына шуға яҙҙым...

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҺАЛДАТТАРҒА ХАТ



**Апрель аҙаҡтарында Белорет эшҡыуарҙары һәм ҡала халҡының иң әүҙемдәре тырышлығы менән Донбасс һәм Луганскиҙа махсус операцияла ҡатнашыусы һалдаттарға ебәреү өсөн көндәлек кәрәкле әйберҙәр, медикаменттар менән бергә 100 меңдән ашыу аҡса һәм күстәнәстәр тупланды.**

Беҙҙең Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһы уҡыусылары ла был изге эштән ситтә тороп ҡалманы. Ҡала һәм районыбыҙҙың бик күп сараларында бағыусы булған эшҡыуар Резеда Рифҡәт ҡыҙы Сайдарованың тәҡдименә ҡушылып, гимназия уҡыусылары һалдат ағайҙарына хат яҙырға булды. Башҡортостан, район хәлдәрен бәйән иттеләр, гимназия менән таныштырҙылар, шулай уҡ уҡыуҙары, йәмғәтселек эштәре хаҡында ла яҙырға онотманылар. Уҡыусылар һалдаттарға үҙ бурыстарын уңышлы үтәп, тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләне, ә үҙҙәре киләсәктә илебеҙҙең лайыҡлы эшсәндәре, оҫта белгестәре һәм ватаныбыҙ һаҡсылары булып үҫеү өсөн тырышып уҡырға һүҙ бирҙе. Балаларҙың ихлас йөрәктән юлланған изге хәбәрҙәре хәрбиҙәр күңелен йылытҡандыр, тыуған яҡтарҙан ҡайнар сәләм булып барып еткәндер, тигән өмөттәбеҙ. Кем белә, бәлки, был хаттар унда Башҡортостандан барған егеттәр ҡулына ла эләгеп, уларға дәрт-дарман өҫтәгәндер.

**Сәриә ҠАҺАРМАНОВА,**
**гимназия уҡытыусыһы.**

ӨС ҺОРАУ

# КИЛӘСӘККӘ ХАТ ЯҘАМ...



**Ошо көндәрҙә тележурналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, шағирә Гөлдәриә ЙОСОПОВАның "Киләсәккә хат яҙам" тигән шиғри китабы донъя күрҙе. Ҡәләмдәшебеҙҙе ҡотлайбыҙ, "Ижадың һүҙ сәнғәтенә артабан да үҙенсәлекле төҫ бирһен", тип теләйбеҙ һәм уға: "Әҙәбиәтебеҙҙең киләсәген нисек күрәһең? Киләсәккә өндәшеү кешелеккә яуаплылыҡ өҫтәүҙе аңлатмаймы, ниндәй өмөт һәм ышаныс сағыла был һүҙҙәрҙә?" - тигән һорауҙарыбыҙҙы юллайбыҙ.**

- Ысынлап та, быйыл 8 март байрамы алдынан үҙемдең шиғри йыйынтығымды ҡулға алып бик һөйөндөм. Шиғри йыйынтыҡ авторы булыу, бер яҡтан, күңелемде үҫтереп ебәрһә, икенсе яҡтан, оло яуаплылыҡ өҫтәүен аңлайым. Китабымдың Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапханала уҙған исем туйында хеҙмәттәшем, билдәле яҙыусы һәм журналист Рәсүл Сәғитов: "Үҙен йәмәғәтселеккә китап авторы тип танытҡан кеше бер баҫма менән туктап ҡалмаҫҡа, артабан да үҙенең ижады менән телебеҙҙе, туған әҙәбиәтте үҫтереүгә өлөшөн даими индерергә тейеш",- тигәйне. Рәсүлдең был фекере менән тулыһынса килешәм. Китабымдың исеме ҡыш миҙгеленә һөкланып яҙылған бер шиғырымдан алынды. Әммә минең шиғырҙарым тәбиғәткә ябай һөкланыу ғына түгел, ә тирә-яҡтағы күркәм күренештәр, шул уҡ миҙгелдәр алышыныуы кеүек һәр кемде битараф ҡалдырмаған мәлдәргә иғтибар итеп, киләсәгебеҙ, ил һәм халыҡ яҙмышы тураһында уйланыуҙарға ҡоролған, тип әйтер инем.

*Илаһи ҡыш матурлығы*
*Күскән бик борондарҙан.*
*Мин дә бөгөн ап-аҡ ҡарҙа*
*Киләсәккә хат яҙам!..*

Был юлдар аша мин ерем киләсәге өсөн борсолоуым, беҙгә бик борон замандарҙан - тәүтормош ваҡыттарынан күскән тереклек донъяһын һаҡлау һәм уны килер быуындарға тапшырыу өсөн замандаштарыбыҙҙың һәм үҙемдең дә яуаплы булыуыбыҙҙы билдәләргә теләнем. Был шулай уҡ әҙәбиәткә лә ҡағыла, әлбиттә! Әлеге ваҡытта башҡорт телендә яңы шиғыр йәки хикәйә, роман, повесть ижад иткән, китап сығарған һәр кем ысынлап та киләсәккә хат яҙа, килер быуындарға матур әҙәбиәт өлгөләре тапшырып, рухиәтебеҙҙең артабанғы үҫешенә, йәшәүенә булышлыҡ итә. Төп эшем журналистика булһа ла, үҙем дә шиғыр-хикәйәләр яҙғас, хәҙерге ижадсылар менән тығыҙ бәйләнештә булырға тырышам, шуға ла башҡорт әҙәбиәтенең бөгөнгөһөн һәм киләсәген лайыҡлы күрһәткән көслө авторҙар бар һәм буласаҡ, тип, ышаныс менән әйтә алам. Минең дә киләсәккә хатым килер быуындарға барып етер, тип өмөтләнәм.

➔ **Һәр заман һәр быуынға үҙ һынауын ҡуя. Бөгөн йәш кеше тормошта үҙ урынын тапһын өсөн ниндәй сифаттар мөһим?**

- Эйе, һәр замандың үҙенең кумирҙары һәм кире геройҙары бар. Бер ҡарағанда, әлеге үҫмерҙәр бынан 30-40 йыл элек булған тиҫтерҙәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай кеүек. Шулай уҡ шуҡтар һәм шаяндар. Алдарына юғары маҡсаттар ҡуя, гаджеттар ярҙамында тейешле мәғлүмәтте үҙләштерә беләләр. Был бик мәслихәт. Сөнки киләсәгебеҙ киң мәғлүмәтле генә түгел, ошо аң-белемде тормошта дөрөҫ файҙалана, йәмғиәт үҫешенә файҙа килтерә ала торған кешеләр ҡулында. Ҡызғаныҫка, балалар һәм үҫмерҙәр араһында китап менән ҡыҙыҡһыныу, китап уҡыусылар кәмеүе кеүек күңелһеҙ күренеш тә бар. Тормошта үҙ урынын табырға теләгән йәш кешегә халҡыбыҙҙың данлы тарихын, ғорурланып телгә алырлыҡ шәхестәрен белеү ҙә һис тә артыҡ түгел. Һәм тағы ла үҫмер саҡтан сәләмәт тормош алып барыу, спорт менән шөғөлләнеү, һаулығыңды ҡайғыртыу ҙа мөһим. Тән һәм рух сәләмәтлеге - илебеҙ киләсәген дауам итер йәштәргә төп талаптар.

➔ **Глобаллашеү беҙҙең рухи донъябыҙға, мәҙәниәтебеҙгә кире йоғонто яһамаҫмы? Рухи ҡибла тигән саҡта нимәне күҙ уңында тотаһың?**

- Кире яҡтары күп булыуға ҡарамаҫтан, глобаллашеу кешелек үҫешенә хеҙмәт итә, тип уйлайым. Интернет селтәрендә ҡулланыусыларҙың рухи-мәҙәни зауығын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән төркөмдәр һәм сайттар бик күп. Иҫләһәгеҙ, бынан бер нисә йыл элек "Башҡортостан" гәзите менән "Бәйләнештә" сайтындағы "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмө "Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына - 70 юллыҡ шиғыр" тигән әҙәби акция иғлан иткәйне. 70 кеше - һәр ҡайһыбыҙ берберебеҙҙең уйҙарын дауам итеп, илһөйәрлек рухындағы шиғыр ижад иттек. Студент саҡта туктап ҡалғандан һуң, кире ижадҡа тотоноуыма ла ошо глобаль селтәр сәбәпсе булды. Халыҡ интернетҡа үҙенең ижад емештәрен ҡуя башлағас, бер көн мин дә үҙемдең бер шиғырымды ҡулланыусылар иғтибарына сығарырға батырсылыҡ иттем. Шунан билдәле шағирә һәм йәмәғәт эшмәкәре, хөрмәтле шәхесебеҙ Гүзәл апай Ситдиҡова мине "Ниңә талантыңды быға тиклем йәшерҙең?" тип дәртләндереп ебәрҙе. Һеҙҙәмтәлә бөгөн мин үҙемдең шиғри йыйынтығымды ҡулыма алдым. Китабымды башҡорт йәмәғәтселеге бик ыңғай ҡабул итте, ауылға ҡайтҡас, әсәйем менән ҡустым бер кис буйы баштарын да күтәрмәй уҡынылар. Хеҙмәттәштәрем дә "Китабығыҙ бер тында уҡылды", тип ҡеүәтләне. Ижадым тураһында ошондай фекерҙәр ишетеү ҡыуаныдыра ғына. Рухи ҡиблалары дөрөҫ йүнәлештә булған замандаштарым менән бер тулҡында булыуым менән бик бәхетлемен.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**яҙып алды.**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ

# БУШ ВАҠЫТ

**Ватсапта "Ауылдаштар" исемле төркөм асып алдылар ҙа, мәж киләләр. Төркөмдәгеләр һаны ай үҫәһен көн үҫеп, күбәйгәндән-күбәйә бара. Төшөп ҡалғандар ҙа бар, әммә ҡушылғандар иҫәбе уларҙыҡынан күберәк, сөнки, мине лә төркөмгә индерегеҙ, тигән үтенестәр күберәк.**

Яңылыҡтарҙың төрлөһө бар, шулай ҙа күберәге ауыл тормош-көнкүрешенә ҡағыла, мал-тыуар, ҡош-ҡорт тирәһенән ары китмәй. Әлбиттә, бының бер ниндәй яҙығы юҡ, шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул ителәһ, хатта бик күптән шулай булған, киләсәктә лә шулай дауам итер һымаҡ тойола. Һүҙ әрәм итеп тормағандар көтөүҙән ҡасып ҡалған тана-торпо, һыйырҙар, кәзә-һарыҡтарҙың фотоларын һала, стикерҙар ҙа килеп сыға унда-бында, үҙ тауышын бөтөн гәм алдына сығарғандар ҙа бар. Артыҡ ҡуйырып уҡ китмәһә лә, тауыш ҡуптарыусылар, аҡыл өйрәтеүселәр ҙә табыла, ҡыҫҡаһы, ватсаптағы башҡа төркөмдәрҙәге кеүек, виртуаль донъяла аралаша халыҡ. Йәшәрме төркөм, дауам итерме былдай аралашыу, киләсәге бармы "Ауылдаштар"ҙың? Йәшәр. Сөнки админдары шәп, тәжрибәле!

Шулай ҙа... Был замана зәхмәте килеп сыҡҡансы ла ауылдаштар үҙ-ара аралашып йәшәгән бит. Тарҡау йәшәгәндәр ауыл булып, ундағылар бер-береһен ауылдаштар тип таный башлағандан бирле аралашыу бара ла баһа! Бының өсөн өймәкләнешеп, бер-береңдең итәгенә йәбешеп йөрөү ҙә кәрәкмәй, күңел тарта бит ул үҙ кешеләреңдә! Ә күңел кимәлендәге төптән аңлап аралашыу күпкә юғарыраҡ, быны һиҙемләү киммәлендә генә тойоп була. Мәҫәлән, ауылдашыңды ауылда осратһаң, "Сәләм, һаумы!" тип әйтеп үтеүең дә етә. Район үҙәгендә ирҙәр, гәзиттә, ауылдаштарыңа ҡул биреп сәләмләүҙә хуп күрә. Өфөлә осрашһалар, оҙаҡ итеп хәл белешеүҙәре ихтимал. Сит илдә, мәҫәлән, Америкала осрашһалар, иманым камил, әбизәтелнә ҡосаҡлашасаҡтар. Күҙ йәштәре килеп сыҡһа ла, аптыраҡ түгел - тормош шулай ҡоролған! Беҙгә тиклем дә шулай булған. Ә бына "беҙҙән һуң да..." тип әйтергә тел әйләнмәй, сөнки бөгөнгө бик тиҙ үҙгәргән заманда иртәгәне күҙаллау тик ҡурҡыныс уйҙар ғына тыуҙыра, өмөт тигән төшөнсә хәүефле уйҙар артына йәшенә.

Төркөмгә килгәндә, йәшәр ул. Админдары шәп булғандан ғына түгел, статистика шуны раҫлай. Мәҫәлән, "Класташтар", "Төркөмдәштәр", "Тоҡомдаштар" кеүек әлләкүпмеләре йәшәп килә бит. Юҡҡа сыҡҡан ауылдар кеүек, һүнеп, һүрелеп юҡҡа сыҡҡандары ла барҙыр - әлеге лә баяғы тормош бит, ни хәл итәһең. Ут һүнмәһен өсөн утын өҫтәр кәрәк, һүнеп барған ҡуҙҙарҙы ла кире тоҡандырып була - утын өҫтәүсеһе һәм дә ҡоро утыны булһа.

Гәзәттә, социаль селтәрҙәрҙә бәшмәк һымаҡ үҫеп сыҡҡан төркөмдәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар аса һәм ошо юҫыҡта аралашыуға утын өҫтәп тороусыларҙың 99 проценты ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә. Төркөмгә ҡушылған ирҙәр, һунар итергә йә балыҡ тоторға ысҡынғандай, иплəп-иплəп кенә ситкә таялар, йә булмаһа, унда-бында бер тапҡыр, стикер һалып булһа ла, үҙҙәренең барлығын белгертеп торалар - әлəгə лə баяғы, тормош ҡануны шулай: ирҙәр күп һүҙле булмай (Ә шулай ҙа күп һүҙле, ғәйбәткә, төрлө ғәйеплəүҙәргә ҡушылып китеүселәр ҙә осрап ҡуя ул ирҙәр араһында).

Миҫал өсөн бер ситуацияны күҙ алдына килтерәйек. Мәҫәлән, һеҙҙе кемдер тыуған көнөнә саҡырған, ти. Ситке бүлмәлә табын башланғанын көтөп ултыраһығыҙ. Ауыҙ һыуын ҡойолдороп, төпкө бүлмәгә аш-һыу, тәмлетомло ризыҡтар ташыйҙар. Бына хәҙер тиҙҙән мәжлес башланасаҡ! Күптән ҡунаҡҡа йөрөмәгәндәр уғата түҙемһеҙләнеп көтә уйын-көлкөлә, шау-шыулы, тәмле-татлы мәжлестең башланғанын. Ә әлегә сабыр ғына гәп һаталар: ирҙәр бензин хаҡының артыуына уфтана, "Салауат Юлаев"тың "Аҡ барыҫ"ты еңеүенә ҡыуана, ҡатын-ҡыҙҙар иһә һөйләшер һүҙ таба белә. Һүҙ араһында бөтәһе лә күҙ ҡыры менән генә табынға ҡарап-ҡарап ҡуя: тиҙҙән мәжлес башланасаҡ, иң мөһиме шул, ә гәп һатыу ваҡытлыса ғына, көн үткәреү өсөн генә! Тормоштоң ошондай мәлен америка психологы Эрик Берн үҙенең "Игры, в которую играют люди" китабында "ваҡыт уҙғарыу" тип атай. Башҡортсалап әйткәндә, ваҡытты бушҡа уҙғарыу була инде...

Әлеге лә баяғы, тағы төркөмдәр иҫкә төшә: кемдәр күберәк яҙыша? (Баяғы 99 процентты үҙем уйлап яҙҙым, үпкәләмәгеҙ, ҡатын-ҡыҙҙар). Әлбиттә, буш ваҡыты күберәк булғандар, тиерһегеҙ. Юҡ, ваҡытты бушҡа уҙғарыусылар. Тап улар социаль селтәрҙәрҙең ҡолона әйләнә!

Ошо ерҙә тамам, ватсапҡа фото килде! Бер һарыҡ көтөүҙән ҡайтмағайны, шуның фотоһын һалғандар, инәүе беҙҙәкенә оҡшаған...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**буш ваҡытын бушҡа уҙғармай,**
**ошо фекерҙәрҙә теркәй һалып ҡуйҙы.**

ФӘҺЕМ

# БЕРҘӘМЛЕК РУХЫ

Бер ир бик сибәр ҡыҙға өйләнә. Уға һөйөүе сикһеҙ була. Күп тә үтмәй, кәләше тире ауырыуына юлыға һәм уның матурлығы яйлап һүнә башлай. Ә ире сәйәхәттән күҙен йәрәхәтләп ҡайта. Әммә бер нәмәгә ҡарамаҫтан, улар матур итеп йәшәүен дауам итә.

Ваҡыт үтеү менән хәләл ефетенең сибәрлегенән бер нәмә лә ҡалмай, ә ире уны элеккесә һөйөүенән туктамай. Көндәрҙән бер көндө ҡатын вафат була. Ир ныҡ ҡайғыра һәм тәрән һағышҡа бата. Бөтә йолаларҙы үтәгәс, ул был ҡаланан китергә хәл итә.

- Кеше ярҙамынан тыш ни эшләрһең, быға тиклем һин ҡатының арҡаһында ғына йәшәнең бит, - тиҙәр уға.

- Мин күрәм ул. Быға тиклем һуҡыр булып ҡыландым ғына. Әгәр ҙә ҡатыным үҙенең йәмһеҙләнгәнен күреүемде белһә, ул үҙенең сиренә ҡарағанда ла быны ауырыраҡ кисерер ине. Бик яҡшы ҡатын булды, мин уның бәхетен һаҡлағым ғына килде, - тип яуап биргән ир.

Мораль нимәләме? Мораль шунда: Ҡайһы берҙә беҙгә һуҡыр булып ҡыланырға һәм башҡаларҙың етешһеҙлеген күрмәҫкә кәрәк!

- Тештәр телде күпме тешләһә лә, улар барыбер ауыҙ эсендә бергә ҡала. Был - уларҙың ғәфү итеү рухы.

- Беҙҙең күҙебеҙ бер-береһен күрмәһә лә, улар был донъяға бергә ҡарай. Бергә илай, бер үк ваҡытта йомолалар. Был - уларҙың берҙәмлек рухы.

Аллаһы Тәғәлә беҙгә ғәфү итеү, берҙәмлек һәм берләшеү рухын бирһен!

Бер үҙем булғанда мин һөйләйем, бергә булғанда - һөйләшәбеҙ.

Бер үҙем булғанда мин кинәнес кисерәм, бергә булғанда - байрам итәбеҙ.

Бер үҙем булғанда мин йылмаям, бергә булғанда - көләбеҙ.

Быларҙың барыһы ла үҙ-ара аралашыу матурлығы тураһында һөйләй. Үҙебеҙ яңғыҙ ғына булғанда беҙ - бер кем дә түгел. Был донъяла һәр кешенең үҙенә генә хас маҡсаты бар. Бына шул уны әһәмиәтле итә. Бер ҡасан да бер кемгә лә юғарынан ҡарамағыҙ.

**✓ Әлегә тиклем көслө заттар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда аҙыраҡ йәшәй ине, әммә бөгөн уларҙың ғүмер оҙайлығы үҫеше күҙәтелә. Был ирҙәрҙең сәләмәтлегенә күберәк иғтибар итә башлауы менән бәйле.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАРАҺЫН АША,

## тик самалап ҡына

Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә ағы холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм ҡара (70 процент какао), ҡайһылары аҡ шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ашамаҫҡа кәңәш итә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ Төрлө хуш еҫтәр менән дауалау ябай граждандар араһында ғына түгел, ә медицина хеҙмәткәрҙәре араһында ла киң популярлыҡ яулай бара. Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарында Америка онкологик йәмғиәте был дауалау ысулын традицион медицина менән бергә ҡулланырға тәҡдим итә. Ароматерапия ниндәйҙер ауырыуҙан дауаламай, әммә ҡайһы бер пациенттарға сирҙең кире тәьҫирен енергә булышлыҡ итә, мәҫәлән, йөкөһоҙлоҡтан, көнһел болғаныуынан, баш ауыртыуынан ҡотолдора, ти белгестәр. "Ароматерапияла ҡулланылған эфир майҙары сәскә, үҫемлек япрағы һәм тамырынан алына, - ти Цинциннати штатындағы клиника директоры Хал Блэтмен. - Был майҙарҙы ванна ингәндә йәки ингаляциялар рәүешендә ҡулланырға була". Стрестан һәм мускулдар көсөргәнешенән ҡотолоу өсөн ала миләүшә йәки розмарин майы файҙалы. Бөтнөк һәм имбир майын күңел болғаныуы һәм арыуға ҡаршы ҡулланалар. Эвкалипт майы тын юлдарын дауаларға ярҙам итә. Ароматерапияның кире эҙемтәләре лә бар. Табиптар был майҙарҙың бик "әүҙем" булыуын билдәрә һәм аллергияға килтереү мөмкинлеген иҫтә тоторға кәңәш итә.

■ 2030 йылға ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына етәсәк, ти ғалимдар. Әлегә тиклем көслө заттар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда аҙыраҡ йәшәй ине, әммә бөгөн уларҙың ғүмер оҙайлығы үҫеше күҙәтелә. Белгестәр фекеренсә, был ирҙәрҙең сәләмәтлегенә күберәк иғтибар итә башлауы, айырыуса тәмәке тартмауы, зарарлы производстволарҙа эшләмәүе менән бәйле. Әгәр ҙә 1920 йылдарҙа ир-егеттәрҙең 80 проценты тәмәке тартһа, был зарарлы ғәҙәт менән бәйле сирҙәрҙең күбәйеүе үткән быуаттың 70-се йылдарына тура килә. Бөгөн иһә ирҙәр тәмәкенән йышыраҡ баш тарта, шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыусылар күбәйә, ти ғалимдар. Был статистик тикшеренеүҙе үткәреүсе профессор Лес Мэйхью әйтеүенсә, һуңғы 20 йыл эсендә ир-егеттәрҙең ғүмер оҙайлығы 6 йылға артҡан, әгәр ҙә был һан артабан да ошонан кәмемәһә, яҡындағы 20 йыл эсендә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыуып етәсәк.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЭСКЕСЕНЕ...

## әрләүҙән генә файҙа булмаҫ

**"Киске Өфө" гәзитенең һәр һанында тиерлек эскелек афәтенә ҡағылышлы борсолоулы мәҡәләләрҙең сығып тороуын хуплайым. Тирә-яғыбыҙҙа булып торған реаль хәлдәрҙе, күп кенә ғаилә фажиғәләренең тап эскелек менән бәйле булыуы хаҡында бәйән итеүсе авторҙарыбыҙҙың яҙмалары күптәрҙе уйға һалалыр. Ошо юҫыҡтағы Әхмәр Үтәбай, Исмәғзәм Исмәғилев һәм башҡаларҙың мәҡәләләрен ҡалдырмай уҡып барам. Авторҙарыбыҙ илдәге был афәтте тәнҡитләү менән генә сикләнмәй, халыҡҡа үҙҙәренең файҙалы кәңәштәрен дә еткереп тора. Районҙарыбыҙҙа йәйелдерелгән "Айыҡ ауыл" хәрәкәтен пропагандалау буйынса әүҙем эш тә алып барыла гәзитебеҙҙә. Теге йәки был ауылды миҫал итеп, эскелеккә ҡаршы көрәшеүсе ағинәйҙәр эшмәкәрлеге хаҡында ла әленән-әле яҙылып тора. Мин дә ошо мәсьәләгә ныҡ иғтибар итергә тырышам, шул хаҡта йыш ҡына һәр төрлө уйҙарға сумам...**




Эскесе халҡын күпселек әрләй инде, уныһына күнегеп тә бөткәнбеҙ. Әрләү түгел, әллә нимә эшләтеп тор, донъя йөҙөн баҫып алған был алама сирҙән әлегә һис кенә лә ҡотолоп булмай. Шуға күрә, "ҡырын һалырға" яратыусыларҙы һәр саҡ әрләп кенә тороуҙан да әллә ни файҙа юҡтыр, тип уйлайым. Эскесе тип, уларҙың һәммәһен бер бизмәнгә һалыу ҙа хата булыр, миненсә. Эсмәгән саҡтарында ер емертеп эшләп, илебеҙгә файҙа килтереүсе граждандарыбыҙ, хатта туғандарыбыҙ, яҡындарыбыҙ ҙа күп бит. Әммә, яңылышып, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән хәмер арҡаһында упҡынға тәгәрәп барыусыларҙы йәлләп, иртә үлеп китеүҙәренән ҡотҡарып алып ҡалыуға сәбәпсе булғы килә бит әле. Ошо юҫыҡта хөкүмәтебеҙ тарафынан күптән түгел проектланған бер документ буйынса бер аҙ фекер йөрөтөп алмаҡсымын. "Һуҙырға" яратыусыларҙы үҙҙәре үк "һатып алған" сирҙән ҡотҡарыу сараларын ҡайҙырта бит хөкүмәт. Илебеҙҙең һәр ҡалаһында тиерлек булдырылған наркология дауаханалары элек-электән тап шуның өсөн эшләп килә. Ошо арала гуманлыҡ, граждандарҙың именлеген һаҡлау маҡсатын күҙ уңында тотоп, айныҡтыҫтар системаһын ҡабаттан тергеҙеү хаҡындағы Дәүләт Думаһы ҡарары сығыуы ла, һис һүҙһеҙ, насарға түгел тип һанайым. Уларҙы дәүләт йә муниципаль учреждение булараҡ ойоштороу ҡаралыуы айырыуса яҡшы. Әммә һәр бер йоҡлап сығыусынан ниндәйҙер сумма түләтеп алыу ысулының, әлеге лә баяғы, аҡса йыйыу сығанағына әйләнеп китеү ихтималлығы ла бар шул...

Әлбиттә, айныҡтыҫтарҙы тергеҙеү әлеге иҡдисади көрсөк, пандемия шарттарында хөкүмәтебеҙ өсөн бигүк еңелгә төшмәйәсәк. Һәр төрлө ҡытыршы проблемаларҙы ла хәл итергә тура киләсәк. "Мин бөгөн артыҡ "һуғып" ташлағанмын, айыҡтырып ҡына сығарығыҙ әле", тип, был учреждениеға клиенттар үҙҙәре килеп мөрәжәғәт итмәйәсәктәр көн кеүек асыҡ. Шунлыҡтан, урам буйлап иҫерек кешеләрҙе йыйып йөрөр өсөн полиция штаттары, яҡшы махсус машиналар ҙа кәрәк булыр, әлбиттә. Бәғзе бер олораҡтар "вытрезвитель" машинаһына әллә ни ҡаршылашмай ғына ултырһа, йәш егеттәрҙе ҡапылда тотоп булмаясаҡ. Улар, ғәҙәттә, ҡасып китә, ҡайһылары хатта ныҡ ҡына ҡаршылыҡ күрһәтеп, һуғыша башлауға ла күп һорамаҫ. Шунлыҡтан, ағыҙында баҫып тора алмаҫлыҡ хәлгә килгән йә иһә иҫереп, урам буйында йоҡлап ятҡан кешеләрҙе генә һайлап йөрөп алмаһалар, тәртип һаҡлау органдарының халыҡ ризаһыҙлығына ла юлығыуы ихтимал. Урам буйынан ҡайтып, өйөнә етеп барған, яҡшы ғына кәйелгән берәй интеллигент бер аҙ кәңгерләп килгән өсөн әлеге учреждениеның пациентына әйләнеү ихтималлығы ла юҡ түгел. Айныҡтыҫтарҙың үҙен-үҙе финанслауы, хеҙмәтләндереүсе персоналға клиенттар һанына ҡарап эш хаҡы, премия түләүҙәр ҡаралған хәлдә,

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# АШАУҒА ҠАРАП...



**Ҡан баҫымы юғары булған кешеләр был сирҙе "йүгәнләп" тотоу өсөн көн дә табип яҙып биргән дарыу менән дөрөҫ туҡланыу етә, тип уйлай. Ә бына организмға даими рәүештә аҡһым кәрәклеге хаҡында, моғайын, күптәрҙең ишеткәне лә юҡтыр.**

Тоҙҙо мөмкин тиклем әҙерәк ҡулланыу хаҡында күптәр белә, әлбиттә. Йәшелсә менән емеш-еләк кәрәклеге лә бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Ләкин былар ғына етмәй. Диетологияла дөрөҫ тип иҫәпләнгән аҡһымлы ризыҡтар ҡан баҫымы хәүефен 66 процентҡа кәметә. Был Ҡытай ғалимдары тарафынан күп йылдар өйрәнелеп, иҫбат ителде һәм уларҙың фәнни һығымталары "Гипертония" (Hypertension) ғилми журналында баҫылып сыҡты. 1997 йылдан 2015 йылға тиклем улар 12 200 кешене тикшергән. Шуларҙың 35 процентында ҡан баҫымы сире башланған булған. Ғалимдар үҙ күҙәтеүендәге был кешеләрҙә ҡан баҫымының артабан көсәйеү ихтималлығы уларҙың ниндәй аҡһымлы ризыҡтар менән туҡланыуына бәйлелеген асыҡлаған. Бындай ризыҡтарҙы белгестәр 8 төркөмгә бүлеп ҡараған: ит, эшкәртелгән ит (колбаса, ветчина һ.б.), ҡош ите, балыҡ, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, ярҙырылмаған ярма ризыҡтары (һоло, ҡарабойҙай ярмалары, эре тарттырылған ондан икмәк) аҡһымы һәм эшкәртелгән ярма (юғары сортлы он, макарон, таҙартылған дөгө, манный ярмаһынан бутҡа). Аҡһым сығанаҡтары иҫәбендә ярмаларҙы күреп, кемдәндер ғәжәпләнеүе бар, ләкин уларҙа крахмаллы матдәләрҙән тыш, аҡһым да байтаҡ ҡына. Был исемлектә һөт ризыҡтарының булмауы ла сәйер тойолор, ләкин тикшеренеүҙәр үткәрелгән осорҙа Ҡытайҙа һөт ризыҡтары бөтөнләй ҡулланылмаған тиерлек. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәткән: аҡһымды төрлө сығанаҡтарҙан алыу файҙалыраҡ. Мәҫәлән, даими рәүештә дүрт төрҙәге аҡһымлы ризыҡ менән туҡланыу ҡан баҫымы сире ихтималлығын 66 процентҡа кәметеүе асыҡланған. Рацион төрлөлөгә файҙалы матдәләр ҡытлығына юл ҡуймай, күрәһең.

Икенсе һығымта: аҡһымды күп ҡулланыу ҙа, аҙ ҡулланыу ҙа - насар, был йәһәттән сама белеү кәрәк, шул осраҡта өлкәнәйә килә ҡан баҫымы күтәрелеү ихтималлығы күпкә кәмей. Ошо урында тағы бер аҡһымға бай ризыҡ - йомортҡа хаҡында ла әйтеп китеү кәрәктер. Дөрөҫ, балыҡ та шул уҡ рәттә тора, ул бик файҙалы. Уларҙы күп ҡулланыуҙың һис бер зыяны юҡ, киреһенсә, улар сир ихтималлығын күпкә кәметә, тип иҫәпләнә. Әгәр таҙартылған һәм өрҙөрөлгән ярмалар үҙҙәре генә ҡан баҫымынан әллә ни һаҡлай алмаһа, ҡуҙаҡлылар һиҙелерлек файҙа килтерә, ә бына йомортҡа хаҡында ни әйтергә була? Күп йылдар буйы беҙҙә был ризыҡтағы холестериндан ҡурҡытып, уны йыш ҡулланыуҙан тыя килделәр. Бөгөн иһә табиптар уны хатта көн һайын ашаһаң да мөмкин, тигән ҡараштა, тик шулай ҙа бында ла сама белеү мотлаҡ, әлбиттә. Иң мөһиме, йомортҡалағы овокининдар - 6-8 аминокислотанан торған махсус матдә, йәғни полипептидтар ҡан баҫымын түбәнәйтеүсе АПФ ингибиторлы популяр препараттар кеүек үк тәьҫиргә эйә. Әйткәндәй, һөт ризыҡтары ла ошондай уҡ үҙенсәлеккә эйә. Шуға күрә лә был ризыҡтарҙы ҡурҡмайынса көн дә ҡуллана алаһығыҙ.

әлеге "аҡсалы клиентттар"ҙың башҡаларға ҡарағанда күберәк тә тотола башлауы бар. Урам буйында йоҡлап ятҡан асарбаҡтан бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ бит.

Ошо проблемаға ҡағылышлы мәҡәләләрем элегерәк тә сыҡҡылай торғайны. Ғөмүмән, хәҙерге айнытҡыстар боронғоларынан күпкә башҡараҡ булырға тейешле, тимәксемен. Ошо мәсьәләне хәл итеү мөмкинлеге бар, минеңсә. Әйтәйек, дежурҙағы полиция хеҙмәткәрҙәренең, яҡынса, ошондай инструкцияһы булырға тейеш: Беренсенән - улар тик ныҡ иҫергәндәрҙе, йә йоҡлап ятҡан кешеләрҙе генә йыйып алырға тейеш. Бының өсөн, һәр бер клиент буйынса иҫбатлаусы видеоматериалдар булдырыуҙы уларға бурыс итеп йөкмәтергә кәрәк. Иҫерек кешене иң тәүге күргән мәлдән алып, бүлеккә алып килгәс тә, экспертиза барышын да ана шулай "киноға" төшөрөү мотлаҡ, тип уйлайым. Айнытҡыстың бөтә булған бүлмәләре видео күҙәтеү аҫтында булырға тейеш. Артыҡ ныҡ иҫерек булмағандарҙы өйҙәренә алып барып ташлау бурысы ла уларға йөкмәтелергә тейештер...

Бындай учреждениеларға полиция хеҙмәткәрҙәренән тыш, медицина персоналы, башҡа штат берәмектәре лә кәрәк буласаҡ бит әле. Ә бына уларҙы етерлек дәрәжәлә финанс яғынан аҫрау хөкүмәт елкәһендә генә лә тормаһын һәм үҙфинанслау менән дә сикләнмәһен ине, тигән теләк тә бар. Айнытҡыстарҙы бағыуҙы хәмер етештереүсе һәм уларҙы реалләштереүсе, ғөмүмән, спиртлы эсемлектәрҙән ҙур килем алып, шуның менән көн күреп йәшәгән ойошмаларға өлөшләтә йөкмәтеү ҙә ғәҙел булыр ине, минеңсә.

Айнытҡыстар хаҡында һүҙ йөрөтә башлаған күптәр, параллель рәүештә, "алкоголизм" тигән сирҙе дауалау проблемаһын ҡуҙғатырға тырыша. Был, әлбиттә, илебеҙҙә көнүҙәк мәсьәлә булып тора, әммә, айнытҡыстарҙың бындай ауыр сирҙе дауалау менән булыша алмаясағы көн кеүек асыҡ. Ә бына урындағы наркология дауаханаларын бер аҙ киңәйтә биреп, айнытҡысты тап ана шуларҙың бер мөйөшөндә булдырыу, минеңсә, бик тә килешеп ҡалыр ине. Эскелектән бөтөнләйгә ҡотолорға теләгәндәрҙе артабан дә дауаларға шунда ҡалдырыу мөмкинлеге лә булыр ине.

Исмәгзәм Исмәғилев та бер мәҡәләһендә "Эскелеккә ҡаршы түгел, айыҡлыҡ өсөн көрәшеү кәрәк" тип яҙған ине. Уның менән мин тулыһынса килешәм. Был проблемаға етди күҙлектән сығып баҡҡанда, илдә айнытҡыстар булдырыу, хәмер эсемлектәрен һатыу ваҡытын сикләүҙәр, эскелек өсөн һәр төрлө административ яза ҡулланыуҙар, хатта эскеселәрҙе "кешеләрсә йәшәргә" өндәү ҙә был афәттең бик тәрәнгә киткән тамырын барыбер ҡорота алмаясаҡ, минеңсә. Ошо һанап киткән көрәш ысулдарының барыһын да яман шештән ғазапланған кешеләрҙең хәлен ваҡытлыса еңеләйтеүсе, әммә сирҙе дауалауҙы күҙ уңында тотмаған - паллиатив сара һымаҡ ҡына күрәм. Йә булмаһа, аппендицит тип аталған ябай ғына сирҙе алып ҡарайыҡ. Уны ла һәр төрлө антибиотиктар, анальгин менән генә дауалап маташыуҙан һис кенә лә файҙа юҡ. Бөтә донъя хирургтарының берҙәм фекеренсә, бындай ауырыуҙарҙан фәҡәт хирургик юл менән генә ҡотолоп була.

Үҙем табип һәм хәмерҙе ҡәтғи тыйған динебеҙ юлындағы кеше булараҡ, бөгзә ваҡыт бына шулайыраҡ фекерләп алам. Халҡыбыҙ күпләп иманға килмәй, боронғо дини асылыбыҙға - ата-бабаларыбыҙҙың юлына ҡабаттан ҡайтмай тороп, милләтебеҙҙең эскелектән тулыһынса ҡотолоп китеүен күҙ алдына килтерә алмайым. Был афәттең тамырын төптән киҫеүҙе маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. Әлеге хирургик ысул - тап ана шуның үҙе инде ул. Һәр кемебеҙ изге Ҡөрьәндәге Аллаһ һүҙҙәренә инанып, уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәүҙе үҙебеҙ өсөн иң төп әхлаҡи ҡанун итеп алыуыбыҙ, хәмерҙән ҡырҡа баш тартыуыбыҙ ғына беҙҙе ҡотҡарасағына иманым камил. Миҫал өсөн мосолман илдәрен килтерергә була. Уларҙа эскелек тигән нәмә бөтөнләйгә юҡ кимәлендә, Рәсәй составындағы бөгзе бер Кавказ дәүләттәрендә лә ул киң таралмаған. Мин хеҙмәт иткән дәүерҙә күпмелер ваҡыт Дағстандағы Буйнакск ҡалаһында булырға тура килгәйне. Советтар Союзы осоро, магазиндарҙа хәмер эсемлектәре тулып тора. Ә урамда бер иҫерек кешене лә күрмәнем.

Динебеҙ тарихына бағып, Ислам динен ҡабул итерҙән алда хәмер эсеү киң таралған боронғо ғәрәп илдәрен алып ҡарайыҡ. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм башта халыҡты хаҡ дингә өгөтләп, кешеләр иман килтергәндән һуң ғына Аллаһ Тәғәлә тарафынан Ҡөрьәндең хәмерҙе ҡәтғи тыйыусы аяты төшөрөлә. Иғтибар итәйек: шул аятты ишетеү менән инде иманлы булған кешеләр уға шунда уҡ һис һүҙһеҙ буйһона, өйҙәге барлыҡ шарап эсемлектәрен урамға сығарып түгә башлай. Хатта арыҡтарҙа "шарап йылғалары" барлыҡҡа килә...

Күптәр үҙҙәре эскелек менән артыҡ мауыҡмауына ҡарамаҫтан, хәмерһеҙ мәжлестәр үткәреүҙе лә күҙ алдына килтерә алмай. "Шундай хөрмәтле ҡунаҡты араҡы-мәҙар ҡуймай саҡырыу - оят бит..." тигән һымағыраҡ инаныуҙа күпселек. Ә инде кемдәрҙер матур һүҙҙәр менән "мәҙәни рәүештә" эсеүҙе пропагандалай икән, был - һәр саҡ әҙәм балаһын юлдан яҙҙырыу яғын ғына ҡараған шайтанға ярҙам ғына була. Һәр тыйылған нәмәне кешеләргә гүзәл итеп күрһәтеү юлы менән күптәрҙе упҡын төбөнә һөйрәй ҙә инде Иблис. Эскелек арҡаһында хатта бер ғаилә эсенән генә типһә-тимер өҙөрлөк әллә нисә ир егеттең бер-бер артлы яҡты донъя менән хушлашҡан миҫалдарҙы кемдең күргәне юҡ! Иҫерек килеш ғаилә ағзаларын ҡыйырһытҡандар, йә булмаһа, бахмурҙан сыға алмай, үҙ-үҙенә ҡул һалып йә кинәт йөрәге туҡтап үлгәндәр ауыл һайын бит!

Шуға ла, үҙенден йә сабыйындың тыуған көнө айҡанлы дуҫ-иштәреңде йыйып, рюмка сәкәштереп, шунда уҡ ултырған баландың бокалына "газлы һыу" һалып, уның аңында "иҫ киткес матур хәтирәләр ҡалдырырҙай" күңелле кисәләр үткәреүҙәр киләсәк быуынды тик упҡын төбөнә генә һөйрәйәсәк икәнен онотмайыҡ! Өйҙәрҙә мәжлес ҡорған хәлдә лә, уларҙы фәҡәт хәләл ашамлыҡтар менән үткәрергә ғәҙәтләнәйек. Иманға килеүҙе, артабан эскелеккә ҡаршы көрәште бына ошоларҙан башлау кәрәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БЫЛ ҠЫҘЫҠ!*

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмгиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп яталыр?**

## Үҙйөрөшлө автомобилдәр өсөн…

Үҙаллы йөрөй торған автомобилдәрҙе камиллаштырыр өсөн Google, BMW, Audi и Volkswagen кеүек компаниялар миллион долларҙар һалған ваҡытта, ун туғыҙ йәшлек румын студенты тимер ат өсөн күпкә арзан торған система уйлап тапты.

ГУГЛда, мәҫәлән, бындай система йөҙ мең доллар торһа, Будистану тәҡдим иткән яһалма интеллект системаһы дүрт мең доллар ғына тора. Тап ошо асышы өсөн Ионут Будистану Халыҡ ара фәнни-техник Интел конкурсында беренсе урынды яуланы һәм иң юғары бүләккә Гордон Э. Мур премияһына лайыҡ булды. Уҡыусылар, студенттар араһында үткәрелгән Халыҡ-ара фәнни-техник Интел конкурсы донъяла иң ҙур ярыш булып тора. Унда етмеш илдең 433 уҡыу-мәғариф йортонан 1600 уҡыусы һәм студенттар ҡатнашты.

Ни өсөн йәш ғалим тәҡдим иткән ҡорамалдың хаҡы арзан килеп сыға һуң? Будистану Google үҙйөрөшлө машиналарҙағы төп компоненттан - өс үлсәмле юғары сифатлы радарҙан баш тарта һәм уны сифаты яғынан ҡайтышыраҡҡа алмаштыра. Шуға ҡарамаҫтан, уның радары бина, ағастарҙы таный. Ә юлда осраған бөтөн ҡалған вағыраҡ нәмәләрҙе веб-камералар теркәп бара. Веб-камера һәм радарҙан алған мәғлүмәт шундуҡ компьютерға китә, һәм бер үк ваҡытта автомобиль өсөн иң хәүефһеҙ юл тәҡдим ителә.

## Трамплинға нигеҙ һала

Джордж Ниссен трамплинды ун алты йәшендә уйлап таба, тәжрибәһен башта гараж эсендә һынап ҡарай. Идея көтмәгәндә килә. Джорджын гимнаст дуҫы була. Ул гимнастик күнекмәләр өсөн спортзалда шарттарҙың насар булыуына зарлана. Дуҫына ярҙам итергә теләгән Джордж тәүге ҙур эшенә тотона һәм уңышлы килтереп сығара. Хәҙер Джордж Ниссен уйлап тапҡан трамплин менән унар мең спортсмен, миллионлаған мәктәп уҡыусылары файҙалана.

(Дауамы бар).

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш - сикһеҙ һөйөүгә юл

"Мин кешелекте яратам. Кемде күрә алмайым, улар ҙа - кеше". Былай тип әйтеүсе, моғайын, шаяртҡандыр. Үкенескә күрә, донъяға бындай ҡараш киң таралған. Кем өсөндөр һөйөү - бысраҡ һүҙ. Ундайҙар өсөн ысынбарлыҡ шулай, сөнки улар быға ныҡлы ышана. Икенселәр өсөн һөйөү - кешегә күрһәтергә ярамаған тойғо. Шуға ла улар уны башҡаларға күрһәтеп бармай.

"Мөхәббәт донъяны хәрәкәткә килтерә", тигән һүҙҙәр хәҡиҡәткә яҡын. Мөхәббәтһеҙ Йыһанда тартыу көсө лә, гравитация яланы ла, Ҡояш системаһы һәм галактикалар ҙа, енси бәйләнеш тә булмаҫ ине.

Был яҙмалар тормошоғоҙҙо мөхәббәт менән тултырырға ярҙам итер. Ул тәндә көсөргәнештән арындырған халәттә уй-хыялдарығыҙҙың эшмәкәрлегенә генә ҡайтып ҡалмай: күнекмәләрҙең мөһим өлөшө булып өндәге төш тора. Улар хатта өндәге төш сигенән сығып, үҙ-ара яҡшы физик һәм метафизик мөнәсәбәттәр булдырыуҙың айырым ысулдарына ла тәьҫир итә.

Бында төп мәл булып беҙ йыш ҡына урап ҡайтасаҡ бер хәҡиҡәт тора. Уның асылы шунан ғибәрәт: ни тиклем күберәк мөхәббәт ебәрһәң, шул тиклем үк урап ҡайтыр. Ә хәҙер тәү ҡарашҡа мөхәббәт алыу менән бер ниндәй уртаҡлығы ла булмаған кеүек күренгән аҙымды яһайыҡ - уны бүләк итергә өйрәнәйек.

## Һөйөүҙе күрһәтеүҙә ауырлыҡ тыуҙырған йәшерен сәбәптәр

Берберҙәр төрлө илдәрҙә, Мысырҙан башлап Атлантика ярҙарына, Сахара сүллегенән Урта диңгеҙгә тиклем территорияла йәшәһәләр ҙә, азатлыҡты ныҡ баһалаған һәм үҙҙәрен башҡа халыҡтар контролләүенән ҡаҫҡан. Ҡасандыр уларҙың үҙҙәренең теле булған, шулай ҙа ниндәй илдә төпләнһә, шул халыҡтың телендә һөйләшкәндәр, тимәк, башҡа халыҡтарға ла ихтирамлы булғандар.

Бер ваҡыт Төньяҡ Африка буйлап сәйәхәт итеүсе сәйәхәтсе бер бербер менән осраша. Сәйәхәтсе Гавайя утрауҙарынан була һәм ул берберҙәрҙың боронғо теле гавайә халҡының теленә оҡшаш булыуына аптырай. Ә Гавайя утрауҙары менән теләһә ниндәй бәйләнеш һөйөүҙе сағылдыра, сөнки гавайә телендә кеше "мин һине яратам" тимәйенсә, һаулыҡ та һораша, хушлаша ла алмай. Сөнки "алоха" һүҙе унда "мөхәббәт", "һаумыһығыҙ", "һау булығыҙ" тигәнде аңлата. Әгәр беҙ Гавайя утрауҙарында тыуған булһаҡ, һөйөүебеҙҙе белдерергә һис ҡамасаулыҡ булмаҫ ине. Үкенескә күрә, беҙ унда тыумағанбыҙ һәм күптәребеҙҙә был йәһәттән ҡапма-ҡаршылыҡтар тулып ята.

Һеҙ Аллаһ тарафынан барлыҡҡа килтерелгәнһегеҙ, тимәк, уның сағылышы булып тораһығыҙ. Әммә бер нисә йылдан һуң һеҙ ата-әсәгеҙҙең, башҡа кешеләрҙең сағылышына әйләнәһегеҙ. Һуңынан, тирә-яҡтағыларға һуҡранғанда, бала саҡта һеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булғандар, шулай уҡ булайһығыҙ. Хатта шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлайһығыҙ. Бала һөттө түкһә - "Йүнһеҙ!", түтәл тапап үтһә - "Аңра!", уйынсығын ватһа - "Ахмаҡ!" тиһегеҙ. Шулай итеп, үҙегеҙҙең образығыҙ тыуа. Һәм һеҙ тирә-яҡтағыларҙы үҙегеҙҙең кимәлегеҙгә төшөрөп, улар менән тиң булырға тырышаһығыҙ. Бында ата-әсәгеҙҙе ғәйепләргә ашыҡмағыҙ, һеҙгә бары тик ҡулсаны өҙөргә генә кәрәк. Был бик мөһим, сөнки ул һеҙгә тирә-яҡтағыларҙың мөхәббәтен тойорға ҡамасаулай. Бәлки, коллегаларығыҙ яратмағанға, етәксегеҙ кешегә һанамағанға, яҡындарығыҙ онотҡанға үҙегеҙ ғәйеплелер. Был һеҙгә оҡшаймы? Әлбиттә, юҡ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**30 МАЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.35 Т/с "Версия". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм". [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 4.15 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Т/с "Это наши дети". [12+]**
**2.30 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**4.45 "Алтын тирмә". [0+]**

**31 МАЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.35 Т/с "Версия". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Нык бул. [6+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Это наши дети". [12+]**
**3.00 Спектакль "Зятек". [12+]**

**1 ИЮНЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 15.05, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.30 Ко дню защиты детей. Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.35 Т/с "Версия". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**9.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**10.45 Археологическая экспедиция. [6+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 3.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 Тамыр. 30 лет заряжаем сердца. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Тамыр. 30 лет заряжаем сердца. [0+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Гала-концерт детского телевизионного конкурса "Байык-2021". [12+]**
**1.15 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [0+]**
**4.00 Спектакль "Подарок". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**

**2 ИЮНЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.35 Т/с "Версия". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Бай баҡса. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Один шанс из тысячи". [12+]**
**2.45 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**

**3 ИЮНЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Дочь за отца". [12+]
3.20, 4.10 Т/с "Версия". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.30 Х/ф "Испанская актриса для русского министра". [12+]**
**2.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**4 ИЮНЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 15.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05, 15.30 Т/с "Катерина. Возвращение любви". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "По велению сердца". [12+]
0.30 Х/ф "Недотрога". [12+]
3.50 Х/ф "Невеста моего жениха". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Сабантуй". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Нык бул. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт НСО РБ. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00, 3.30 М/ф "Король слон". [6+]**
**2.00 Спектакль "Сумерки". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**5 ИЮНЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.40, 3.20 Х/ф "Шесть соток счастья". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 15.00, 17.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05, 15.30 Т/с "Катерина. Возвращение любви". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Найденыш". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Орнамент". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз)./. [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Это моя профессия". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Бенефис заслуженной артистки РБ Рамизы Мухаметшиной. [12+]**
**19.00 Д/ф "Обыкновенный гений". Виль Тимербулатов". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 2.45 Х/ф "Прогулка по Риму". [6+]**
**1.00 Спектакль "Скупой". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Май айында тыуған көндәрен билдәләүсе барлыҡ уҡыусыларыбыҙҙы, шулай уҡ гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәреп, ошо шатлыҡлы байрамдары тураһында хәбәр итеүсе **Өфө районы** Шамонино ауылынан Зөлфиә Асҡарова, Диләрә Миңлейәрова, Вәсилә Рәсүлева, Ләйсән Хәбибуллина, Рәлиә Биктимерова, Люциә Исхаҡова, Гөлназ Хужахмәтова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғәлийән Төхвәтуллин, **Әбйәлил районы** Аслай ауылынан Фәниә Мансуроваларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ҡыуаныс-шатлыҡтарға тулы бәрәкәтле ғүмер йылдары теләйбеҙ. Яҡындарығыҙҙың изгелеген күреп, һәр эшегеҙҙә уңыштарға өлгәшеүҙән һәм яҡшы уй-теләктәрегеҙҙең тормошҡа ашыуынан кинәнес кисереп йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 май "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович инсц). 16+
**1 июнь "Серле көршәк"** (З. Биишева, Д. Кәримова инсц.), хикәйәт. 18.00 6+
**2 июнь Премьера! "Оҫкон осто, янғын сыҡты"** (А. Ишбулдина), әкиәт. 10.30 6+
**"Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**3 июнь "Алтын асҡыс - remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 10.30 6+
**4 июнь "Мираликундия"** (В. Ливщиц, И. Кичанова), әкиәт. 13.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 июнь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин), әкиәт. 10.00, 11.30 0+
**3 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 июнь "Аленький цветочек"**, ғаилә өсөн мюзикл. 0+
**2 июнь "Под небом Парижа"** орган концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Май - Июнь (Шәүүәл - Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (29) дүшәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 18:53 | 21:37 | 23:07 |
| 31 (1) шишәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 18:53 | 21:38 | 23:08 |
| 1 (2) шаршамбы | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 18:54 | 21:39 | 23:09 |
| 2 (3) кесе йома | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 18:55 | 21:40 | 23:10 |
| 3 (4) йома | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 18:55 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (5) шәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 18:56 | 21:43 | 23:13 |
| 5 (6) йәкшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 18:57 | 21:44 | 23:14 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЗАМАНҒА ЯРАШЛЫМЫ?

**ҺОРАУ: "Мәктәпте тамамлаусылар киләсәк һөнәрен һайлау алдында тора. Уларҙың ошо юҫыктағы ниәтен, маҡсатын, хыялын тормошҡа ашырыр өсөн һеҙҙең уҡыу йортоноң заманға ярашлы ниндәй тәҡдиме бар?"**



***Ришат САБИТОВ, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры:*** Бөгөн Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында мең ярым тирәһе студент белем ала. Элек-электән был уҡыу йорто бик абруйлылар рәтендә булды, бөгөн дә ул Рәсәй колледждарының ТОП-100 исемлегенә инә һәм ярты быуат инде кәрәкле белгестәр әҙерләй. Колледжда яңы команда эшләй. Ниндәй белгестәргә ихтыяж барлығын анализлап, һөнәрҙәр исемлеген тулыһынса үҙгәрттек һәм уҡытыуҙы Рәсәйҙең ТОП-50 исемлегенә ингән һәм әлеге ваҡытта иң талап ителгән бер нисә специальность буйынса алып барабыҙ. Мәҫәлән, банк эше, страховкалау эше, логистика. Бынан тыш, элек-электән туризм, ҡунаҡхана, ашнаҡсылыҡ-кондитерлыҡ эше буйынса белгестәр әҙерләйбеҙ. Ашнаҡсылыҡ-кондитерлыҡҡа килгәндә, пандемия осоро был һөнәр белгестәренең бер ваҡытта ла эшһеҙ ҡалмауын күрһәтте.

Тағы ла беҙҙең ситтән тороп һәм дистанцион технологиялар ҡулланып (кейс уҡытыуы) уҡытыу бүлеге бар. Дистанцион уҡытыуҙа студент колледжға килмәһә лә була, ул бары тик имтихан тапшырырға ғына килергә мөмкин, әммә бер үк өлгөләге диплом ала. Уҡытыу бюджет һәм бюджеттан тыш нигеҙҙә алып барыла. Барлыҡ 10 һөнәр буйынса ла бюджет урындары бар һәм студенттарҙы бер ниндәй имтиханһыҙ, аттестаттың уртаса балы һөҙөмтәһенә ҡарап ҡабул итәбеҙ.

Колледжда яңы халыҡ-ара кимәлдәге ете оҫтахана бар. Мәҫәлән, кондитерлыҡ эше буйынса оҫтаханабыҙ беҙҙең генә түгел, эргә-тирәләге республикалар колледждары араһында иң ҙуры, байы һәм заманса тип һанала.

Уҡыу йортонда спорт һәм ижади секциялар эшләй, колледж нигеҙендә ГТО нормаларын тапшырыу үҙәге ойошторолған. Студенттарыбыҙ ГТО нормативтарын тапшырыуҙа ла әүҙем һәм ҙур теләк менән ҡатнаша.

Хеҙмәт практикаһын "Лента", "Ашан" гипермаркеттарында, ҡунаҡхана сервисы һөнәрен һайлаусылар "Шератон", "Хилтон", "Азимут", "Президент-отель" ҡунаҡханалары селтәрҙәре, "Премьер", "Дуҫлыҡ" ресторандарында үтә. Шулай уҡ Ҡырым, Анапа ҡунаҡханалары һәм отелдәре менән килешеүҙәр төҙөлгән. Алдағы йылдарҙа Төркиә менән хеҙмәттәшлек булдырыуҙы күҙ уңында тотабыҙ. Әле 120 предприятие менән килешеү төҙөлгән, ошо практика ваҡытында уҡ егет-ҡыҙҙар үҙҙәренә эш урындары һайлай һәм һуңғы курстарҙа уларҙа эшләй башлай.

Колледжда студенттар өсөн ашхана бар, ситтән, райондарҙан килеүселәр өсөн дөйөм ятаҡтан урын бирелә. Әйткәндәй, дөйөм ятаҡ та иң яҡшыларҙан һанала. Быйылғы уҡыу йылында бүлмәләргә өр-яңы карауаттар ултырттыҡ һәм барлыҡ түшәк кәрәк-ярағын тулыһынса яңырттыҡ.

Уҡыу йортондағы йәш белгестәрҙе эшкә урынлаштырыуға ярҙам итеү үҙәге аша студенттарҙы эшкә урынлаштырыуҙа ярҙам итәбеҙ, юғары белем алырға теләүселәрҙе уҡыу йорттарына урынлаштырабыҙ. Әле Өфө нефть-техник университеты, Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт авиация техник университеты, РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы финанс университеты, Башҡортостан кооператив институты, Башҡорт дәүләт аграр университеты һәм башҡа вуздар менән хеҙмәттәшлек булдырғанбыҙ.

Шулай уҡ беҙҙең колледж нигеҙендә өҫтәмә һөнәр алыу буйынса уҡытыу ойошторолған. 16 программа эшләп килә һәм теләге булған студенттар үҙҙәренең төп һөнәре менән бер рәттән, яңы профессияларҙы үҙләштерә ала һәм дәүләт таныҡлығы алып сыға. Мәҫәлән, смета төҙөү буйынса, бармен һәм башҡалар. Был һөнәрҙәргә бөгөн ихтыяж бар.

Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы бер ваҡытта ла үҙенең сығарылыш уҡыусыларын ташламай, улар менән һәр ваҡыт бәйләнештә торабыҙ һәм уҡыу йортон тамамлағандарҙың күбеһе беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итә. Улар менән Сауҙа-иҡтисад колледжын тамамлаусылар ассоциацияһын ойоштороп, көн һайын аралашып торабыҙ.


## УҠЫРҒА БЕҘГӘ КИЛЕГЕҘ!

**Уҡыу йорто тураһында:**
Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы ярты быуат инде кәрәкле белгестәр әҙерләп сығара.

**Уҡыуға алыу шарттары:**
Ҡабул итеү имтихандарһыҙ, аттестаттың уртаса балы рейтингы буйынса ойошторола.

**Көндөҙгө бүлектә уҡытылған специальностар**
*(9-сы һәм 11-се синыфтан һуң):*

1. Банк эше.
2. Страховкалау эше.
3. Логистиканың операция эшмәкәрлеге.
4. Иҡтисад һәм бухгалтерия иҫәбе.
5. Коммерция.
6. Тауарҙы өйрәнеү һәм ҡулланыу тауарҙары сифатына экспертиза.
7. Туризм.
8. Ҡунаҡхана эше.
9. Ашнаҡсылыҡ, кондитер эше.
10. Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре.

**Ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡытылған специальностар**
*(11-се синыфтан һуң):*

1. Коммерция.
2. Ашнаҡсылыҡ-кондитер эше.

**Дистанцион технологиялар ҡулланып, кейс ярҙамында уҡытылған специальностар** *(11-се синыфтан һуң):*

1. Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре.
2. Иҡтисад һәм бухгалтерия иҫәбе.
3. Коммерция.




**Өҫтөнлөктәр:**
Дәүләт өлгөһендәге диплом.
Бюджет нигеҙендә уҡытыу.
Имтихандарһыҙ ҡабул итеү.
Спорт һәм ижади секциялар.
Киң практикалар базаһы.
WorldSkills конкурсында ҡатнашыу.
Студенттар өсөн ашхана.
Дөйөм ятаҡта йәшәү мөмкинлеге.
Юғары уҡыу йорттарында уҡыуҙы дауам итеү.
Эшкә урынлашыуҙа ярҙам.

**Һеҙҙе көтәбеҙ:**
Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 54-се йорт.
www.utek-rb.ru
8(3472)228-79-32
utey-priem@yandex.ru
instautek 89174401998
vk.com/torgovyi_college_utek

*3310-сы лицензия 2015 йылдың 22 октябрендә Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү буйынса идараһы тарафынан бирелгән. Дәүләт аккредитацияһы тураһында 2411-се таныклык Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү буйынса идараһы тарафынан 2018 йылдың 23 апрелендә тапшырылған.*


ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ИРЕНСӘСКӘ



**Иренсәскә йәки русса "чистец лесной" күп йыллыҡ үлән, уның бейеклеге бер метрға етергә мөмкин. Ул июнь-август айҙарында ҡыҙғылт сәскә ата. Был үҫемлекте йышыраҡ япраҡлы урманда һәм урман йырғанаҡтарында осратырға мөмкин. Ул Башҡортостандың күпселек райондарында үҫә. Дауалау өсөн үҫемлектең үләне (тупраҡ өҫтөндәге өлөшө) ҡулланыла. Үлән сәскә атҡан мәлендә йыйыла һәм күләгәле ҡоро урында киптерелә, кәҙимгесә һаҡлана.**

Үләндең ҡурай еләге төҫөндәге сәскәләре йылан башын хәтерләтеп тора. Яҡыныраҡ килеп, бер аҙ һаҫығыраҡ, үҙенсәлекле еҫле йомшаҡ япраҡтарын тотоп ҡарағас ҡына уның иренсәскә булыуын айырырға мөмкин. Иренсәскә тураһында үлән йыйыусылар һирәк яҙа, уның химик составы аҙ өйрәнелгән. Борон иренсәскәне бала тапҡан ҡатындың хәлен еңеләйләштереү, йөгөнән тиҙерәк арынырға ярҙам итеү маҡсатында ҡулланғандар. Әгәр ҙә уның төнәтмәһен бәпесләү көнө еткән саҡта эсһән, ул ауыртыныуһыҙ, тайпылышһыҙ үтә, ҡан аҡмай, бала табыу юлдары һуңғылыҡтан яҡшы таҙара. Әйткәндәй, иренсәскәнең бындай сифаттары булыуын табиптар ҙа раҫлай һәм уның бала тапҡандан һуң хәлде яҡшыртыу йәһәтенән дә файҙалы булыуын билдәләй. Шуға ла препараттарын акушер-гинекология өлкәһендә иренсәскәне бала тапҡандан һуң, мәҫәлән, аналыҡ атонияһы һәм аналыҡтан ҡан килеү ваҡытында ҡулланырға тәҡдим итәлә. Иренсәскә препараттары аналыҡҡа ныҡ тәьҫир итә, уның тонусын яҡшырта һәм тартылыуын йышайта.

Бынан тыш, иренсәскә үләненең спирттағы һәм спирт-һыу төнәтмәһе үҙәк нервылар системаһына тынысландырғыс тәьҫир итә (седатив матдә), артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә.

Иренсәскә ағыулы үҫемлектәр рәтенә инә. Дауаларҙы әҙерләгәндә уның миҡдарын теп-теүәл бүлергә кәрәк, ул бөтә ауырыуҙарҙан да бер сама ҡулланыла.

**Күрем даими килмәгәндә, ҡан әйләнеше насарайғанда, инсульт, истерия, һуштан яҙыу, быума (эпилепсия).** 1 балғалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Мастит, төрлө биҙҙәр шешкәндә, яралар, сей яралар** булғанда бөтә төр яраларға ваҡланған үләнде ҡаплайҙар, ә биҙҙәр һәм маститты "йомшартыу" өсөн боҫлама рәүешендә ҡулланалар.

**Имсәк биҙе шеше.** Көн һайын төнгөләккә ҡарай йылы төнәтмәнән компресс эшләп ятырға. Төнәтмә 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп әҙерләнә. Был рәүешле шеш һурығып бөткәнсе дауаланырға. Йәйге осорҙа яңы үлән ҡулланыла. Бәйләместе көнөнә 1 тапҡыр алмаштырырға.

**Бала табыу.** Бала табырҙан бер нисә көн алдан иренсәскә төнәтмәһен эсә башларға. Уны былай әҙерләргә: 1 балғалаҡ үләнгә (өйөмһөҙ) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә (бик һирәк осраҡтарҙа ғына бер эскәндә стакандың 1/5 өлөшөн эсергә). Бала тапҡандан һуң төнәтмәне эсеүҙе дауам итергә, шулай уҡ һәр кем үҙ хәленә ҡарап: барыһы ла яҡшы булған осраҡта 1 балғалаҡ тулыр-тулмаҫ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә, ә ауыр осраҡтарҙа, ҡан килеү туҡтамаһа йәки һуңғылыҡ менән ҡатмарлыҡтар булһа - дозаны көнөнә 2-4 тапҡыр 1/5 стаканға тиклем арттырырға.

**Иҫкәрмә:** иң мөһиме миҡдарҙы дөрөҫ самаларға. Артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтеү буйынса иренсәскә арыҫлан ҡойроғонан да һөҙөмтәлерәк, шуға уның менән гипотония булғанда дауаланырға ярамай. Иренсәскә йөклө саҡта ҡырҡа тыйыла, уны тик һуңғы көндәрҙә генә ҡулланырға мөмкин. Бындай тыйыуҙар иренсәскәнең башҡа төрҙәренә лә (чистец болотный, чистец прямой) ҡағыла.

Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.

(Ҡытай халыҡ мәҡәле).



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЙЫР ИЖАД ИТЕҮСЕЛӘР КҮП ТӘ УЛ...

**Йырҙарға ҡағылышлы фекерҙәрем бар. Үҙем йырсы ла, музыкант та түгел, әммә йыр сифатын һәм йырсы кимәлен баһалай аламдыр кеүек. Мәғәфүр ағай Хисмәтуллиндың "Һандуғас"ын, Фәриҙә апай Ҡудашеваның "Ике аҡҡош"он, Иншар Солтанбаевтың "Буранбай"ын нисә тыңлаһаң да тетрәнмәй, күҙеңә йәш эркелдермәй нисек тыңлайһың! Йыр кеше юлдашы, күңел кисереше. Тарих, булмыш. Тик тауыш сығарыу ғына түгел, ә нисек сығараһың бит әле - эш тап шундалыр. Быны бөтә кеше лә булдыра алмай. Ишеткән моң күңелгә һеңә, һинең булмышың менән йәшәй башлай. Мин үҙем бер ишеткән көйҙө иҫтә ҡалдырырға һәләтлемен. Бала саҡта отоп алған ҡайһы бер йыр-көйҙәрҙе телгә алмаҡсымын.**



...Һуғыштан алдағы осор. Йылайыр районының Ҡашҡар ауылы урамы. Көҙ. Урамдан атлап киләм. Элекке мәсет клубҡа әйләнгән. Тупһаһы янында өс тирәк үҫеп ултыра. Тирәктең береһенә патефон урынлаштырылған. Бик матур еңел көй ағыла. Туҡтап тыңлайым. Октябрь байрамы көнө ине, булһа кәрәк. Күршем Мәхмүтйән ағай Һөйөндөков (ҡурайсы Азат Айытҡоловтың бер туған олатаһы) күрше ауылдан Айса ағай Ғәлиәкбәровты ҡунаҡҡа саҡырған. Айса ағай патефонын һәр саҡ үҙе менән бергә йөрөтөр булған. Бына уның әлеге патефонынан бейеү көйө ағыла. Уға ҡушылып, ҡурайҙа Мәхмүтйән ағай уйнай. Күҙ алдымдан һис китмәй ошо мәл... Мәхмүтйән ағай һуғышта һәләк булып ҡалды, ә Айса ағай күкрәгенә Дан ордены тағып, имен-һау ҡайтып килде. Әле ул юҡ инде, ә бына патефоны бер ҡомартҡы булып ҡалды. Ә Мәхмүтйән ағай ҡушылып ҡурайҙа уйнаған теге көй "Зарифа" булған икән.

Һуғыш осоронда Һынташ мәктәбе уҡытыусыһы Дистанова тигән апайҙың балаларға "Дисәнә" тигән бер йырҙы өйрәткәне иҫемдә. Һүҙҙәре онотолған, ә көйө күңелдә. Күршебеҙ Сәбилә еңгәмдең сепарат әйләндергәндә уның тауышына ҡушылып йырлағаны иҫтә. Ул йырҙы башҡарыусы ла, иҫләүсе лә булманы оҙаҡ ваҡыт. Һәм бына уйламағанда шул көйҙө яңынан ишетергә насип булды! Тик уның көйө генә элеккесә, ә һүҙҙәре бөтөнләй икенсе. Тимәк, шул нигеҙҙә яңы йыр тыуған! Уны Гөлсөм менән Фәрит Бикбулатовтар башҡара һәм ул хәҙер "Һаҡмарым" тип йырлана.

Бына шулай, һуғышҡа тиклем халыҡ яратып башҡарған әллә күпме йырҙар онотолоп ҡалды, үкенескә. Көй яҙып, йыр сығарыу үткән быуаттың урталарында әүҙемләште. Үткән осорҙарҙа онотолоп тороп ҡалған көй-моңдарҙың тергеҙелеп, "яңы йыр" булып китеүенә лә шаһит булырға тура килгеләне...

Бөгөн йыр ижад итеүселәр бигерәк күбәйҙе шул, яҡшымы был, әллә насармы - һүҙем ул турала түгел. Мине шуныһы бик борсой: һүҙҙәре лә, көйө лә иҫтә ҡалмай торған, бер-береһенә игеҙәк кеүек оҡшаш, хатта бер-береһен ҡабатлаусы йырҙар күбәйә. Шуның өҫтәүенә, йырсылар ҙа йәшәрә, күбәйә, ләкин уларҙың күбеһе халыҡ йырҙарын башҡарырға йөрьәт итһә лә, йырҙың һүҙҙәрен боҙоп та ҡуйғылай. Тимәк, халыҡ йырҙарының тарихын белмәй. Был бик үкенесле хәл. Ҡасандыр боронғо йырҙарыбыҙҙы пропагандалау әүҙемләшкәйне. "Башҡортостан" гәзите хатта йырҙарыбыҙҙы тарихы, тексы менән бергә ноталарын да бирә ине. Был матур эш тә онотолдо... Әле бына "Башҡорт йыры" конкурсы бара. Телевидениенан ҡарап барам. Тапшырыуға (12+) тигән йәш сикләү билдәһе ҡуйыла - бына ғәжәп! Мин 4-5 йәшемдә отоп алған көй һәм йырҙарҙы, шөкөр, әле 90 йәшемдә лә күңел түремдә йөрөтәм дә һуң! Ә хәҙер 12 йәшкә тиклем тыңларға ярамай булып сығамы ни халыҡ йырҙарын?

Үткән быуаттың 60-сы йылдарында уҡ әле йырҙарыбыҙ-көйҙәребеҙ текстары менән китап-йыйынтыҡ сығарырға кәрәк, тип гәзиткә яҙған фекерем күптән тормошҡа ашты инде. 1962 йылғы тәүге йыйынтыҡ Хөрмәт Бикҡолов төҙөүендә сыҡҡайны, уның инде һигеҙенсе баҫмаһын файҙаланабыҙ. Мин шулай уҡ Ҡадир Даяндың 1955 йылғы "Йырҙар" китабына ла эйәмен. Шуға күрә лә күп йырҙарҙың тыуыу тарихын, авторҙарын беләм.

Әйткәндәй, ТНВ каналында татарҙар "Жырлик әле" тигән тапшырыу алып бара. Шунда беҙҙең бик күп башҡорт халыҡ йырҙары ла, заман йырҙары ла башҡарыла, ләкин уларҙың башҡорт йырҙары булыуын бер ваҡытта ла иғлан итмәйҙәр, шуныһы күңелгә бик ауыр... Ошо өлкәләге низағтар ҡасан яйланыр, халҡыбыҙ мираҫына күрәләтә оятһыҙ рәүештә ҡул һуҙыусылар ҡасан яуапҡа тарттырылыр икән ул?..

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТЕМӘСТӘ БАР БЕР ЙОРТ...



**Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһындағы олоҫ идараһы бинаһы тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыһы тип танылды.**

Баймаҡ районы Темәс ауылындағы олоҫ идараһы бинаһы төбәк әһәмиәтендәге мәҙәни мираҫ объекты булараҡ Рәсәй халыҡтары мәҙәни мираҫ объекттарының Берҙәм дәүләт реестрына индерелгән. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы шундай бойороҡ сығарҙы. Документта хәбәр ителеүенсә, был бинала I Бөтә башҡорт хәрби съезы үткән, уның эшендә тарихи шәхестәр - Әхмәт-Зәки Вәлиди, Шәһит Хоҙайбирҙин, Шәйехзада Бабич һәм башҡа эшмәкәрҙәр ҡатнашҡан. Съезда Башҡорт хөкүмәте вәкәләттәрен алған комитет ойошторолған. 1896-1897 йылдарҙа төҙөлгән ике ҡатлы бинала хәҙер урындағы тарихи һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы урынлашҡан. Документта һаҡлау предметы, сиктәр һәм бина биләмәһен файҙаланыу режимы раҫланған.

1919 йылдың мартынан 1920 йылдың июненә тиклем Темәс ауылы Башҡорт Совет Республикаһының баш ҡалаһы статусына эйә булған. Ауылдың бер өлөшөнөң "Тарихи ауыл" тигән статусы бар. Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин һүҙҙәренсә, Темәстә 20-гә яҡын тарих һәм архитектура ҡомартҡыһы һаҡланып ҡалған. Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы етәксеһе Олег Полстовалов билдәләүенсә, дәүләт реестрына индерелгән ҡомартҡылар һаны буйынса Башҡортостан илдә - унынсы, Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында өсөнсө урынды биләй. Әлеге ваҡытта республикала 5717 мәҙәни мираҫ объекты урынлашҡан, шуларҙан 1864 ҡомартҡы Берҙәм дәүләт реестрында иҫәпкә алынған, 3853-ө - Асыҡланған мәҙәни мираҫ объекттары исемлегендә.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЛЫ БАРҘЫҢ - УРЫНЫ,

## ҡыҙы барҙың - ҡәҙере

Яман күҙ хайуанды ҡаҙанға керетер, яман һүҙ әҙәмде ҡәбергә керетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙе уҡырға һәләтле булмаған башҡаларҙы уҡытыр.

**(Оскар Уайльд).**

Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Шәхси яуаплылыҡ тойғоһо булмағандарҙа яман инстинкттар өҫтөнлөк итер.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер маҡтанырға яратҡан әҙәм үҙенең дуҫтары алдында, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ һәм бер һүҙ әйтмәйенсә лә теләһә кем менән уртаҡ тел таба алам, тип ысҡындырған. Дуҫтары уның был ғәжәйеп һәләтен тикшерергә, үҙ күҙҙәре менән күрергә ҡарар иткән. Бына улар бергәләп юл буйлап атлап киләләр. Ҡаршыларына бер көтөүсе осраған. Дуҫтарының береһе маҡтансыҡҡа: "Һин ошо көтөүсе менән уртаҡ тел табып ҡара әле", - тигән. Бер һүҙ ҙә әйтеп тормайынса, маҡтансыҡ көтөүсе эргәһендә туҡтап, уға уҡталған. Ҡулын күтәреп, көтөүсегә һуҡ бармағын күрһәткән. Көтөүсе уға яуап итеп ике бармағын өҫкә күтәргән. Шунан маҡтансыҡ бер ҡулындағы бармаҡтарын яҙып ебәреп, көтөүсегә устарын йәйеп күрһәткән. Уға яуап итеп көтөүсе йоҙроҡ төйнәгән.**

**- Әйттем бит мин һеҙгә! - тип ҡысҡырып ебәргән маҡтансыҡ. - Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, мин көтөүсе менән уртаҡ тел таптым! Беҙ бер-беребеҙҙе аңланыҡ. Ҡулымды күтәреп, бер бармаҡ күрһәткәндә, көтөүсенән: "Һин Хоҙайҙың берҙән-бер булыуына ышанаһыңмы?"- тип һораным. Көтөүсе миңә ике бармағын күрһәтте һәм: "Эйе, Хоҙайҙың берҙән-бер булыуын һәм уның бәйғәмбәре Мөхәммәт икәнен танныйым", - тине. Устарымды күрһәтеп, мин уға: "Ә һин көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡырға кәрәк, тигән талапты үтәйһеңме?" - тип һораным. Ул миңә йоҙроҡҡа төйөлгән ҡулын күрһәтеп: "Эйе, Ислам ҡанундарын бына ошолай, йоҙроҡҡа төйнәлгән һымаҡ ныҡлы тотам", - тип әйтте...**

**Маҡтансыҡтың дуҫтары уның был һәләтлегенә һис кенә лә шикләнмәҫтән, көтөүсене тикшерергә була һәм уға һорау бирә.**

**"Эйе, мин был кешене бик яҡшы аңланым, - ти көтөүсе. - Һуҡ бармағын күрһәткәндә ул минең күҙемде соҡорға теләгәнен аңланым. Шуға ла мин, ә мин һинең ике күҙеңде лә соҡоясаҡмын, тип, ике бармағымды күрһәттем. Ул, моғайын, асыуланғандыр һәм минең яңағыма сабырға теләп, миңә усын күрһәткәндер. Шунан иһә мин, ә мин ошо йоҙроҡтарым менән башыңды төйәсәкмен, тип, уға йоҙроҡ төйнәнем. Эйе, беҙ бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22021

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 649

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.